✓ **_Үҙ-ара тартҡылашыуҙар һәм бәхәстәр күп булһа, баҫыу бушап ҡала. Баҫыу бушаған, келәттәр һәм аҙбарҙар ҙа бушай. Аҙбарҙар бушаған, дәүләт ярлылана. Дәүләт ярлыланғас, халыҡ тәртипһеҙлеккә һәм урлашыуҙарға өйрәнә. Халыҡ тәртипһеҙлеккә һәм урлашыуҙарға өйрәнгәс, тауар етештереүҙәр туҡтала. Тауар етештереү туҡтала икән, халыҡтың алдашыуҙан башҡа сараһы ҡалмай._**

**Боронғо ҡытай фәлсәфәһе.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7 - 13 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№19 (437)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бензинға хаҡтар арта,**

аҙыҡ-түлек ҡиммәтләнә



5

**Атайҙар үҙҙәрен - ил өсөн...**

әсәйҙәр үҙҙәрен тоғролоҡҡа ҡорбан итте



6

**Үҙҙәрен түгел,**

киләсәк быуынды хәстәрләй улар



7

**Бала сағыбыҙҙы...**

һуғыш тартып алды



8-9

14 **ТВ-программа**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Фашист илбаҫарҙарын еңеүҙе беҙ ни өсөн Бөйөк Еңеү тип атайбыҙ? Бөгөнгөбөҙ өсөн нимәне аңлата Еңеү байрамы?*

***Имаметдин ӘБУЗӘРОВ, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы ветеран, 86 йәш:*** Был ысынлап та Бөйөк Еңеү булды, сөнки беҙ үҙ ватаныбыҙ өсөн генә һуғышманыҡ, Европаның фашизм ҡоллоғо аҫтында ҡалған башҡа илдәрен дә азат иттек. Был Бөйөк Еңеү булды, сөнки ул тиҫтәләгән миллион ҡорбандар аша яуланды, күп ҡан, йәш түгелде. Совет халҡының тиңе булмаған бөйөк ҡаһарманлығы арҡаһында ғына мөмкин булды был Еңеү. Йәш булыуым сәбәпле, фронтҡа мин һуғыш бөтөүгә табаныраҡ алынһам да, уның фажиғәләрен үҙ йөрәгем аша кисереп, үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Бындай ҡанлы мәхшәрҙән баҫҡынсы түгел, ә үҙ иленең азатлығы өсөн көрәшкән һәм шуға ла изге маҡсатлы булған яҡтың еңәсәге көн кеүек асыҡ ине. Ул саҡ совет илендә күпме милләт йәшәһә, шуларҙың бөтәһенең дә вәкилдәре бер милләт булып, илен, ерен, ғаиләһен ҡотҡарыусы, яҡлаусы сифатында һуғышты. Миллиондар аңлы рәүештә үлемгә барҙы, әммә сигенмәне. Изге ҡан түгеп яуланғанға күрә лә бөйөк ул беҙҙең Еңеү.

***Азамат МӘҺӘЗИЕВ, БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты студенты:*** Бөйөк Ватан һуғышы һәм Бөйөк Еңеүҙең ниндәй хаҡ менән яуланыуы хаҡында йәш быуын тарих дәрестәренән, китаптарҙан уҡып, кинолар ҡарап ҡына белә һәм фекер йөрөтә. Ә инде кемдәрҙең ҡартатай, олатайҙары яуҙан исән ҡайтыу бәхетенә өлгәшкән, уларҙың балалары һәм ейәндәре һуғышта ҡатнашҡан яугир хәтирәләре буйынса ла белә был хаҡта. Әсәйемдең атаһы - Сәлимйән ҡартатайым һуғышта алған яраларҙан төҙәлә алмай 1953 йылда вафат булған. Ләкин мин уның хаҡында әсәйемдең һөйләүе буйынса ла, ҡартатайымдың һуғыш һәм, ғөмүмән, тормош хаҡындағы яҙмаларынан, шиғырҙарынан да беләм. Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арнап, әсәйем Зөһрә Ҡотлогилдинаның былтыр "Һуғыш балалары - тарих яралары" тигән китабы баҫылып сыҡҡайны. Бөйөк Еңеүҙең әһәмиәтен, уның нисек яуланыуын аңларға минә ошо китап та тормош дәреслеге кеүек булды. Әгәр совет халҡы, бөтә милләттәр бер булып, Гитлер илбаҫарҙарына ҡаршы яуға күтәрелмәһә, үҙ ғүмерҙәрен йәлләмәй иле өсөн фиҙа ҡылмаһа, белмәйем, был еңеү булмаҫ та ине, бәлки. Ул турала уйлауы ла ҡурҡыныс. Элек халыҡта патриотизм тойғоһо көслө булған, ана шул уларҙы Еңеүгә илткән дә инде. Шуға ла ул Бөйөк тип атала.

***Рәушания СӘЛИХОВА, Өфө ҡалаһы М. Искужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейының тарих уҡытыусыһы:*** Тарих дәрестәрендә һуғыш темаһын үткәндә балаларға фашизмды Еңеүҙең донъя кимәлендәге әһәмиәтенә лә баҫым яһарға тырышам, сөнки совет Армияһы илебеҙҙе генә түгел, тотош көнсығыш һәм үҙәк Европа илдәрен дә азат итә. Еңеүҙең бөйөклөгө ана шунда ла күренә. Дөрөҫ, һуңғы ваҡыт Көнбайышта Бөйөк Еңеүҙең тарихи әһәмиәтен кесерәйтеп, уны Икенсе бөтә донъя һуғышының бер эпизоды итеп кенә күрһәтергә, совет халҡының һуғыштағы ҡаҙаныштарына "ревизия" яһарға маташыусылар бар. Тарихи фактарҙы боҙоп күрһәтеүҙәргә юл ҡуйырға ярамай. Дәрестә уҡыусыларға Еңеүҙең әһәмиәтен объектив баһаларға өйрәтәм, сөнки тарих хаталаныуҙарҙы ғәфү итмәй. Шуныһы өсөн шатланам: был темаға әңгәмәләшкәндә лә, уларҙан инша йә анкеталар яҙҙырып алғанда ла балаларҙың Еңеү көнө өсөн ҡартатай-олатайҙарына рәхмәтле булыуҙары, һуғыш ветерандарына ололап, хөрмәтләп, шул уҡ ваҡытта ҡыҙыҡһынып ҡарауҙары күренә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**яҙып алды.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# БАТЫРЛЫҠ БИЛДӘҺЕ БУЛҒАН...

## миҙалдарығыҙҙы тағығыҙ, олатайҙар!

**Еңеү көнө яҡынлаша башлаһа, күңелде аңлатып бөтә алмаҫлыҡ тойғо - һыҙланыумы, һағыныуымы, хәсрәтме, шатлыҡмы биләп ала ла, ошо көн үтеү менән ул тойғолар сигенеп, икенсе Еңеү көнөнә тиклем баҫылып тора. Мин ошо хәлдең ҡайҙан килгәнен дә аңлай алмайым. Бәлки, мин тыуғансы уҡ атайым-инәйемдең, уларҙың әне-ағайҙарының, олатай-өләсәйҙәрҙең ғазабы, һыҙланыу-борсолоуҙары, өмөттәре шулай ҡаныма һеңгәндер.**



Шулайҙыр. Уйлап ҡараһаң, беҙгә, һуғыштан һуң тыуған быуынға, ул афәт ҡайҙалыр алыҫта ҡалған бер ваҡиға булырға тейеш кеүек тә бит. Хәйер, үҙебеҙҙе белә белгәндән алып һуғышта ҡатнашҡан, тылда яфа сиккән кешеләр мөхитендә үҫтек беҙ. Һәр өйҙә һуғыш темаһы әңгәмә уртаһында була һәм иҫтә иң ныҡ ҡалғаны - һуғыш хәлдәрен ололар бышылдап, ҡыҫҡырмай ғына, йыйынаҡ ҡына итеп һөйләрҙәр ине. Нимә булғандыр был - шул уҡ репрессияларҙан ҡалған шомланыуму, әллә үткәндәрҙе ҡабат кисереүе ауыр булғанмы (һуғыш киноларын ҡарағанда, атайыңдың тыбыҡтары ҡалтырай торғайны, тип хәтерләй инәйем), әллә беҙҙең бала күңелен ҡурсалауымы? Бәлки, рәсми хәкимиәт даирәләре тарафынан һуғыш әхүәлдәрен өнәмәү сәйәсәтенең нәтижәһе лә булғандыр.

(Дауамы 2-се биттә).

✓ Башҡорт бер ваҡытта ла башҡаларҙың еренә, иркенә ҡаныҡмаған, һәр саҡ үҙ еренән дошманын ҡыуып сығарғандан һуң ҡылысын ергә саба белгән. Милләтебеҙҙе ошо асылы йәшәтә лә инде.



МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ҺУҢҒЫ ҠЫЛЫСТЫ ЕРГӘ САП

**Был әйтем бик боронғо заманда, ырыу-ҡәбиләләр ер, мал, мөхит өсөн туҡтауһыҙ һуғыштар алып барған дәүерҙә барлыҡҡа килгәндер. Әйтемде тура мәғәнәһендә аңлағанда кеше йәнен ҡыйыр өсөн яһалған ҡоралдың ергә сабылыуы асыуҙы сығарыуға бәйле мәҙәк кенә күренеште кәүҙәләндерә һымаҡ. Шулай ҙа был әйтемдең халыҡты, милләтте киләсәкле итер, милли идея булыр мәғәнәһе нимәлә һуң?**

**Беренсенән**, һуңғы ҡылысын ергә сапмаған, йәғни һуғышты туҡтатмаған ырыуҙарҙы, ҡәүемдәрҙе артабан нимә көткән һуң? Миҫалға Алтын Урҙа империяһын ғына алайыҡ. Әгәр ҙә үҙенә ҡаршы булған ил эсендәге ырыуҙарҙы ҡыйратып, уларҙы үҙенә буйһонорға мәжбүр иткәндән һуң бөйөк Сыңғыҙ хан титулын яулаған Темуджин, тәүҙә Ҡытай яғына, һуңынан Европаға табан ҡуҙғалмаһа, йәғни ҡылысын ергә сапҡан булһа, уны һәм монгол халҡын нимә көтөр ине? Дөрөҫ, хәҙерге иҡтисади яҡтан артта ҡалған аграр Монголия дәүләтселеге Евразияның иң алдынғы дәүләттәренең береһе булып китер ине, моғайын.

Кешене, милләтте, дәүләтте икенсе кешенең, милләттең һәм дәүләттең еренә, милкенә ҡаныҡыуы харап итә. Ғөмүмән, һәр бер империяның һәләкәте башлыҡтарының, ҡылыстарын ергә сапмайынса, артабан һуғышты дауам итеүенә бәйле бит. Сыңғыҙ хан кеүек үк ярты донъяны яулауға өлгәшкән Аттила ла, хәҙерге Венгрия ерҙәренә барып еткәндән һуң ҡылысын ергә сапмай, аҙаҡҡаса барған булһа, беҙ бөгөн донъяла был дәүләттең барлығын да белмәҫ инек. Адольф Гитлерҙың да һәләкәте Германиялағы һәм уға сиктәш дәүләттәрҙәге үҙенә ҡаршы булған көстәрҙе тар-мар иткәндән һуң, ҡылысын ергә сапмайынса, артабан Советтар Союзы яғына ҡуҙғалыуына туранан-тура бәйле. Уйлай китһәң, Ҡаҙан ханлығын ҡыйратҡандан һуң Иван Грозный ҙа ҡылысын ергә сапмаған, империалистик асылын Уралға, Себергә, Алыҫ Көнсығышҡа, Кавказға, Урта Азияға, Балтика буйына йүнәлтеп, шул йүнәлеш һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән СССР империяһы ла юҡҡа сыҡты, уның вариҫы Рәсәй Федерацияһы ла был тойғонан азат түгел...

Был миҫалдар барыһы ла милләттең йә дәүләттең икенсе милләткә, уның еренә ҡаныҡыуы нимәгә алып килеүе хаҡында һөйләй. Ербаҫар ер артынан ер, ил артынан ил баҫа, ошо юл менән баҫып алған ерҙәрҙә үҙенә ҡаршы көстәрҙе уята, дошмандарын бер йоҙроҡҡа туплай, дуҫлаштыра, берҙәм ғәскәрен ойоштора һәм шул юл менән юҡҡа сыға.

Башҡорттар ҙа этник империяны (был хаҡта мин "Беҙ - бәйғәмбәрле милләт..." тигән сығышымда яҙғайным. 2010 йыл, 5-се һан) тәшкил итә йәғни милләт составындағы йөҙҙән ашыу ырыу һәр береһе Ер шарындағы ниндәйҙер дәүләттә йәшәүсе ҡәүемдәр, милләттәр менән тамырҙаш. Әммә улар беҙҙең милләт составына баҫып алыу, яулау юлы менән ҡушылмаған. Төрлө тәбиғи катаклизмдар, донъя һуғыштары, империялар шашыныуҙары ул ырыуҙарҙы Уралтауға, ундағы башҡорт милләтенең ядроһына килеп һыйынырға мәжбүр иткән. Башҡорт бер ваҡытта ла башҡаларҙың еренә, иркенә ҡаныҡмаған, һәр саҡ үҙ еренән дошманын ҡыуып сығарғандан һуң ҡылысын ергә саба белгән. Милләтебеҙҙе ошо асылы йәшәтә лә инде.

**Икенсенән**, һуңғы ҡылысты ергә сабыуҙы һуғыштан тыныс тормош шарттарына күсеү тип тә аңларға була. Сөнки гел һуғышып йәшәгән ил миктәй, эштән ситләшә, гел генә байлыҡты, ризыҡты еңелгән илдән килгән трофей иҫәбенә туплау милләтте көнитмештән, донъя көтөүҙән айыра. Шуға күрә үҙ ерендән дошмандарҙы ҡыуып ебәргәндән һуң ҡылысыңды ергә сабыуҙы шул уҡ тимерҙән, ҡоростан яһалған ҡылысты ергә һабан төрәне, көрәк итеп сабыу тип тә аңларға була бит. Гел һуғышып йәшәп булмай. Бер шағир әйтмешләй, ҡылыстар ҙа, һабандар ҙа тимерҙән ҡойола.

**Өсөнсөнән,** был әйтемде "Асыуыңды буйыңа һеңдер", "Асыуланған - еңелгән", "Ир-егеттең күңелендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр" тигән әйтемдәр юҫығында ла ҡарарға була. Әлбиттә, улар һис шикһеҙ кешене дөрөҫ йәшәргә өйрәтеүсе кәңәштәр.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# БАТЫРЛЫҠ БИЛДӘҺЕ БУЛҒАН...

## миҙалдарығыҙҙы тағығыҙ, олатайҙар!

**(Башы 1-се биттә).**

Еңеү көнөн рәсми дәүләт байрамы итеп тик 20 йыл үткәс кенә - 1965 йылда билдәләй башланылар. 1965 йылдың февралендә ошо турала Юғары Совет указын радионан уҡығас, атайымдың: "Наконец-то", - тигән һүҙҙәре иҫтә ҡалған. Тулҡынланған ваҡытында шулай руссалап һөйләп ҡуя торғайны ул. Был һүҙҙә уның өмөттәре, көтөүҙәре, әрнеүе һәм башҡа әйтелмәгән кисерештәре сағылғандыр. Ләкин йәшәргә бик күп ҡалмаған булған шул уға - һуғыш яраларына башҡа сирҙәр ҙә өҫтәлеп, 1968 йылда 45 йәшендә вафат булды. Һуғыштан һуңғы ғүмерендә башҡа бер ниндәй ҙә байрам юҡ ине уның өсөн, тип хәтерләй 86 йәшлек инәйем. Еңеү булмаһа, башҡаһы булмаҫ ине, ти ул.

Мин һуғыштың ҡот осҡос фажиғә булыуын тыныс тормош мөхитендә үҫһәм дә бала сағымда уҡ аңланым. Яралары төҙәлмәгән ағайҙарҙың яфаланыуы, ауылда дауалау хәлдәренең бөтөнләй булмауы, иҫән ҡайтҡандарының да әкрен генә үлемгә дусар ителгән кешеләр хөкөмөндә булыуы, ғөмүмән, кешеләргә булған битарафлыҡ һуғыш ғазаптарын тағы ла тәрәнәйткәндер. Һәр кем үҙ ысулын табып дауалана торғайны ул саҡтарҙа, беҙ атайыңдың төҙәлмәгән яраларын яндырылған кейеҙ көлө һибеп дауалай торғайныҡ, тип һөйләй инәйем.

Яугирҙарҙың ҡан ҡойоп ҡаҙанған һуғыш наградаларын тағырға тартыныуы ла аптырата ине мине. Беҙ бит уларҙы тәтәй итеп уйнатып йөрөтә инек. Егерме йыллыҡ Еңеү байрамына арнап яҙылған булдымы икән, "Фронтовики, наденьте ордена" тигән йыр сыҡҡайны. Ә үҙ ваҡытында яугирҙарға нисек кәрәк булған ошондай орандар.

Әле иҫән булған һуғыш ветерандарына иғтибарҙың артыуы - дәүләттең һуң булһа ла үҙ бурысын үтәүе ул. Ләкин был иғтибар ни тиклем юғалтыуҙар кисергән һәр ғаиләлә үкенеү хистәре лә тыуҙыра: "Ә беҙҙекеләр ятып ҡалды..." -тип әйтеп ебәрә улар йыш ҡына. Ошоларҙы иҫтә тотоп, һуғыш ауырлығын күтәргән әле иҫән тыл эшсәндәренә лә иғтибар күрһәтелһен ине. Еңеү көнө айҡанлы ғына түгел.

Һуғыш һәм солох мәсьәләләре - ул йәшәү мәсьәләһе. Бөгөнгө көндә лә элекке идеологик ҡоршауҙар беҙҙең фекерләү даирәһен шул тиклем ныҡ ҡыҫҡан. Рәсәйҙең аҡыллы баштары әлегә тиклем милли идея кәрәк, тип һөрән һала, ошо идеяны төрлө варианттарҙа һүрәтләргә маташа. Ә ошо Еңеү, түгелгән ҡандар, ҡорбандар үҙе шул идеяның һынланышы булып, инде 65 йыл беҙгә ишара яһамаймы ни? Ватанды һөйөү, уны ҡурсалау, яҡлау үҙе Оло идея түгелме ни? Патриотизм тигән бөйөк төшөнсә күп ҡулланыуҙан таушалып үҙенең асылын юғалтты, ахыры. Үҙ иленде яратыу кескәй генә ауылыңдан, ҡасабаңдан, ҡалаңдан башланып, Оло, Бөйөк Рәсәй кимәленәсә күтәрелеп, Ерҙе, эскән һыуыңды, һулаған һауаңды, үҙ тупрағыңды яратып һаҡлауҙан башланһа, ошо патриотизм булмаҫ инеме һуң?

Кемделер ғәйепләү ниәте менән яҙмайым быны, һуғыштың ниндәйе генә булмаһын, ул оло трагедия һәм уның шандауы йылдарға һуҙылыуын ғына әйтеп үткем килә. Бәлки, бөгөнгө көндә күп ир-ат халҡының ғәйрәтһеҙ булыуы, донъя көтә алмауы, насар ғәҙәттәргә бирелеүе ошо һуғыштың да емергес нәтижәһелер...

**Клара ХӘМИҘУЛЛИНА.**
**Дәүләкән районы**
**Мәкәш ауылы.**

КЕМ АЛЫҠ!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу бара. Белеүегеҙсә, апрелдә лә "Бүләгебеҙҙе кем алыҡ!" сараһы дауам итте һәм был юлы кеҫә телефоны Бөрйән районы Ғәлиәкбәр ауылынан Хөснә Исламбаева өлөшөнә сыҡты. Май айында гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә башҡорт телендәге 5 "Ҡөрьән - Кәрим" китабы вәғәҙә итәбеҙ.**

**Әйткәндәй,** кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө** менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп,** 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына яҙылыу өсөн яңы хаҡтарҙы хәбәр итәбеҙ: 50665 индекслыһына **340 һум 92 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

- Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.
- Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **210 һум**.
- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ БР Президенты Рөстәм Хәмитов БР Фәндәр академияһының дөйөм йыйылышында ҡатнашты. Рөстәм Зәки улы бинаның фойеһында ойошторолған экспозицияны ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡарап сыҡты. Йыйылышта БР Фәндәр академияһының яңы президенты итеп Рәмил Бәхтизин һайланды.

✓ БР Президенты Тажикстан Республикаһының Өфө ҡалаһындағы Генераль консулы Содик Имомов менән осрашты. Осрашыуҙа Башҡортостан менән Тажикстан араһында тауар әйләнешен арттырыу зарурлығы, шулай уҡ социаль мөнәсәбәттәрҙе һәм мәҙәни бәйләнештәрҙе киңәйтеү хаҡында һүҙ барҙы.

✓ 12 майҙа иртәнге сәғәт 10-дан БР Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтай йортоноң бәләкәй залында "Башҡортостан Республикаһында бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү өлкәһендәге ҡануниәттең тормошҡа ашырылыу барышы тураһында"ғы мәсьәлә буйынса парламент тыңлауҙары үткәрелә.

✓ Учалы районынан ун бала тәрбиәләүсе Зилә һәм Раил Лутовтар ғаиләһенә Башҡортостан Республикаһы Президенты исеменән трактор тапшырылды. Был ғаилә 2009 йылда Рәсәй Федерацияһы Президенты Указы менән "Ата-әсә даны" орденына ла лайыҡ булған.

✓ Рәсәй почтаһы хеҙмәткәрҙәре был көндәрҙә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына, тыл хеҙмәтсәндәренә һәм блокадала булғандарға Рәсәй Президенты Дмитрий Медведевтың Еңеү көнө менән ҡотлауын таратты. Беҙҙең республикала йәшәүсе 120 мең ветеран 9 майға тиклем ошондай ҡотлауҙар алып шатланасаҡ.

✓ Башҡортостан Республикаһының "Башҡорт-ғәрәп дуҫлығы йәмғиәте" төбәк ижтимағи ойошмаһы "Серле ғәрәп донъяһы" тигән ижади конкурстар ойоштора. Бәйгеләрҙең береһе республиканың барлыҡ дөйөм белем биреү учреждениелары уҡыусылары араһында "Иң яҡшы инша" һәм "Иң яҡшы һүрәт йәки фотоһүрәт" номинациялары буйынса үткәрелһә, икенсеһе урта махсус һәм юғары уҡыу йорттары студенттары араһында иң яҡшы инвестиция һәм инновация проекттарына ярыш булараҡ ойоштторола.

***✔ Дәүләт үҙ структураларында даими яҡшыртыу юлы менән бармай. Ә бер урында тапана, кабинетта ултыра һәм үҙгәрергә теләмәй! Шуға күрә дисбаланс барлыҡҡа килә, дәүләт һәм инновацион ҡарарҙар араһында бюрократия үҫә.***

## ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН




**"Роснано асыҡ акционерҙар йәмғиәте Рәсәй төбәктәрендә инновация иҡтисадын үткәреүсе булып тора. Шундай шаартыулы билдәләмә бар: фән аҡса яҙҙамында яңы белем ала, ә инновация яңы белем яҙҙамында аҡса эшләй. Ябайлаштырып әйткәндә, инновация - фәнни эштәрҙе тормошҡа ашырыу, яңы бизнес булдырыу процесы. Илдә эштәр күп, ә бына ватан технологиялары, производстволары, инженер һәм ИТ продукттары бик аҙ. Роснано бөтөн ил буйынса шундай тормошҡа ашырлыҡ проекттарҙы һайлап алып, уларҙы финанслай, уларҙы аныҡ производствоға тиклем "үҫтерә". Әлбиттә, был проекттарҙың "наносоставы" булырға тейеш. Нано метрҙың 9 дәрәжәһендә 10-сы үлсәмдә характерлаусы өлөш. Былай технологиялар бөтөн донъяла әүҙем эшләнә. Өфөлә лә былай эштәр бар, әммә тормошҡа ашырылған производстволар юҡ. Декабрҙә электрохимик станоктар эшләү заводын астыҡ. Бәләкәй генә завод, әммә ул ҡыҙыҡлы, ҙур һәм масштаблы производство булып үҫергә тейеш. Роснано ярҙамында яңы производстволар булдырыу мөмкинлеген шөғөлләнәсәкбеҙ. Чубайс менән үткәрелгән осрашыуҙар һәм кәңәшмәләр һөҙөмтәһе буйынса протоколға ҡул ҡуйҙыҡ. Июндә Роснано һәм Башҡортостан араһында берлектәге эшмәкәрлек буйынса ҙур килешеү төҙөйәсәкбеҙ. Артабан яңы проекттарҙы: ГТД өсөн ҡыуыш эсле көрәктәр әҙерләү, практикаға юғары пластик материалдар технологияһын киң индереү, яңы төҙөлөш материалдары (битумдар, бетондар һ.б.), мөһим деталдәрҙең өҫтөн нығытыу һ.б. тормошҡа ашырыу стадияһына күсәсәкбеҙ. Аҡса Роснано менән шәхси инвесторҙарҙыҡы буласаҡ. Республиканың һәр вузында бәләкәй инновацион предприятиелар булдырасаҡбыҙ. Был процесҡа БР Фәндәр академияһы ла ҡушыласаҡ..." - шулай тип ябай халыҡҡа бигүк аңлайышлы булмаған тема буйынса фекер алышыуҙы тәҡдим итте был юлы үҙ блогында Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов. Ләкин, аңламайым, был миңә кәрәкмәй, тип ҡул һелтәп ҡуйырға ашыҡмағыҙ, ни тиһәң дә, заман менән бергә атлау зарур һәм ошоно күҙ уңында тотоп, әйҙәгеҙ, блоггерҙар менән бергәләп аңларға тырышайыҡ.**

# ҠЫУЫП ЕТЕРБЕҘ, УҘЫП КИТЕРБЕҘ...

**popodko_dv**

Беләһегеҙме, Европа, Азия, Америка ни өсөн алға киткән? Шундай төшөнсә бар: сифат өлкәһендәге маҡсат. Маҡсаттар продукцияға ла, хеҙмәткә лә, һәм, әлбиттә, инновация эштәренә лә ҡағылырға мөмкин - әллә госзаказ буйынса, әллә үҙҙәренәнүҙҙәре, әллә, мәҫәлән, Роснанонан. Маҡсат үлсәп һәм өлгәшеп булырлыҡ итеп, иң кәмендә йылына бер тапҡыр ҡуйылырға һәм теге йәки был процеста ниндәйҙер яңы нәмәне күҙалларға тейеш. Беҙҙең ғалимдар, үҙ продукцияһын һәм хеҙмәтен яҡшыртырға теләүсе ойошмалар шул юл менән бара. Ә артабан быны беҙҙең илгә индерергә кәрәк. Әммә дәүләт ведомстволары быға әҙер түгел. Дәүләт үҙ структураларында даими яҡшыртыу юлы менән бармай. Ә бер урында тапана, кабинетта ултыра һәм үҙгәрергә теләмәй! Шуға күрә дисбаланс барлыҡҡа килә, дәүләт һәм инновацион ҡарарҙар араһында бюрократия үҫә тип уйлайым.

Ә бына үҫештең алтын орлоҡтары даими яҡшырыу юлында. Нимәнелер ҡыҫҡартырға, волокитаны, хәүефте, ҡарау ваҡытын кәметергә һ.б. Шуға күрә күптәрҙең дәүләт ҡасан инновациялар менән бер рәткә баҫыр, инновацион уйлай башлар, мөрәжәғәттәр рәүешендә генә түгел, ә үҙенең эске дәүләт эшмәкәрлеген күрһәтеп яҡшырта башлар икәнлеген белгеһе килә. Ул ваҡытта кешеләр хакимиәттәргә килер, һәм уларҙы идеялы, ни өсөн яңылыҡ кәрәккәнен, ни өсөн улар үҫешкән, ни өсөн нимәнелер үҙгәртергә тырышалар икәнлеген аңлаған кешеләр ҡаршы алыр ине, ә хәҙерге кеүек: "Сой эсергә ҡамасауламағыҙ", - тип яуаплаусылар түгел. Быйын өсөн барлыҡ ведомстволарға йыл һайын кем нимәне яҡшыртырға теләй, тиған маҡсат ҡына бирергә кәрәк. Шуға күрә, әгәр һәр ҡайһыбыҙ даими яҡшырыу маҡсатын ҡуйып, уны бергәләп хәл итһәк, Американы ҡыуып та тоторбоҙ. Ярҙам итергә Роснано ла кәрәкмәйәсәк, үҙебеҙ тотонһаҡ, яйлап госзаказды ла индерербеҙ - сөнки яҡшырыу һәр кемдең бер өлөшө булып торасаҡ!

**Logot**

Модернизация, инновациялар менән шөғөлләнеү мотлаҡ һәм быны һәр кем белә. Әммә мөһим мәсьәләләрҙе лә оноторға ярамай. Башҡортостанда урман эшкәртеүҙе үҫтерергә кәрәк, сөнки ағас ситкә китә лә, изделие булып ҡайта, тип йөҙ тапҡыр әйткәндәрҙер. Шул уҡ ваҡытта БР-ҙың Сәнәғәт һәм инновация сәйәсәте министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, булған ҡеүәттәр ни бары 35 процентҡа ғына эшләй. Ни өсөн шулай тигән һорауға яуап алыу түгел - урман китә инде, унда һатып алыу хаҡы юғары, беҙ нимә эшләй алабыҙ? Булғанды модернизациялау кәрәк.

**Krukra**

Бәлки, урынһыҙҙыр, әммә һорайым, ни өсөн барлыҡ инноваторҙар орлоҡ сәсмәйенсә уңыш йыйып алыу мөмкин тип уйлай? Күптән инде беҙҙең фәнгә бәреү ҙә яҡшы аҡса һалғаны юҡ, яңы белем ҡайҙан килһен? Эш аҡсала ла түгел, беҙҙең былай ҙа ҙур аҙымдар менән атламаған сәнәғәт производствоһы ҡиммәтле импорт ҡоралмалын сит бюджет аҡсаһына һатып алыуҙы күҙаллай, әммә яңы белем алыуға түгел. Бынан, минең ҡарашҡа, 30 йыл элекке эштәрҙе инновациялауҙың маҡсатҡа ярашлы булыуына шик тыуыуы урынлы. Әгәр әйбер кәрәкле һәм баҙар уны ҡабул итергә әҙер, барлыҡ хәүеф иҫәпләнгән икән, ни өсөн 2-3 йылға һуҙылған экспертизалар һәм килешеүҙәр кәрәк. Төп бәлә шунда, ҙур предприятиелар әллә беҙҙең ғалимдарға ышанмай, әллә киләсәк тураһында уйланмай, әммә тап уларҙан яңы белемгә һәм яңы продукттарға заказ килергә тейеш, шул саҡта йәштәр ҙә тартылыр һәм инновацион иҡтисадҡа хәрәкәт башланыр.

**batyrsha1**

Инновацияларҙы индереү өсөн өс йыл кәрәкмәй. Бер йыл эсендә атҡарып сығырға була, күп күләмдә финанстар ҙа, Роснано ла кәрәкмәй, республиканың үҙенең ресурстары ла етерлек. Бары тик: НТС (фәнни-техник совет) сайтын булдырырға.НТС сайтында инновацион материалдар һәм технологиялар реестрын булдырырға. НТС базаһында материалдар һәм технологиялар буйынса эксперттар командаһын төҙөргә. НТС базаһында заказсылар һәм проектлаусылар өсөн консультация үҙәге төҙөргә. НТС эксперттарының һығымтаһынан һуң материалдар һәм технологиялар лотын иғлан итергә. Был материалдарҙы үҙ мәнфәғәтендә файҙаланыуҙы һәм ришүәтселекте киҫәсәк, проекттарҙың һөҙөмтәлелеге, бизнестың инновацияларға ҡыҙыҡһыныуы барлыҡҡа киләсәк. Патент биреүселәрҙе яҡлау бүлеге булдырырға. - Сәнәғәт һәм инновация сәйәсәте министрлығынан инновация бүлеген алып, уны НТС-ҡа тапшырырға. НТС составына эшҡыуарлыҡ вәкилдәрен индерергә. Ә инновацион битумдар һәм бетондар темаһы 90-сы йылдарҙан уҡ ҡуйыртыла.

**Buranbay**

Ҡайҙа барырыңды белмәйем, әммә бар, нимә килтеререңде белмәйем, әммә килтер, тигән кеүек килеп сыға. Әгәр ағайға оҡшаһа, ул, бәлки, һинең эштәреңде һатып алыр. Ҡулланыуға индереүгә аҡса бирер... Иң мөһиме, молекулалар кимәлендә булһын. Ул ғына ла түгел, идеяңды, уның ТЭО-һын яҙып бирергә тейешһең. Ғәмәлдә грамоталы патентлау һәм патентты республикала алған осраҡта, уны ҡулланыуға индерергә генә кәрәк. Юҡһа, бәреү ҙә нигеҙендә идея һәм ноу-хау яткан интеллектуаль урлыҡтан азат түгел. Ә унда, Көнбайышта, быны беҙҙән башҡа ла ҡулланылышҡа индергән аҡыллы егеттәр бар.

- Ғилми коллектив йәки уйлап табыусы ноу-хау эшләһен өсөн, ваҡыт кәрәк. Ошо ваҡыт эсендә ашарға, кейенергә, комуналь хеҙмәттәргә түләргә һ.б. тейеш. Һорау тыуа: ҡайҙан алып? Банктан кредит алыпмы?

- Нанотехнологиялар буйынса аныҡ аҡсалы программа булырға тейеш. Нимә, нисек, ни өсөн һәм ниңә?

- Теге йәки был идеяны эшләү, әҙерләү өсөн маҡсатлы аҡса, шулай уҡ конкурс булырға тейеш.

- Предприятиелар яңы технологик линияларҙы индереү менән ҡыҙыҡһынырға һәм аныҡ эште финансларға тейеш.

- Яңы предприятиелар төҙөү ҙур сығымдар талап итә. Республикала ташландыҡ производство майҙандары ла бик күп, улар модернизация һәм реконструкция көтә.

- Нисек итеп нанотехнологиялар ауыл хужалығын үҙгәртер, мәҫәлән, үҫемлекселекте? XXI быуатта ла беҙ кеше ерҙе эшкәртә башлағанда ҡулланылған технологияны ҡулланабыҙ. Был көлкө түгелме? Иҡтисадтың аграр секторында революция яһарға кәрәк.

**gal_ramazan**

Нанотехнологиялар беҙҙең өсөн яңылыҡ, шуға күптәр пессимизм менән ҡарай. Әммә мин киләсәктең уның менән булырына ышанам. Төрлө тармаҡтарҙың үҫешендәге ҙур айырмалыҡтар арҡаһында, бәлки, нанотехнологиялар тураһында һөйләргә иртәрәктер, әммә энергияны күп ашаусы һәм материал күп китеүсе производстволар күптән инде уларға мохтаж. Шуға күрә нанотехнологияларҙың тәү сирттағы перспективалы йүнәлештәрен айырып, финансты ошо тармаҡҡа һалырға, һунынан башҡаларына күсергә кәрәк. Мин тәү сиратта торған йүнәлештәр тип энергетиканы, машиналар эшләүҙе, торлаҡ-коммуналь хужалығын билдәләр инем.

**Шулай итеп...**

**Бала саҡта ҡыуанышып, "Ҡыуып етербеҙ, уҙып китербеҙ Американы", тип йырлай торғайныҡ. Уны, моғайын, беҙгә тиклем дә йырлағандарҙыр. Бөгөнгө көн күҙлегенән ҡарағанда, уҙып китеү түгел, һаманғаса ҡыуып тоторға тырышып, сәсәй-сәсәй артынан ҡыуабыҙ ә ҡойроғон да күрһәтмәй... Хәҙер балалар аҡыллы, уларҙы буш имеҙлек менән алдатырып булмай, шуға йырҙары ла, фекерләүҙәре лә, башҡарған эштәре лә башҡасараҡ уларҙың. Ләкин шуныһы ғына аптырата - Американы ҡыуып тотоп уҙып китер йәштәребеҙҙең бер өлөшө үҙ илебеҙҙә урын, яҡлау тапмай, сит илгә сығып китеп, белемен, аҡылын ҡиммәткә һата. Статистика белдереүенсә, сит илдәрҙә ҡулланылышҡа, производствоға индерелгән яңылыҡтарҙың күпселеге ватандаштарыбыҙҙың идеяһы һәм эше һөҙөмтәһе. Был йәһәттән, ысынлап та, Американы уҙып киткәнбеҙҙер, биллаһи...**

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ БР Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, 1 майҙан республика территорияһында янғынға ҡаршы режим индерелә. Республика башҡарма власть органдарына граждандарҙың урмандарға транспорт менән инеүен сикләү, урман буйҙарында һаҡлау һыҙаттары булдырыу, тораҡ пункттар биләмәһен сүп-сарҙан таҙартыу, янғын һүндереүселәрҙең тәүлек әйләнәһенә дежурҙа тороуын тәьмин итеү һәм башҡа сараларҙы ойошторорға ҡушылды.

✔ БР Премьер-министры урынбаҫары Фидус Ямалетдинов белдереүенсә, әле 2005 йылдың 1 мартынан иҫәпкә ҡуйылған һуғыш ветерандары, уларҙың ғаилә ағзаларының фатир мәсьәләләре хәл ителә. Улар 6372 кеше ине, 3894-е фатир менән тәьмин ителгән дә инде. Ҡалғандар өсөн был программа 2012 йылға тиклем хәл ителеп бөтәсәк.

✔ З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә философия фәндәре докторы Әлим Әхмәзиевтың рус телендә "Һинең фамилияңдың тылсымы" тигән китабы донъя күрҙе.

✔ Быйылдан башлап йыл һайын социаль ярҙам сараларына хоҡуклы граждандар өсөн Башҡортостан биләмәһендә ҡала яңы бәйләнешендәге дөйөм файҙаланыуҙағы тимер юл транспортында юл аҡына 50 процент ташлама 1 майҙан 31 октябргә тиклемге осорға билдәләнә. Шулай итеп, ташламаның ғәмәлдә булыу осоро ике айға оҙайтыла.

✔ "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы дәүләт унитар предприятиеһына яңы директор тәғәйенләнде. Хәҙер компания менән Ғәлим Яҡупов етәкселек итәсәк. Ғәлим Миңлеғәлә улы 1993 йылдан "Башҡортостан" телерадиокомпанияһында мөхәррир, артабан генераль директор урынбаҫары, радиотапшырыуҙар студияһы директоры булып эшләне. Унан һуң "Новосибирск" телевидение һәм радиотапшырыуҙар компанияһы директоры булып эшләне. Былтырҙан башлап БР мәҙәниәт министры урынбаҫары вазифаһын башҡарҙы.

✔ 10 июндә БДУ-ның Сибай институтында II "Урал батыр" һәм донъя халыҡтарының рухи ҡомартҡыһы" Халыҡ -ара фәнни-ғәмәли конференцияһы үтәсәк. Уны Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ойоштора. I Халыҡ-ара конференция былтыр Өфөлә булғайны.

ЕТЕ РАЙОН

# ӨФӨБӨҘҘӘ БАЙРАМ!

**Ай башынан республикала Георгий таҫмалары таратыла башланы. 4 майҙа Еңеү паркында строй әҙерлеге һәм йыры буйынса ҡала конкурсы үтте. Китапханаларҙа хәрби-патриотик темаға тематик күргәҙмәләр ойошторола. Һәйкәлдәр, обелискылар, стелалар һәм мемориаль ҡоролмалар эргәһендә кадет кластары һәм үҫмерҙәр клубтары тәрбиәләнеүселәре Хәтер вахтаһы уҙғарасаҡ. 7-8 майҙа милли көрәш буйынса Өфө ҡалаһының асыҡ чемпионаты үтәсәк. 9 майҙа иртәнге сәғәт 11-ҙән киске 5-кә тиклем Рус дәүләт академия драма театры алдындағы майҙанда байрам концерты күрһәтеләсәк. Киске сәғәт етелә "Еңеү йырҙары" программаһы үҙенә саҡыра.**

**Дим.** 9 майҙа 12 сәғәттә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының скверында Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә арналған тантаналы митинг үтә. Шунда уҡ һәйкәлгә сәскәләр һалыу, ә мәҙәниәт һәм ял паркында байрам программаһы ойоштороласаҡ.

**Калинин.** Республикала старт алған Хәтер вахтаһына райондың барлыҡ учреждениелары, ойошмалары һәм белем биреү усаҡтары ҡушылды. 105-се гимназияла "Бер кем дә онотолмай" девизы аҫтында Хәтер стенаһы булдырылған. Унда 30-ҙан ашыу фоторәсем һәм уҡыусыларҙың олаталарының һәм өләсәләренең һуғыштағы, тылдағы ҡаһарманлыгы тураһында һөйләгән текстар ҡуйылған.

**Киров.** 4 майҙа "Родина" кинотеатрында ветерандарҙы тәбрикләү тантанаһы үтте. 8-9 майҙа иһә В. И. Ленин исемендәге паркта, Сергиев зыяратында һәйкәлдәргә сәскәләр һалынасаҡ, "Беҙҙең ҡәҙерле ветерандарыбыҙ" тип аталған байрам концерты күрһәтеләсәк.

**Ленин.** 5 майҙа Өфө гарнизонының Офицерҙар йортонда "Мәңгегә хәтерҙә!" тип аталған тантаналы йыйылыш һәм байрам концерты ойошторолдо. 6 майҙа Көньяҡ зыяратта Бөйөк Ватан һуғышы батырҙары обелискыһына сәскәләр һалынды. 7 майҙа - Затон, 9 майҙа Нижегородка биҫтәһендә байрам саралары уҙғарыла.

**Октябрь.** 5-9 майҙа "Буревестник", "Данко", "Юлаевсы", "Нуғай" үҫмерҙәр клубында "Мин һүҙемде йырҙан башлар инем" тип аталған байрам концерттары уҙа. 6 майҙа "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркында мини-футбол буйынса турнир ойошторола. 9 майҙа Нуғай ауылында - "Ырҡ биштең яҙы!", "Башҡортостан" сауҙа үҙәге алдындағы майҙанда, "Ҡашҡаҙан", "Мөгжизәле донъя" парктарында байрам саралары үтәсәк. 14 сәғәттә М. Ғафури исемендәге мәҙәниәт һәм ял паркында "Уйна, күңелле гармун!" тип аталған байрам концерты күңелдәргә дәрт өҫтәйәсәк.

**Орджоникидзе.** 5-9 майҙа Нефтселәр стадионында ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев исемендәге 33-сө бокс буйынса Бөтә Рәсәй мемориалы үтә. 6 майҙа сәғәт 12-лә - Яңы Черкассы, 7 майҙа 18 сәғәттә Иҫке Турбаслы ҡасабаһында байрам концерты була. 8 майҙа Нефтехимиктар паркында ветерандар араһында интеллектуаль уйындар буйынса асыҡ чемпионат уҙасаҡ. 9 майҙа Еңеү паркында һәйкәлдәргә сәскәләр һалынасаҡ һәм байрам концерты үтәсәк.

**Совет.** 9 майҙа И. Якутов исемендәге паркта йәйге эстрадала үҙешмәкәр коллективтарҙың сығышы ойоштороласаҡ, шулай уҡ рәсемдәр, ретро-автомобилдәр күргәҙмәһе эшләйәсәк. Был көндә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, хәрби-интернационалистар "Һалдатҡа хат" тигән ҡотлау сәләме аласаҡ.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ЙӘШ ҒАИЛӘЛӘРГӘ ЯРҘАМ

**Апрель һуңында 2011-2015 йылдарға торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж йәш ғаиләләргә дәүләт ярҙамы күрһәтеү буйынса республика программаһы раҫланды. Уны финанслау 4,815 миллиард һум тәшкил итәсәк. Биш йылға күҙалланаған программаны тормошҡа ашырыу 7500 йәш ғаиләгә торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға ярҙам итәсәк.**

Бөгөн сиратта 28 мең йәш ғаилә тора. Тиҙҙән уларҙың өстән бер өлөшө үҙ ҡыйығына эйә булыуы ихтимал. Әйткәндәй, бындай программа 2003-2010 йылдарға ла ҡабул ителгәйне. Ошо осор эсендә 11875 йәш ғаилә ярҙам алды. Программаның финанслаһыуы 1855 миллион һум тәшкил итте, шул иҫәптән федераль бюджеттан - 710, республика бюджетынан 1145 миллион һум бүленде.

## ҺАҠЛАНҒАНДЫ ...

**Әлшәй районында малдарҙың бруцеллез менән зарарланыу һәм улар аша 12 кешенең был ауырыуҙы йоҡтороу факты Республика йортонда эпидемияға ҡаршы комиссияның ултырышын үткәреүгә сәбәп булып торҙо. Сир сығанағы булып Ҡалмыҡстандан бер ниндәй документһыҙ һәм ветеринар тикшереүһеҙ килтерелгән һәсел үгеҙҙәре тора.**

- Ҡайһы бер етәкселәрҙең үҙ эшенә яуаплыһыҙ ҡарауы һөҙөмтәһендә кешеләр сирләй, малдар бөтөрөлдө, иҡтисади юғалтыу күрелде, - тине ултырышта вице-премьер Фидус Ямалетдинов. - Тикшереү органдарына оператив рәүештә ентекле тикшереү үткәрергә, һығымталар нигеҙендә ғәйепләлерҙең барыһын да күрһәтергә кәрәк.

Ултырыштың көн тәртибендәге икенсе мәсьәлә булып ҡыҙылсаны бөтөрөү буйынса республика программаһының үтәлешен тикшереү торҙо. Балалар һәм үҫмерҙәр араһында вакцинация үткәреү әлеге ваҡытта 98,4 процент тәшкил итһә, ололар араһында был һан 96,1 процент тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта бер нисә хәл ителмәгән мәсьәлә лә бар. Шуларҙың береһе - халыҡтың ҡурҡыныс инфекция хәүефе хаҡында хәбәрҙар булмауы һәм уларҙың вакцинация уҙғарыуҙың иҫәбе насар алып барылыуы.

## НАРКОМАНДАР КҮПМЕ?

**2010 йылдың 1 декабренән баш ҡаланың дөйөм белем биреү мәктәптәренең өлкән синыф уҡыусылары араһында наркотик һәм психотроп матдәләр ҡулланыуҙы асыҡлау буйынса ирекле тест үткәрелә башлағайны.**

Шул маҡсатта ете наркологтар бригадаһы ойошторолған, 2010 йылдың декабренән алып бөгөнгә тиклем 128 мәктәптә тест үткәрелгән, дөйөм күләмдең 90 проценты тикшереү үткән. Әҙерлек этабында белем биреү учреждениеһы етәкселеге, педагогтар менән аңлатыу эштәре алып барыла. Ошо осорҙа уҡыусыларҙың, алдағы йылдар менән сағыштырғанда, тикшереү үтеүҙән баш тартыу осрағы кәмеүе билдәләнгән. Киров, Калинин, Октябрь райондарында уҡыусыларҙың 90 проценты тикшереү үткән, был юғары күрһәткес булып тора.



## ТАҒЫ БЕР ЯҢЫ ЙОЛА

**Өфөлә барлығы 23 фонтан һәм уларҙың күпселеге май байрамдарында эшләй башланы. Быйыл беренсе тапҡыр фонтандарҙы эшләтеп ебәреү махсус тамаша итеп ойошторолдо.**

Беренселәрҙән булып 30 апрелдә Салауат Юлаев һәйкәле янындағы фонтан һыуҙары урғылды. Байрам сараһына күпләп халыҡ йыйылды. Йәш ғаилә пары күккә аҡ күгәрсендәр, ә балалар йөҙәрләгән һауа шарҙары осорған мәлдә фонтан эшләй башланы. Тантана төрлө ижади коллективтарҙың сығышы һәм балалар өсөн ойошторолған уйын саралары менән бергә үрелеп барҙы. 1 майҙа "Нефтселәр" мәҙәниәт һарайы алдындағы фонтанды асыу тантанаһы ла матур байрамға әүерелде. Йыйылған халыҡ мәҙәниәт һарайының үҙешмәкәр ансамблдәре башҡарыуында ҡурай моңо һәм матур йырҙар тыңланы, дәртле бейеүҙәр ҡараны. Шулай уҡ был көндә ҡалала тағы ла 6 фонтан эшләй башланы. Артабан бындай фонтан байрамдары ойоштороу матур йолаға әйләнер тип күҙаллана.

## ЭШЛЕКЛЕГӘ ЯРҘАМ

**Башҡортостан Республикаһының Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты 25 апрелдән 2010-2011 йылдарҙа бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттарына, инфраструктура ойошмаларына төрлө финанс ярҙам күрһәтеүгә документтар ҡабул итә башланы.**

Финанс ярҙам процент ставкаһын өлөшләтә субсидиялау, страховка түләүҙәрен өлөшләтә субсидиялау, лизинг түләүҙәрҙе субсидиялау: лизинг (сублизинг) килешеүҙәренә ярашлы түләнгән проценттарҙы һәм (йәки) бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъектының лизинг (сублизинг) килешеүҙәренә ярашлы түләнгән тәүге взносты өлөшләтә субсидиялау, күргәҙмә-йәрминкәләрҙә ҡатнашыуға сарыф ителгән аҡсаны өлөшләтә субсидиялау, энергияны һаҡлау программаһын тормошҡа ашырыуҙы һәм электр хужалығы объекттарына (100 кВтҡа тиклем) тоташтырыуҙы өлөшләтә субсидиялау һәм бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ объекттарының инженер-техник тәьмин итеү селтәренә тоташтырыуҙы өлөшләтә субсидиялауҙы үҙ эсенә ала. Документтар Өфө ҡалаһы, К.Маркс урамы, 37-се һанлы йорттоң 2-се корпусында, 3-сө ҡатта ҡабул ителә. Финанс ярҙамы күрһәтеү хаҡында тулыраҡ мәғлүмәт менән Дәүләт комитетының www.mbis.bashkortostan.ru сайтында "Программалар" бүлегендә танышырға була.

## "ТЕКӘ" ЛИЦЕЙ

**Республика башҡорт лицей-интернаты малайҙар ғына уҡый торған берҙән-бер тиерлек уҡыу йорто. Бында йыл да бөтөн республика балалары өсөн имтихандар үткәрелә һәм иң шәп малайҙар ғына уҡырға һайлап алына. Малайҙарҙы ғына айырып алып уҡытыуҙың бик күп өҫтөнлөктәре булыуы тураһында гәзитебеҙҙә яҙғаныбыҙ бар инде.**

Был юлы лицей 7-се синыфҡа малайҙар ҡабул итә һәм 15 майҙа 11.00 сәғәттә үтәсәк Республика полиолимпиадаһына 5-се, 6-сы синыф уҡыусыларын саҡыра. Полиолимпиада Өфө ҡалаһы, Ҡулса урамы, 74; Баймаҡ ҡалаһы, мәктәп-интернат; Белорет ҡалаһы, 22-се башҡорт гимназияһы; Дәүләкән ҡалаһы, мәктәп-интернат; Учалы ҡалаһы, 12-се мәктәп; Аҡъяр ауылы, 2-се мәктәп; Асҡар ауылы, 2-се мәктәп; Оло Ыҡтамаҡ ауылы, 1-се мәктәп; Иҫәнғол ауылы, 1-се мәктәп, Малаяҙ ауылы, Башҡорт гимназияһы; Мәсәғүт ауылы, Республика лицей-интернаты; Мораҡ ауылы, Башҡорт гимназияһы; Иҫке Собханғол ауылы, урта мәктәп, Юлдыбай ауылы, урта мәктәп адрестары буйынса үтәсәк. Белешмәләр өсөн телефон: **8 (347) 242-18-32**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендә үткәрелгән оператив кәңәшмәлә мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың туҡланыуын ойоштороуҙа санитар талаптарҙың күҙәтелеү-күҙәтелмәүе тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Дөйөм белем биреү учреждениеларында уҡыусы 93887 бала (98 процент) ҡайнар аш менән тәьмин ителә. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, балаларҙы ҡайнар аш менән тәьмин итеү буйынса етешһеҙлектәр бар, былтыр ғына 45 мәктәп директоры шуның өсөн административ яуаплылыҡҡа тарттырылған.

✓ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов журналистар менән матбуғат конференцияһында Еңеү байрамы айҡанлы ойоштороласаҡ саралар тураһында һөйләне. Билдәләнеүенсә, баш ҡала бөтәһе 13494 Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, 2999 инвалид, 50 Бөйөк Ватан һуғышы ҡатнашыусыһы йәшәй. Уларға быйыл да ҡаланың 7 районында эшләп килгән халыҡты социаль яҡлау үҙәктәре тарафынан иҫтәлекле бүләктәр тапшырыласаҡ. Йәшәү шарттарын яҡшыртыуға мохтажлығы булған ветерандарҙың фатирҙарына ремонт үткәреү дауам итә.

✓ 9 майҙа 11 сәғәттә "Динамо" стадионында Өфө ҡала округы хакимиәте һәм "Молодежная газета" редакцияһы кубогына еңел атлетика буйынса эстафетаға 63-сө тапҡыр старт биреләсәк. Сара айҡанлы З. Вәлиди, Ғафури, Пушкин, Совет урамдарында автотранспорт хәрәкәте ябылып торасаҡ.

✓ Баш ҡаланың тимер юл вокзалы районында транспорт хәрәкәтен бер яҡлы эшләргә ҡарар ителде. Тәүҙә был яңылыҡты 1 марттан тәжрибә рәүешендә һынап ҡаранылар. Ул уңышлы килеп сыҡты. Хәҙер пассажирҙарҙы транспорттан төшөрөү Вокзал урамында вокзал яны майҙанында, ә ултыртыу - үрге майҙанда башҡарыла. Вокзал һәм Карл Маркс урамдары киҫелешендә "Бер яҡлы хәрәкәт" тигән билдә ҡуйылған, ә машиналарҙы вокзал яны майҙанында ике яҡлап та парковкаларға була.

✓ Киләһе дөйөм ҡала субботнигы 14 майҙа үтәсәк. Әлегә баш ҡала һәр йома һайын урамдарҙы, ихаталарҙы таҙартыу эштәре башҡарыла. 29 апрелдә, мәҫәлән, 48 мең өфөлө урамдарҙы таҙартыу эшенә сыҡҡан. Ҡаланы таҙартыу буйынса айлыҡ 20 майҙа тамамлана.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БЕНЗИНҒА ХАҠ АРТА,

## аҙыҡ-түлек ҡиммәтләнә



**Ошо көндәрҙә Рәсәй Энергетика министрлығы тиҙҙән нефть продукттарына хаҡ артасағы хаҡында белдерҙе. Экспертар фекеренсә, хаҡ артыуы ҡотолғоһоҙ, ул уртаса 1,2-1,5 һум тәшкил итәсәк.**

Ғәрәп революциялары, юғары һалымдар, экспортты тыйыу һәм властарҙың хаҡтар сәйәсәте менән "кулдан" идара итеүе - яғыулыкҡа хаҡ артыуының объектив сәбәптәре бына ошолар.

Ғәрәп кризисы арҡаһында нефткә хаҡтар артыуы менән бәйле килемдәрҙән Рәсәй бюджеты ла үҫә. Илдә ғаилә бюджеттары менән иһә киреһенсә ҡапма-ҡаршы хәлдәр бара. Башланғыс продукт-нефттең ҡиммәтләнеүе ҡотолғоһоҙ рәүештә нефть продукттарының да ҡиммәтләнеүенә алып килә.

Дәүләт яғыулыкҡа хаҡтарҙы экспорт пошлиналарын арттырыу юлы менән генә тотоп тора ала ине, әммә экспорт сеймалының 25 проценты әҙер нефть продукттары булғанлыҡтан, дәүләт көйләүе ҡыйын хәлдә ҡалды. Пошлиналарҙы күтәреп, нефть заводтарын үҫтереү сәйәсәтенән баш тартырға тура килер, уның ҡарауы, хаҡтар тоторокло ҡалыр ине. Дәүләт нефть сәнәғәтен үҫтереү файҙаһына хәл итте.

Быйылғы ҡыш бензин һәм солярҡаға хаҡтарҙы "кулдан" көйләү аҙға ғына булһа ла үҫеш темптарын тотҡарлап торғайны, ләкин хаҡтарға 5 процент өҫтәмә - властарҙың туранан-тура ҡыҫылышы һөҙөмтәһе, ти күҙәтеүселәр. Хөкүмәт насарлыҡ эшләмәһә лә, бынан шул уҡ ваҡытта яҡшы ла булып китмәне, ти улар.

Дизель яғыулығының ни бары 5 процентҡа ғына булһа ла ҡиммәтләнеүе сәсеү сезоны алдынан аҙыҡ-түлектең үҙ ҡиммәтендә ярайһы ғына сағылыш табасаҡ. Әйткәндәй, был тәү сиратта ҡулланыусылар кеҫәһенә һуғасаҡ. "Ҡиммәтле солярка - фермерҙар өсөн ауыр мәсьәлә, әлбиттә, ләкин уны улар ҡулланыусы елкәһенә ауҙарасаҡ", - ти белгестәр. Улар билдәләүенсә, дәүләт, вәғәҙә иткәненсә, нефтселәр менән яғыулыҡты хәҙер ташламалы хаҡтар менән аласаҡ төбәктәр араһында килешеүҙе тәьмин итте. Ләкин, асыҡланыуынса, агросәнәғәт комплексы өсөн кәрәкле яғыулыҡтың ни бары 30-40 проценты ғына ташламалы хаҡҡа һатып алына. Шуға күрә эксперттар аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙың 5 проценттан да күберәккә артасағына әҙер булырға ҡуша. Аҙыҡ-түлек хаҡына уны ташыу өсөн кәрәкле яғыулыҡ хаҡы ла индерелә бит.

**Һандар һөйләй:**

**Апрелдә биржала Аи-92 маркалы бензинға хаҡтар артыуы 18,8 процент тәшкил итте. Шул уҡ айҙа биржала Аи-95 маркалы бензин 5 процентҡа ҡиммәтләнде. Апрелдә солярҡаға хаҡ 1,2 процентҡа артты.**

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# БЕҘҘЕКЕЛӘРҘӘН БАШҠА...

## бер сара ла үтмәй

**"Төрксой" Халыҡ-ара төрки мәҙәниәте ойошмаһы Осман дәүләтенең беренсе баш ҡалаһы булған Бурса ҡалаһының тарихы һәм мәҙәниәте буйынса халыҡ-ара ғилми симпозиум үткәрҙе.**

Был форумға Азербайжан, Төркиә, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Төрkмәнстан, Япония, Татарстан, Хакасиянан вәкилдәр йыйылды. Башҡортостан Республикаһынан Анкарала төрөк теле курстарын үткән шағирә Лилиә Ҡәйепова ҡатнашты. Ҡунаҡтар өсөн Бурса ҡалаһының тарихи урындарына сәйәхәттәр ҙә ойошторолдо. Мәҫәлән, Улудаг тауында ҡышын Әхмәтзәки Вәлиди саңғыла шыуырға яратҡан. 90-сы йылдар башында был ҡала университетында бер төркөм башҡорт студенттары белем ала. Шулай уҡ Бурсала Башҡортостан эмигранты Айнур Касаптың (Атав) ҡыҙы - Республика халыҡ партияһы лидеры Кемаля Кылычдароглу йәшәй.

* * *

**Төркмәнстандың баш ҡалаһы Ашхабадта "Төрки халыҡтарының мәҙәни мираҫы" тип аталған халыҡ-ара фестиваль тамамланды. Унда Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театры ҡатнашты.**

Театрҙың директоры, БР-ҙың атҡаҙанған артисы Таһир Искәндәров етәкселегендәге делегация составында йырсы Резеда Әмәкәсова, бейеүсе Айгөл Зөбәйҙуллина, ҡурайсы Азамат Асаинов һәм кинорежиссер Таңсулпан Бураҡаева ла бар ине. Төркмәнстандың мәҙәниәт һәм телерадиотапшырыуҙар министры Гулмурад Мурадов был фестивалдә беренсе тапҡыр ҡатнашҡан Башҡортостан артистарының оҫталығын юғары баһаланы.

* * *

**Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының башҡорт труппаһы Төркиәнең Анкара ҡалаһында VII тапҡыр үткәрелгән "Бәләкәй ханымдар, бәләкәй әфәнделәр" исемле халыҡ-ара театр фестивалендә ҡатнашты. Унда Башҡортостан артистары йәш тамашасыларға Сәрүәр Суриналың режиссер Илнур Муллабаев ҡуйған "Алтын балта" спектаклен күрһәтте. Республика артистары был сәфәр өсөн "Төрксой" ойошмаһына рәхмәтле булыуын белдерә.**

Фестивалдә төрки халыҡтары труппаларынан тыш Канада, АҠШ, Голландия, Нидерланды, Франция, Италия, Израиль, Африканың Того Республикаһы артистары ла ҡатнаша. Беҙҙең театр Рәсәйҙән барған берҙән-бер театр коллективы була. "Фестиваль бер юлы 12 театр сәхнәһендә барҙы. Беҙ бер нисә сәхнәһе булған театраль ҡаласыҡта сығыш яһаныҡ һәм бер-бер артлы 4 спектакль ҡуйҙыҡ. Бөтә спектаклдәр ваҡытында ла зал шығырым тулы булды", - тип белдерҙе журналистар менән матбуғат конференцияһында режиссер Илнур Муллабаев. Артистар бер тауыштан спектаклде ҡарарға килгән бәләкәйҙәрҙең иғтибарлы һәм ихтирамлы тамашасылар булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# СИРЕҢДЕ...

## һуңғы сиккә еткермә

**Ауырыуҙы дауалауға ҡарағанда, иҫкәртеүе еңелерәк - үкенескә ҡаршы, был хәҡиҡәтте бөтә кеше лә аңлап етмәй. Ҡайһы берәүҙәр сир аҙып, һуңғы сиккә килеп еткәс кенә табиптарға мөрәжәғәт итә. Был осраҡта, тәбиғи, хатта заман медицина саралары ла кешенең үҙ-үҙенә ғәфү ителмәҫлек битарафлығы алдында көсһөҙ булып сыға. Айырыуса һәр төрлө яман шеш ауырыуҙары һуңғы стадияларында дауалауға бирелмәй.**

Тап шуға күрә лә Башҡортостан дәүләт медицина университетының хирургия һәм онкология кафедраһы мөдире, БР Фәндәр Академияһы ағза-корреспонденты, профессор Шамил Ганцев етәкселегендә ойошторолған түңәрәк ҡорҙа һөйләшеү Өфөлә ҡатын-ҡыҙҙар өсөн федераль кимәлдәге онкология үҙәге асыу хаҡында барҙы.

- Рәсәй Федерацияһында ҡатын-ҡыҙ һаулығы буйынса махсуслашыусы онкология үҙәктәре булдырыу өсөн Светлана Медведева фонды проектын тормошҡа ашырыу саралары башланды. Был программа һәр яҡлап хуплауға лайыҡ, беҙ ҙә Өфөлә ошондай уҡ учреждение асыуҙы кәрәк тип таптыҡ, - тине Ш. Ганцев. - Үҙәк яман шеш ауырыуҙарын дауалаусы башҡа учреждениелар эшен ҡабатламаясаҡ, ә әлеге сирҙәрҙе мөмкин тиклем иртәрәк диагностикалау мәсьәләләре менән шөғөлләнәсәк.

Клиникала һөт биҙҙәре шешен дауалауға һәм иҫкәртеүгә айырым иғтибар бүленәсәк, сөнки һуңғы йылдарҙа был сир менән ауырыусылар һаны арта бара. Донъяла йыл һайын миллиондан ашыу ҡатын-ҡыҙ һөт биҙҙәре шеше менән ауырый, шуларҙың 50 меңдән ашыуы - Рәсәйҙә. Башҡортостанда былтыр 1309 сирле иҫәпкә алынған.

1996 йыл менән сағыштырғанда 2010 йылға был төр ауырыуҙар һаны ике тапҡырға артҡан. "Һөт биҙҙәре яман шеше" диагнозы нигеҙҙә 40-69 йәшлек ҡатын-ҡыҙға ҡуйыла, ләкин был ошо уҡ сир менән йәштәр ауырымай тигәнде аңлатмай. Әлеге ваҡытта Республика онкология үҙәгендә 25 йәштән дә кесерәк сирлеләр был сирҙән дауалана. Әйткәндәй, ауырыуҙарҙың 80 проценты һөт биҙҙәре шешен үҙҙәрендә үҙҙәре асыҡлаған.

**Әйткәндәй, был йәһәттән үҙ-үҙен тикшереп тороу һәр бер ҡатын-ҡыҙҙың бурысы. Ә бының һис бер ҡыйынлығы ла, ҡатмарлығы ла юҡ. Медицина мәсьәләләренә арналған гәзит-журналдарҙа ошо хаҡта йыш ҡына кәңәштәр баҫылып тора. Сисенеп, көҙгө ҡаршыһында һөт биҙҙәрен тотҡолап, баҫҡылап ҡарарға кәрәк: унда төйөр, шеш рәүешендәге ҡаты тығыҙлыҡтар барлыҡҡа килмәгәнме, түштәрҙең формаһы үҙгәрмәгәнме, имсәк баштарын ҡыҫҡылап тотҡанда эренле һыу, шыйыҡлыҡ бүленеп сыҡмаймы һ.б. Әгәр түштәрҙә шикле берәй үҙгәреш асыҡланһа, кисекмәҫтән маммологҡа, ә бындай белгес булмаған төбәктәрҙә хирург, терапевт йә гинекологҡа мөрәжәғәт итеү кәрәк.**

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы

## Ашҡаҙан, эсәк сирҙәре

Ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары булғанда тынысландыра, ялҡынһыныуҙы булдырмай, ашҡаҙан һәм эсәктәр эшмәкәрлеген яҡшырта торған тағы бер үләндәр ҡатнашмаһы: татлы тамыр, әлморон емеше, аҡ сәскә, эхинацея, мәтрүшкә, һары мәтрүшкә, меңьяпраҡ, әнис орлоғо, кесерткән япрағын бер тигеҙ итеп алырға. Ошо ҡатнашманы бер ҡалаҡ самаһы алып, 1 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтергә һәм көнөнә 3 тапҡыр эсергә.



## Татлы тамыр эскәндә...

Татлы тамырҙы организмдан һыу ҡыуҙыра торған дарыуҙар менән бергә ҡабул итергә ярамай. Йүткереүгә ҡаршы кәнфиттәргә лә татлы тамыр ҡушыла, быны ла белеп ҡуйығыҙ. Юғары ҡан баҫымын төшөрөүсе дарыуҙар эскәндә татлы тамырҙан яһалған препараттар эсеү ҡан баҫымын төшөрөүгә ҡамасаулай.

## Баш мейеһенә лә файҙалы

Йоҡлай алмай йонсоһағыҙ, склероз, атеросклероз, вегетатив-ҡан тамырҙары дистонияһы булғанда, организмығыҙ көн торошо үҙгәреүенә һиҙгер булһа, шулай уҡ баш мейеһенә ҡан йөрөшөн яҡшыртыу өсөн яҡшы сара тәҡдим итәм. Бының өсөн татлы тамыр, мәтрүшкә, миләш, әлморон, пион сәскәһенең (пион уклоняющийся) тамыры, энәлек, ҡара арония емеше, шыршы үләне (хвощ полевой), ҡандала үләне (донник), һыу боросо (горец перечный), ламинария, етен орлоғо, шиңмәҫгөл сәскәһен (бессмертник) бер тигеҙ күләмдә алып болғатып, 1 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, стакандың өстән бер өлөшө күләмендә көнөнә өс тапҡыр эсергә. Төнәтмә йылымыс булһын, ашарҙан алда 10-15 минут алда эсеү файҙалы.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

ХӘТЕРКИТАП

# АТАЙҘАР ҮҘҘӘРЕН - ИЛ ӨСӨН...

## әсәйҙәр үҙҙәрен тоғролоҡҡа ҡорбан итте





**Хоҙай кешеләрҙе үҙ ише менән йәшәргә яралтҡан. Әммә әҙәм балаларының йәшәйеше яҙылған йә уйланған юлдан ғына бармай. Кеше тормошо донъяуи ваҡиғаларҙың, көтмәгәндә килеп сыға торған бәлә-ҡазаларҙың аяуһыҙлығына дусар була. Егерменсе быуатта тыуып-үҫкән балалар (беҙҙең атай-әсәйҙәр, уларҙың балалары ) - иң ауыр фажиғәләрҙе кисергән быуындыр.**

**Тарихҡа күҙ һалайыҡ.** 1917-1918 йылдар. Ҡыҙылдар хаҡмы, аҡтар аҡмы икәнен төшөнөү ҙә ҡыйын булған дәүер. Асҡар - Билал - Темәс (Әбйәлил, Баймаҡ райондары) юлынан берсә аҡтар халыҡты талап үтә, берсә ҡыҙылдар, өй һайын инеп, ҡотто алып китә. Ауырып ятҡан олатайым, тәҙрә яҡтауына һөйәлеп, урамды күҙәтә, һыбайлылар күренгәс тә: "Киләләр... Тиҙ генә баҙға төшөгөҙ. Атһа, мине атырҙар", - тип әмер бирә. Өләсәйем, өс ҡыҙын ала һалып, өйҙә булған кешеләр менән бергә баҙға төшөп ултыра. Бәләкәй ҡыҙына дүрт йәш, үҙе илаҡ, уның ауыҙын яулыҡ менән бәйләп ҡуялар. Һалдат кейемендәге мылтыҡ аҫҡан кешеләр таптоп итеп килеп инәләр ҙә, түрбашта нимә күрәләр, шуны тоҡ-моғона һалып алып сығып китәләр. Ярай ҙа, ризыҡ, әйберҙәрҙе генә алып, сығып китһәләр, улар бер сәбәпһеҙгә ир-егеттәрҙе лә атып үлтереп китәләр. Үрге Таһирҙа йәшәгән Йосоп олатайҙың ике улын (берәһе шағир булған) атып үлтереп сығалар. Өләсәйемдең бер ғәйепһеҙ ике ҡустыһын Баймаҡҡа алып китеп аталар. Ошо йылдарҙа Ҡыҙыл Армия исеменән урыҫ һалдаттары Темәс халҡын ҡырып үтә.

Бына шулай, тол ҡалған ҡатындар, балаларын үҫтерәм тип, бөтә эштәргә лә үҙҙәре егелеп, донъя йөгөн яңғыҙы тартырға мәжбүр булғандар. Ә икенсе кешегә кейәүгә сығып тормош алып барыу уларҙың башына ла килмәгән. Әсәйем яғынан өләсәйем, мәҫәлән,35 йәшендә тол ҡалып, өс ҡыҙын үҫтереп, кейәүгә биреп, донъя көткәндәрендә ярҙамлашып, 51 йыл тол ултырып, 86 йәшендә донъя ҡуйҙы. Унын апһындары ла (килендәштәре лә), йәшләй тол ҡалһалар ҙа, ҡабат кейәүгә сыҡмай, балаларын ир еткереү менән генә мәшғүл булды. Темәстәге күрше өләсәйҙәр ҙә яңғыҙ булды. Беҙ үҫкәндә урамыбыҙҙа ике олатайҙан башҡа бабайҙар ҙа булманы.

**Репрессия йылдары башлана.** Бөйөк шағирыбыҙ Рәми Ғарипов һүҙҙәре менән әйткәндә:

*Бер ҡараһаң, утыҙ етелә*
*Ҡоштар осоп етмәҫ ерҙәргә,*
*Баштар ҡайтып етмәҫ гүрҙәргә*
*Аҫыл ирҙәр алып кителә...*
*Аҙмы аҡыл харап ителә,*
*Күпме күңел нахаҡ кителә!..*

Ул йылдарҙа бер Темәс ауылынан ғына 65 ир-егет ҡулға алынған, Исҡужиндарҙан 5 күренекле кеше Себер оҙатылған. Бөтә Башҡортостан буйынса, бигерәк тә Баймаҡ районынан (Зәки Вәлиди эшләгән ерҙән), халыҡтың ҡаймағы һөҙөп алынған. Башҡорт иле етәкселәренән алып (Афзал Таһиров, Муса Мортазин, Дауыт Юлтый, Кәрим Иҙелгужин, Харис Йомағолов, Шәмсетдин Ғафаров һәм башҡалар) урындарҙағы ауыл советы рәйестәре, ябай уҡытыусыларға тиклем ҡулға алынғандар һәм юҡ ителгәндәр. Беҙҙә бигерәк тә аҡтамыр һымаҡ күтәрелеп килгән милли кадрҙарҙы юҡ итеү киң ҡолас алған. Бер миҫал килтерәйек. Баймаҡ районының иң ҙур ауылы Темәстә (ул ваҡытында Кесе Башҡортостандың баш ҡалаһы була) ауыл советы рәйесе булып Исҡужин Сәфәр тигән бик аждар башҡорт эшләгән. 1937 йылда уны, бөтә туғандары менән ҡулға алып, Себер ебәргәндәр. Барыһы ла шунда вафат булған. Алтышар, дүртәр бала менән ҡатындары тол ҡалған. Сәфәр олатайҙың ҡыҙы Венера, инде үҙе өләсәй булһа ла, 1997 йылдары, юлын табып, хәлдең асылын белеүгә өлгәшә. Баҡһаң, ҡырҙан күсеп килгән бер килмешәк ауылдың уҡымышлы, булдыҡлы кешеләренең исемлеген органдарға биреп ятҡан. Йүнле кешеләр бөткәс, үҙе мәктәп директоры булып китә. Бөйөк Рәми ағайыбыҙ әйткәнсә килеп сыҡҡан:

*Ә бит күптәр, һатып иманын,*
*Ҡалкан итте шул саҡ заманын...*
*Салауатты һатҡан Ҡолойҙар*
*Һәр заманда сығып олойҙар...*

"Сталин репрессиялары" тип йөрөтәләр ул ҡот осҡос ваҡиғаларҙы.

Ысынлап та, совет ҡоролошона инанып хеҙмәт иткән ауыл етәкселәрен, уҡытыусыларҙы ҡулға алырға Сталиндың әмере булғанмы? "Бөтә интеллигенцияны, үҫеп килгән етәкселәрҙе тотошлай бөтөрөргә!" тигән ҡарар йә күрһәтмә биргәнме ул? Минеңсә, бөтә бәлә урындағы етәкселәрҙең башһыҙлығынан, кешелекһеҙлегенән, йүнһеҙлегенән булған. Өҫтән совет власына ҡаршы эшләгәндәрҙе тикшереү бурысы ҡуйылһа ла, урындағы етәкселәр һәм уларҙың ярандары үҙ ниәттәрен тормошҡа ашыра башлаған: берәүҙәр үҙҙәренең яратмаған кешеләрен "халыҡ дошманы" тип тотоп биргән; икенселәре, үҙ карьераһын уйлап, көслөрәк етәкселәрҙе юлдан алырға ярҙам иткән; өсөнсөләре эшендәге етешһеҙлектәрҙе һәм ебәрелгән хаталарының эҙен юйыу өсөн тырышҡан. Ошо дәүерҙәрҙең ауырлыҡтарын иңе менән күтәргән, бер бөтөн булып йәшәүҙең йәмен-тәмен дә татып өлгөрмәҫ элек мәңгә ҡайтмаҫ ергә киткән аҫыл йәрҙәрен һағынып, ғәзиз балаларын үҫтереүгә барлыҡ ғүмерен биреп йәшәгән әсәләргә ниндәй генә дан йырларға? Нисек түҙгән улар?!

**Ирҙәрҙең ҡырылыуы 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында була.** Ошо осорҙа ҡатын-ҡыҙҙарҙың, бала-сағаларҙың күргәнен, иңдәренә күтәргән ауырлыҡты һөйләп кенә бөтөрөрлөк тә түгел. Иртән таңдан әсәйҙәр колхозға эшкә китә, ваҡ ҡына балалар үҙҙәре генә өйҙә ҡала. Ни ашап, ни эсеп ултыралар икән, тиһегеҙме? Ойотҡандан (ҡатыҡтан) башҡа ризыҡ юҡ. Балалар ас йөрөй, һаман булһа (66 йыл үтһә лә) бер хәлде иҫемдән сығара алмайым. Күршеләге Яңылбикә инәйҙең (инәй тиһәк тә, 35 йәштәр тирәһендә генә булған) өс малайы бар ине, иң бәләкәсе өс йәшлек кенә Ғәлимйән ине. Ул аслыҡтан тантыптантып йөрөй торғайны. Беҙ, дүрт-биш йәшлек күрше балалар: "Ғәлимйән, кил, икмәк бирәм!" - тип шаяртабыҙ. Ул, бахыркай, беҙгә табан килә башлай. "Икмәк ю-у-ҡ", - тиһәк, "Бирмәйҙә-ә-р", - тип илап китә. Ул, күп тә тормай, үлеп ҡуйҙы - беҙҙең йөрәктәребеҙҙе ғүмерлеккә һыҙлатып китте.

Бер көнө дүрт күрше ҡыҙ бала (2-5 йәшлектәрбеҙ) картуфы алынған баҡсала эҙләнеп йөрөйбөҙ. Тилеберәнгә күҙ төшкән. Тамыры оҙон, йыуан ғына. Йолҡоп алып, шалкан икән тип ашай башланыҡ. Шунан дүртебеҙ ҙә иҫһеҙ ауғанбыҙ. Кемдер күреп ҡалып, больницаға атҡа тейәп алып киткәндәр. Әсәйҙәрҙе эштән ҡайтарып алғандар. Ныҡ ҡоҫоп ауырығанбыҙ. Беҙ, ике йәшлектәр, имеп йөрөгәс, тиҙҙән айыҡҡанбыҙ, ә апайҙар илереп ауырығандар, оҙаҡ ҡына иҫенә килә алмай ыҙалағандар.

Әсәйҙәр көндөҙ билен бушатмай колхоз эшендә йөрөр ине, ә ҡайтыуҙарына өйҙәге эштәр ҡыйрап ята. Йәй көнө төндә бесән сабырға китерҙәр, төндә кер йыуырҙар ине, ҡараңғыла һыйыр һауа торғайнылар.

Ул арала берәм-берәм атайҙарҙың һәләк булыуы тураһында хәбәрҙәр килә ине. Әсәйҙәрҙең ҡайғы-хәсрәтен үлсәрлек үлсәүҙәр юҡтыр был донъяла! Беҙҙең бәләкәй генә урамдан 11 кеше фронтҡа китеп, дүртәүһе генә ҡайтҡан. Өсәүһе ҡаты яраланған булған. Берәһе, Әмирханов Хәлил Насип улы, минең еҙнәм, имен генә ҡайтҡайны, ләкин уны, пленда булған тип, район үҙәгенә алып китеп, һыуыҡ бүлмәлә бер ай бикләп ултыртып, тикшереү үткәреп, ауыртып ҡайтарҙылар. Ул, меҫкен, оҙаҡламай үпкәһе шешеп, 31 йәшендә генә, гөрләтеп донъя көтөр сағында яҡты донъянан китеп барҙы.

Беҙҙең әсәйҙәр, 25-30 йәштәрҙәге ҡатындар, һуғышта һәләк булған ирҙәрен һағынып көтөп, берәүҙе лә үҙ итмәй, 50-55-шәр йыл тол ултырҙы, һирәкһаяҡ ҡына улар берәйһенә сәйгә йыйылырҙар ине. Шунда әсәйемде йырлата торғайнылар. Ул йыраусы-сәсәниә ине. Беҙ, балалар, баҡса ергәһендәге эскәмйәлә ултырып, уларҙың йырлашҡандарын тыңлар инек. Ныҡ иҫтә ҡалғаны ошо хәл булғандыр.

*Күк ыласын ҡоштоң, ай, балаһы*
*Талпына-талпына ғына бауҙ(а) үлә.*
*Ирмен генә тигән ир-егеттәр*
*Шәһит кенә булып яуҙ(а) үлә, -*

тип йырланы әсәйем зарлы итеп "Урал" көйөнә. Ҡатындар түгелеп иланылар. "Әй, улай илағасығыҙ, башҡа йырламайым", тигән булды әсәйем. "Йән биреүҙән ауыр икән һөйгән йәрҙән ҡалыуы",тигәндәр ҙә баһа, тине берәһе, аҡланып.

Ошо ҡатындарҙың берәһе лә ҡабат иргә сыҡманы. Бергә үткәргән ғүмерҙәре йоҡоларҙа күргән төш кеүек кенә ҡыҫҡа булһа ла, дарья һыуҙары баҫа алмаҫлыҡ ҡайғы-хәсрәт кисерһәләр ҙә, үҙҙәренең тәүге йәрҙәренә, мөхәббәттәренә, тойғоларына тоғролоҡ һаҡланы улар. Атайҙар үҙҙәрен ил өсөн ҡорбан итһә, әсәйҙәр үҙҙәрен тоғролоҡҡа ҡорбан иткән.

Бөтә ҡатын-ҡыҙ ҙа, үҙҙәре әйтелгәндәр кеүек, тол ултырырға теләмәгән, әлбиттә, һуғыш баҫылғас, ҡайтҡан ирҙәрҙе, ғаиләләренән айырып, үҙҙәренә индереп алған ҡатындар ҙа булды. Атайҙары иҫән-һау ҡайтып та, атайһыҙ ҡалған балаларҙың күҙҙәре тулы һағыш булыр ине.

Ә беҙҙең һүҙ - рухи яҡтан үтә көслө тоғро ҡатындар тураһында. Уларҙың юғары белемдәре булмаһа ла, тормош һабағын ныҡ белгәндәр. Үҙем бала-сағалы булғас, мин әсәйемдән: "Һине, әсәй, һоратып килгән ағайҙар булды бит, нинә сыҡманың?" - тип һораным. Ул: "Һеҙҙе йәберһетер тип ҡурҡтым", - тине. Тол ҡалған күрше инәйҙәр ҙә, йәш ҡалһалар ҙа, шулай уйлағандыр. Беҙ, күҙәтеүсән балалар, уларға бер ир кешенең дә килеп йөрөгәнен күрмәнек. Бала хаҡына, тоғролоҡ хаҡына беҙҙең әсәйҙәр үҙҙәренең йәш ғүмерен ҡорбан иткәндәр. Намыҫ һәм әхләки яҡтан ни тиклем ныҡ булған улар! "Тоғролоҡ һаҡлау - бәҫлек, күркәмлек; уны татыу - намыҫлылыҡ", тигән аҡыл эйәләре. Әсәйҙәрҙең сыҙамлы, ныҡ, тотороҡло булыуына, көс етмәгәс ауырлыҡтарҙы, "ултырыпултырып китәм сүгәләп" тиһәләр ҙә, бирешмәй үткәреүенә, иң юғары сифаттарына - ил һаҡлап башын һалған ирҙәренә тоғро ҡалыуҙарына һоҡланмай, баш эймәй булмай. Бальзак һүҙҙәре менән әйткәндә, "Тоғролоҡ - ул көслөлөктөң иң юғары күрһәткесе".

Ярым-ярты булып ҡалған әсәйҙәр, ҙур белемле булмаһалар ҙа, балаларын уҡытырға тырышты. Өй һайын урта һәм махсус урта, юғары белемле ағайҙар-апайҙар үҫеп сыҡты, улар уҡытыусылар, партия ойошмаһы секретарҙары, завод эшселәре булып китте, хатта араларынан министр ҙа булды, һәм бер генә лә эшһеҙ, ел ҡыуып йөрөгән егетҡыҙ булманы.

Йәш быуынды халыҡтың традицияһы, тәбиғәте һәм, әлбиттә, ҡатын-ҡыҙҙың тотороҡло, әҙәпле, ныҡлы, инсафлы холҡо тәрбиәләй икәнен тағы бер раҫлау мин һөйләгәндәр.

**Сәбилә СӨЛӘЙМӘНОВА,**

**педагогия фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**

*ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ҮҘҘӘРЕН ТҮГЕЛ,

## киләсәк быуынды хәстәрләй улар

**Тәбиғәттең ошо мәле һәр кемгә айырыуса яҡындыр. Уяныу, яңырыу, бар тирә-яҡтың яңы һулыш алыуы... Йәнә... тап ошо мәлдә күңелдәр еңеү тойғоһо кисерә. Яҙҙың ҡышты сигендереп, ерҙә үҙ хакимлығын урынлаштырыуынан тыуған ғына түгел, ә илебеҙ улдары һәм ҡыҙҙарының ҡот осҡос яуызлыҡ - фашизмды ҡыйратыуынан килгән Бөйөк Еңеү тойғоһо. Ошо оло байрамһыҙ яҙыбыҙ ҙа яҙҙарса түгел кеүек.**



Бөйөк Еңеү байрамына арнап, әле апрель баштарында уҡ, Өфө ҡала округы хакимиәте "Ололар өсөн социаль туризм" проекты сиктәрендә баш ҡаланың һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары өсөн матур сара - баш ҡала буйлап экскурсия ойоштороғайны. Сара Милли музейҙы ҡарауҙан башланды. Артабан сәфәр Өфөнөң иҫтәлекле урындары буйлап дауам итте. Ветерандар оҙатып йөрөүселәрҙең һөйләгәнен тыңлай-тыңлай, үҙҙәре лә белгәндәре менән ярыша-ярыша уртаҡлашып, Телеүҙәк, Конгресс-холл, Дуҫлыҡ монументы, Ғайса бәйғәмбәр әсәһе ғибәҙәтханаһы, "Аҡбуҙат" ипподромы, Ләлә-Тюльпан мәсете, Еңеү паркы маршруты буйлап үтте. Иң аҙаҡ Һуғыш даны музейында туҡталып, "Билдәһеҙ алыш" тигән йөкмәткеле фильм ҡараны. Ҡайтыр юлда оло инәйҙәр, олатайҙар бергәләп һуғыш йылдарында сығарылған билдәле йырҙарҙы йырлап алды. Уларҙың кәйефенә, күңел күрлөгөнә ҡарап, сараны ойоштороусылар үҙ маҡсатына өлгәште, тип һығымта яһарға була ине. Беҙгә лә ошо сарала ҡатнашыусылар һәм ойоштороусылар менән әңгәмәләшеп алыу форсаты тейҙе. Һүҙ ҡарттарҙың хәле, йәштәрҙең тәртибе, башҡа донъяуи хәлдәр тураһында барҙы.

**Рәис САКАЕВ, Башҡортостан телевидениеһы ветераны:** Йәмғиәттә көн үҙәгендә торған, хәл итеүҙе талап иткән мәсьәләләр бик күп, беҙҙең өсөн был асыш түгел. Ниндәйҙер һорауҙар беҙҙе, пенсионерҙарҙы, борсой икән, уларҙың бер-ике айҙа ғына һәм айырым кешеләр тарафынан ғына осо-башына сығып булмай. Мәҫәлән, пенсия күләме күтәрелеп тә өлгөрмәй, артынса уҡ аҙыҡ-түлеккә, башҡа тауарҙарға хаҡ өҫтәлә - был ололарҙың кәйефенә йоғонто яһамай ҡалмай. Шулай уҡ медицина өлкәһен алып ҡарайыҡ. Кеҫәңдә аҡсаң булмай тороп, һине берәү ҙә дауаларға ашыҡмай. Ә инде йөҙәрләгән кәртәләр аша үтеп, ниһайәт, врач бүлмәһенә эләкһәң, ул төрлө ҡағыҙҙар тултырып дарыуҙар исемлеге яҙып бирәсәк. Ә уларҙы нисек, ҡайһы ваҡытта, ниндәй күләмдә ҡулланыу - үҙеңдең табышмаҡ. Күңелен һалып, намыҫ менән эшләгән айырым медицина хеҙмәткәрҙәре генә медицинала ғы был битарафлыҡ сирен бөтөрә алмай. Шул уҡ хәл торлаҡ-коммуналь хужалығы системаһында күҙәтелә.

Бөгөнгө ил башлығының тырышлығын хуплайым, әммә бер-ике кешенең генә хәстәрлеге етмәй. Әгәр ҙә йәмғиәт аңына, һәр кеше аңына йоғонто яһап булмай икән, хаҡлыҡҡа өлгәшеп булмаясаҡ. Ә хаҡлыҡҡа өлгәшеү - ул ҡанундарға ярашлы эш итеү, үҙеңдең хоҡуҡтарыңды һәм бурыстарыңды белеү.

**Светлана ИСЛАМОВА, Өфө ҡалаһы ветерандар советы хеҙмәткәре:** 60-сы йылдар йәштәре менән бөгөнгө йәш быуынды сағыштырыу ауыр. Төрлө ил, төрлө йәмғиәт. Беҙ - комсомолдан үҫеп сыҡҡандар. XX быуаттың 20-се йылдарында барлыҡҡа килгән тәүге комсомолдарға, ололарға ҡарата ихтирамлы булдыҡ, уларға ихлас күңелдән ярҙам итергә ынтылдыҡ, тимурсылар командаһында ҡатнаштыҡ. Әлеге фронтовиктар, тыл эшсәндәре, Байконур космодромын төҙөүселәр - барыһы ла элекке комсомолдар. Заман башҡа - заң башҡа. Бөгөн йәштәр икенсе. Йәмғиәтебеҙ ниндәй - улар шундай, сөнки кеше үҙ ыңғайына ғына йәшәй алмай, тыуғандан алып социаль мөхит менән тығыҙ бәйләнешкә инә. Һәр бала саф күңелле булып тыуа, ә аҙаҡтан ғаилә, балалар баҡсаһы, мәктәп йоғонтоһо үҙ эҙен һала. Ғаилә - төп нигеҙ. Иң ҙур яуаплылыҡ атай-әсәй иңендә. Балалар баҡсаһы менән мәктәптәр ҙә ҙур көскә эйә. Тик улар үҙҙәренең күп мөмкинлектәрен һәм бурыстарын ҡулланып етмәй. Уҡытыусы белем биреү менән бер рәттән, уҡыусыны тормошҡа әҙерләүҙе бурыс итеп ҡуйырға тейеш. Тик был бурыс күп осраҡта ҡулдан ысҡындырыла. Лев Толстой әйтеүенсә, яҡшы кешеләр күп, тик улар насар ойошҡан ғына.

Рухи тәрбиә дәүләт кимәлендә хәл ителергә тейеш. Киноларҙа үлтереш, ҡәбәхәтлек күрһәтелә, үҙ мөлкәтен ҡан ҡойош менән туплаған кешеләр маҡтала, кумирҙарға әйләнә, ҡыҙҙарҙа сер ҡалмай... Ә шулай ҙа быларҙың барыһы ла үтеп китер, йәштәр хәрәкәттәре яңынан аяҡҡа баҫтырылыр, тигән ышаныс йәшәй беҙҙә. Студенттарҙың төҙөлөш отрядтары, эҙләнеү эштәре тергеҙелә, патриотик йүнәлеш яңы һулыш ала. Һуңғы ваҡытта волонтерҙар хәрәкәте айырыуса әүҙемләште. Ошоларҙы миҫалдар менән нығытып ҡуяйыҡ: Дим районында һәр Бөйөк Ватан һуғышы ветеранына берәр уҡыу йорто беркетелгән; Башҡорт дәүләт университетында тимурсылар командаһы, эҙләнеү отрядтары әүҙем эшләй; Хоҡуҡ институтында ветерандарға түләүһеҙ юридик консультациялар бирелә. Ошондай һәр эш ватансылыҡ тойғоһо менән һуғарылһа, ул ысын күңелдән башҡарыласаҡ. Ватансылыҡ енәйәттән аралай. Элек беҙҙең матур кумирҙар була торғайны: Третьяк, Фетисовтар... Шуныһы күңелде ҡыра: яңы заман йәштәре кемгә ҡарап хыялын үҫтерә, кемгә ҡарап тәрбиәләнә?

**Анатолий АНЧУНОВ, Өфө ҡала ветерандар советы рәйесе:** Бөгөн республикала бөтәһе 8 мең 652 Бөйөк Ватан һуғышы ветераны бар. Йылдан-йыл уларҙың һаны кәмей. Үҙҙәре яулап алған тыныс тормоштоң ҡәҙерен белеп йәшәй улар. Тик ҡәҙерле булып йәшәйҙәрме - быныһы күп факторҙарға бәйле. Баш ҡалала, мәҫәлән, 2011-2013 йылдарға иҫәпләнгән оло йәштәгеләрҙең тормош сифатын яҡшыртыуға йүнәлтелгән төбәк программаһы ҡабул ителгәйне. Программаны тормошҡа ашырыу өсөн 2011 йылға - 2 миллион, 2012-2013 йылдарға - 10 миллион һумға тиклем аҡса бүлеү планлаштырыла. 2010 йылда һуғыш ветерандарының торлаҡ йорттарын ремонтлау өсөн Өфө ҡала округы хакимиәте бюджетынан 9 миллион 130 мең һум аҡса бүленде һәм 228 ветеран, шулай уҡ депутаттар иҫәбенә 27 яңғыҙ ветеран йорттарына ремонт яһалды. Быйыл иһә 50 ветеран ғариза яҙған. Бөйөк еңеүҙең 65 йыллығы айҡанлы Өфөлә йәшәүсе 471 ветеранға торлаҡ йорт алыу өсөн сертификат тапшырылған. Уларҙың 409-ы тәғәйенләнеше буйынса файҙаланылған, 7-һе тапшырылған кешеләре үлеп ҡалыу сәбәпле, кире ҡайтарылған, 55 сертификат бойомға ашырылыу өҫтөндә.

**Шулай итеп...**

**Ветерандар менән аралашҡандан һуң шундай һығымтаға килende: ветерандар үҙҙәренә ҡарата матди, социаль кәмселектәрҙе лә күтәрергә риза, тик улар үҙҙәренән һуң килгән быуындар өсөн борсола. Үҙҙәре йән атып, матур киләсәккә ышанып, пландар ҡороп йәшәгәс, шул дәртте бөгөнгө йәштәрҙә лә күргеһе килә. Егеттәрҙең һәм ҡыҙҙарҙың маҡсатлы булып, ватанын һөйөп, уны ҡәҙерләп йәшәүен теләй. Был уйҙарым ни кимәлдә ысынбарлыҡҡа тап килеүен белмәйем, тик күңелем ветерандар һүҙенән шуларҙы һиҙемләне.**

**Ҡарлуғас ИШЕМҒОЛОВА.**

*БАТЫРҘАРҘЫҢ ИСЕМЕН БЕЛ!*

# УРАЛТАУ ОСОРҒАН БӨРКӨТТӘР

## Ғәббәс Рыҫҡолов



**Ғәббәс Шәйхислам улы Рыҫҡолов 1894 йылдың 4 мартында Ырымбур губернаһы Верхнеуральский өйәҙенең Ярлыҡап ауылында (хәҙерге Әбйәлил районы) тыуған. 1915 йылда Беренсе донъя һуғышына алына. Себер уҡсы дивизияһының 39-сы полкында хеҙмәт итә. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн Георгий тәреһе менән бүләкләнә. 1917 йылдың апрелендә Ғ. Рыҫҡолов 1-се Улан кавалерия полкына өлкән унтер-офицер итеп тәғәйенләнә.**

1917 йылдың декабрендә фронттан ҡайта. 1918 йылдың февралендә Тамьян-Түңгәүер улысы ревкомы ағзаһы итеп һайлана. Верхнеуральскийҙа үткән Советтар съезында булып ҡайта. Советтар бойороғо буйынса Тамъян-Түңгәүер улысында Ҡыҙыл Армияға аттар йыйыу менән шөғөлләнә. 1918 йылдың апрель башында Кашириндарҙың ҡыҙыл отрядына яҙыла. Уны пулемет командаһына тәғәйенләйҙәр. Әммә оҙаҡламай, Тирлән ауылы янында, атаман Анненковтың полкына әсиргә эләгә. Казактар уны полктың ылауына хеҙмәткә ҡуша.

Ғ. Рыҫҡолов ҡасып тыуған яғына ҡайта һәм 28 июлдә Башҡорт армияһының 1-се кавалерия полкында хеҙмәткә алына. Тәүҙә отделение, артабан взвод командиры булып китә. 1919 йылдың ғинуарында эскадрон командиры итеп ҡуйыла. Февралдә башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, Муса Мортазин командалыҡ иткән 1-се Башҡорт полкы менән Әбйәлил районы территорияһында аҡтарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. 1919 йылдың апрелендә Муса Мортазин менән кире аҡтар яғына сығып китә. Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы 1919 йылдың авгусында ҡыҙылдар яғына ҡабат сыҡҡас, Урал фронтында аҡтарға ҡаршы һуғыша. 1920 йылдың апрелендә бригада составында Польша фронтына китә. Бында ул 27-се Башҡорт кавалерия полкының 1-се эскадроны менән командалыҡ итә. 1920 йылдың 1 июнендә поляктарҙы ҡыуып, бригаданан беренсе булып үҙенең эскадроны менән Днепрҙы аша сыға.

Ғәббәс Рыҫҡолов Польша фронтында күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Реввоенсоветтың фарманында (1921 йылдың 17 феврале, № 57): **"1920 йылдың 11 июнендә ул 5 ҡыҙылармеец менән Гезикевичи ауылында дошмандың 84-се Дон кавалерия полкының штабын полк командиры һәм эйәрләнгән аттары менән һаҡта торған 50 казагы менән ҡуша ҡулға алды",** - тиелгән.

1921 йылдың февралендә Ғ. Рыҫҡолов Себерҙәге күтәрелештәрҙе баҫтырыу өсөн Барнаулға ебәрелә, артабан барон Унгерндың отрядтарын ҡыйратыуҙа ҡатнаша. 1923 йылдың ғинуарында тыуған яғына ҡайтҡас, ауыл советы рәйесе итеп һайлана, 1924 йылдан Тамъян-Түңгәүер улысы башҡарма комитеты рәйесе, 1931 йылдан Әбйәлил райсоветы рәйесе була. 1934 йылдан Учалы, Мәсетле райондарында райсовет рәйесе вазифаһын башҡара. 1935 йылда аҡ армияла хеҙмәт итеүен йәшереп йөрөгән, тип партиянан сығаралар. Эшенән сығып, тыуған яғында йәшәй. Ә инде 1937 йылда ҡулға алынып, Өфөгә оҙатыла. 8 декабрь атыла. 1956 йылда реабилитацияланған.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

# БАЛА һуғыш

**Һуңғы йылдарҙа матбуғат биттәрендә Бөйөк Еңеүҙе яҡынайтыуға ҙур өлөш индергән тыл хеҙмәткәрҙәренең фиҙаҡәрлегенә ҙур әһәмиәт бирелә. Улар тураһында Советтар Союзы маршалы Г. Жуков үҙенең китабында бына нимә тип яҙа: "Тылдағыларҙың көсөргәнешле хеҙмәте булмаһа, дошманды еңеп булмаҫ ине. Тыл - ул Бөйөк Еңеүҙең яртыһы, хатта күберәге". Ысынлап та, ул иҫ киткес ауыр йылдарҙа ҡатын-ҡыҙҙар һәм ҡарттар менән бер рәттән, 11-12 йәштәге балалар көндө лә, төндө лә белмәй, ололар башҡара торған эште башҡарҙы. Ул балалар араһында мин дә булдым.**

## Үгеҙ иңенә төштө ер һөрөү

Мин 1931 йылдың апрель айында тыуғанмын. Беренсе синыфҡа 1938 йылда барҙым (ул ваҡытта уҡырға 8 йәштән алалар ине), 1943 йылда дүртенсе синыфты тамамлағас, Бикбау ауылына 5-се синыфҡа уҡырға барҙым. 8 саҡрым аралыҡты көн дә йөрөп уҡыныҡ. Ҡышҡы каникулдан һуңғы көслө бурандарҙа юл ҡалды, уҡыуҙы туҡтатырға мәжбүр булдыҡ һәм шул айҙа уҡ колхозда эшләй башланыҡ. Бер нисә малай үгеҙ егеп, колхоз малына ҡырҙан бесән һәм һалам ташыйбыҙ, ҡайһыларыбыҙҙы мал ҡарарға ҡуштылар. Апрель аҙаҡтарында, ҡар иреп бөтөү менән, беҙҙең йәштәштәр һабан һөрөүгә ҡушылды. 1944 йылда колхозда бер генә лә ат ҡалмаңы, арыуҙары фронтҡа оҙатылды, ҡалғандары ауыр эштән, аҙыҡ етешмәгәнлектән һәм ҡорсаңғы ауырыуынан үлеп бөттө. Колхозда бөтә булған эш тик үгеҙ егеп башҡарылды. Иртә яҙҙан алып ҡара көҙгә тиклем колхозда 4-5 үгеҙ егелгән һабан менән туҡтауһыҙ ер һөрҙөк. Һәр һабанға 6 үгеҙ егелә. Һәр ике үгеҙгә бер ҡыуыусы (погонщик) һәм бер һабанды тотоусы (плугарь). Үгеҙ ҡыуыусылар беҙ - балалар, һабан артында - ҡарт олатайҙар. Шулай итеп һабан һөрөү бригадаһына 15 үгеҙ ҡыуыусы, 4 һабан тотоусы, 2 мал ашатыусы, 1 кәшәүәр - бөтәһе 22 кеше беркетелә ине. Аш бешереүсе беҙгә тик исем өсөн генә булды, сөнки ул беҙҙең өсөн тәғәйенләнгән аҙыҡты - 150-200-әр грамм ашлыҡ ҡалдығын (отходты) келәттән яҙҙырып алып килеп, һәр беребеҙгә ағас ҡалаҡ менән тигеҙләп үлсәп, өләшеп бирә лә шуның менән эше бөтә. Беҙ ул ашлыҡ ишаратын өйгә ҡайтарып ебәрәбеҙ. Өйҙә уны таҙартып, ҡул тирмәнендә тартып, бер мәртәбә шыйыҡ ҡына өйрә бешерергә етерлек ярма алып киләләр. Уны беҙ һәр беребеҙ айырым котелокта бешереп ашайбыҙ. Быныһы эштән һуң киске аш була, иртәнсәк һәм төшкөһөн туҡланыу өсөн ҡатыҡ килтереп торалар. Төрлө үлән йыйып, сейләй йәки бешереп ашайбыҙ. Эш таң һарыһынан ҡараңғы төшөп, ыҙан күренмәй башлағанса тиклем бара, туҡтарға рөхсәт итмәйҙәр. Шунһыҙ норманы тултырып булмай (көнөнә 1 гектар норма). Ул ваҡытта сәғәт тигән нәмә булманы. Хәҙер тоҫмаллап ҡарауымса, эште иртәнсәк сәғәт 5-тән дә ҡалмай башлағанбыҙ, ә кис сәғәт 10-дарҙа туҡталғанбыҙ. Иртәнсәк һәм төш ваҡытында үгеҙҙәрҙе ашатып, ял иттереп алыуға 1-1,5 сәғәткә туҡтала торғайныҡ. Тимәк, көнөнә 12 сәғәт эшләргә тура килгән.

## Ҡыуышта ятып, ҡыр эштәре башҡарҙыҡ

Ашлыҡты ҡул менән һибеп сәсеп, артынан тырмаға һыйырҙарыбыҙҙы егеп, әсәйҙәребеҙҙән етәкләтеп, ерҙе тырматып ҡуябыҙ. Колхоз малына бесән әҙерләү, ураҡ ваҡытында урылған ашлыҡты ырҙынға ташып эҫкерткә һалыу ҙа үҫмерҙәр өҫтөндә булды. Ҡыр эштәрендә йөрөгәндә тик ҡырҙа ғына ҡунып йөрөнөк. Ҡыуыштар ҡороп, аҫтыбыҙға һәм өҫтөбеҙгә бесән йәки һалам һалып, булған кейемдәребеҙҙе кейеп йоҡларға ятабыҙ. Ауылға тик 10 көндә бер мәртәбә берәмләп мунса инеү өсөн ҡайтара торғайнылар. Хатта ауыл эргәһенән генә башланған баҫыуҙа эшләгәндә лә ҡыуышта яттыҡ. Ҡайтып йөрөһәгеҙ, һеҙҙе иртәнсәк йыйып алып булмай, ти торғайны бригадир.

Беренсе ҡар яуғас, ашлыҡты һуғып алыу өсөн МТС-тан молотилка килтерҙеләр. Ашлыҡ һуғыу ҡыш буйына һуҙылды һәм ундағы эштәрҙең дә күбеһен үҫмерҙәр башҡарҙы. Һуғып алынған ашлыҡты колхоз келәтенә алып килеп, ҙур ҡул иләге менән иләп таҙартып, тоҡҡа тултырып, үгеҙ егелгән санаға тейәп, ылау менән ауылдан 60 саҡырым алыҫлыҡта ятҡан Ырымбур өлкәһендәге Һарыҡташ станцаһына - элеваторға ташынылар. Ылауҙа 10-15 йөк, һәр бер йөккә бер үҫмер беркетелгән, арабыҙҙа беҙҙе ҡарап йөрөү өсөн бер оло кеше тәғәйенләнгән. Һуғыш йылдарында ҡыш сатлама һыуыҡ булды. Өҫтә ҡырҡ ямаулы алама ғына күфәйкә, киндер ыштан (бер нисә ҡат), киндер күлдәк, әсе һыуыҡ үтәнән-үтә һуға, үгеҙ шул хәтлем яй, ығыш бара. Ылауҙы ҡарап барыу өсөн бер-ике кешене ҡалдырабыҙ ҙа, ҡалғандарыбыҙ йылыныу өсөн алға йүгерәбеҙ һәм бер килке барғас, йүгереп кире киләбеҙ. Аяҡта сабата, өшөмәһен өсөн киндер силғауҙың эсенән ҡуян тиреһе урайбыҙ. Ауылдан 40 саҡырым тирәһе аралыҡта ятҡан Андреевка тигән ялтырап торған сиркәүле урыҫ ауылында йөкләп (унда фатирҙы ылаусылар өсөн колхоз махсус тота ине), иртәгәһенә ашлыҡты элеваторға алып барып еткереп, тапшырып, кире Андреевкаға килеп йоҡлап, өсөнсө көнө генә ауылға ҡайтып төшәбеҙ. Ҡайтыуыбыҙға ашлыҡ таҙартылған, тоҡҡа тултырып, әҙерләп ҡуйылған. Иртәгәһенә таң менән тағы юлға сығабыҙ. Ашлыҡ тапшырыу ҡыш буйы барҙы. Һарыҡташ эргәһендә ағып ятҡан Һаҡмар йылғаһының боҙо төшкәс кенә ашлыҡ тапшырыу туҡтатыла торғайны. Һарыҡташтан кире ҡайтҡан саҡта беҙҙе буш сана менән ҡайтарманылар, МТС өсөн тракторҙарға яғыулыҡ-кәрәсин, запчастар һәм сельпо өсөн әйберҙәр тейәттеләр.

Үрҙә һанап киткәндәрҙән башҡа ла эштәр күп булды: ҡыш көндәрендә ҡар тотоу өсөн баҫыу ҡырында үҫкән ағастарҙы ҡырҡып, баҫыу өҫтөнә ҡул көсө менән һөйрәп сығарыу, март айында уларҙы кире баҫыуҙан ситкә сығарыу, апрель айында баҫыуҙағы ҡар өҫтөнә оҙон-оҙон соҡорҙар (траншея) ҡаҙып, ҡар һыуы тотоу, ҡыш буйы өй һайын йөрөп тауыҡ тиҙәге йыйыу һәм уны баҫыуға сығарып таратыу, фронтҡа дошмандарҙың танкыларын яндырыу өсөн ҡорал эшләүгә шешәләр йыйыу (ул ваҡытта шешәләр булманы, тип әйтерлек) һ.б.



*Аш бешереүсе беҙгә тик исем өсөн генә булды, сөнки ул беҙҙең өсөн тәғәйенләнгән аҙыҡты - 150-200-әр грамм ашлыҡ ҡалдығын (отходты) келәттән яҙҙырып алып килеп, һәр беребеҙгә ағас ҡалаҡ менән тигеҙләп үлсәп, өләшеп бирә лә шуның менән эше бөтә. Беҙ ул ашлыҡ ишаратын өйгә ҡайтарып ебәрәбеҙ. Өйҙә уны таҙартып, ҡул тирмәнендә тартып, бер мәртәбә шыйыҡ ҡына өйрә бешерергә етерлек ярма алып киләләр. Уны беҙ һәр беребеҙ айырым котелокта бешереп ашайбыҙ. Быныһы эштән һуң киске аш була, иртәнсәк һәм төшкөһөн туҡланыу өсөн ҡатыҡ килтереп торалар. Төрлө үлән йыйып, сейләй йәки бешереп ашайбыҙ.*



## Картуф төп аҙыҡ булды

Һуғыш ваҡытында туҡланыу өсөн ҡулланған аҙыҡтар тураһында хәҙер ябай һәм аңһат ҡына итеп һөйләп ҡуйлар ул. Беҙ һуғыш йылдарында серек картуф һәм үлән менән туҡландыҡ, ти күптәр. Ул йылдарҙағы үҙәккә үткән аслыҡ ғүмерҙә онотторлоҡ түгел, бигерәк тә шул аслыҡты кисергән кешеләр өсөн. Картуф һуғыш йылдарында "икенсе икмәк" тигән дәрәжә алды. Ысынлап та, ауыл ерендә картуфтың тотҡан ролен баһалап бөтөрлөк түгел. Картуф ул ваҡытта "икенсе икмәк" түгел, "беренсе икмәк" булды, сөнки ауылдарҙа күп йылдар буйы (һуғыштан һуң да) ашлыҡтан бешергән икмәк күрмәй йәшәнек. Үҫтергән ашлыҡты аҙаҡҡы бөртөгөнә тиклем дәүләткә тапшырып торҙолар. Икмәкте ауыл халҡы һуғыштан бик күп һуң, тик 1953-1954 йылдарҙа ғына туйғансы ашай башланы. Шуныһы ҡыуаныслы, картуф һуғыш йылдарында шул хәтлем уңды. Ҡыш әйләнәһенә халыҡтың туҡланыуында төп аҙыҡ булып торҙо ул. Башҡа аҙыҡ булмағас, уны күпме сәсһәң дә апрель айында бөтә торғайны. Картуфтың күберәк өлөшөн ашауға ҡулланыу өсөн орлоҡҡа уның күҙҙәрен йоҡа ғына итеп ҡырҡып алып, ҡырҡҡан ерен серемәһен өсөн көлгә манып, яҙғы сәсеүгә тиклем һаҡлай торғайныҡ. Картуфтың бармаҡ башындайын да әрәм итмәй, әрсемәй, шул көйө ашҡа һалып, ҡабығы менән ашаныҡ.

## Аҫлыҡтан ҡотҡарған үләндәр

Ҡар әрселеү менән халыҡ аяҡ аҫтында ятҡан ашамлыҡҡа - үләнгә күсте. **Мысай** икмәген һуғыш икмәге тип мин ҡурҡмай әйтә алам. Уны ауылда йыл әйләнәһенә ашанылар. Ҡайҙа ғына ҡарама, бөтә ерҙә лә мысай үләне үҫте: баҫыуҙарҙа ашлыҡ араһында, картуфлыҡта, буш ятҡан баҫыуҙарҙа. Ул йылдарҙа "ырҙын һеперергә барҙым" тигән һүҙҙе йыш ишетергә тура килде. Ауыл халҡы оҙон ҡыш буйына ашлыҡты һуғып бөткәс, ырҙын төбө һепереп, мысай орлоғон йыйҙы, уны елдә елгәреп, таҙартып, тоҡлап алып ҡайтырҙар ине. Ҡул тирмәнендә тартып, әҙерәк картуф бешереп ҡушып (шуһыҙ уны беректереп булмай), тупалсаҡ итеп әүһәләп, икмәк бешерҙеләр.

**Алабута.** Был үләндең орлоғонан да икмәк бешерҙеләр. Тик алабута үләне беҙҙең яҡта аҙ таралғанлыҡтан, уны күпләп ҡулланманылар.

Бикбирҙе ауылы көньяҡ Урал тауҙары теҙмәһе араһында тап-таҙа бәрҙе һәм бағыры балыҡтары йәшәгән Кесе Һүрәм йылғаһы буйында урынлашҡан. Беҙҙә тауҙарҙың бите ҡарҙан апрель аҙаҡтарында уҡ асыла. Тау биттәрендә көҙ үк шытып сығып, апаруҡ үҫкәндән һуң, ҡар аҫтында ҡала торған үләндәр - **дүрт төрлө йыуа** (талғыр йыуаһы, йүкә йыуаһы, оҫҡон һәм әтмәкәй) иң тәүҙә ҡарҙан асыла. Бейек тауҙарға менә алырлыҡ бөтә халыҡ йыуа йыйырға йүнәлә, тоҡлап-тоҡлап алып ҡайтып, эшкәртмәй, шул көйө лә ашайҙар, тураҡлап, аш итеп тә бешереп ашанылар. Май айында һаҙмат урындарҙа тағы бер йыуа - күл йыуаһы шытып сыға.

**Ҡуян тубығы** (беҙҙә уны ҡуяс тип йөрөтәләр). Май баштарында шытып сыға. Тамырын шул көйө ашайҙар, шәкәр тәме сығып тора, май аҙағында көпшәһе ашау өсөн өлгөрә.

**Әтлек.** Май айының урталарында тау биттәрендәге урман араларында шыта. Тамырын ҡаҙып алып, йыуып, ваҡлап тураҡлап, мейестә киптерәләр, ҡул тирмәнендә тартып йәки киләлә төйөп, ононан икмәк бешерәләр. Туҡлыҡлы һәм шәкәр тәме сығып торған икмәк килеп сыға. Был үҫемлекте халыҡ "этлек" тип йөрөттө, сөнки уны табыу өсөн бик алыҫ урмандарға барырға һәм этләнеп тамырын ҡаҙып сығарырға кәрәк ине.

**Һарына.** Май айының урталарында шыта. Ашау өсөн тамырын ҡулланалар. Сейләй ҙә ашайҙар, аҙ ғына ярма ҡушып, бутҡа ла бешерәләр, башҡорттар уны борон-борондан аҙыҡ итеп ҡулланған, киптереп, тирмәндә тартып, икмәк тә бешергәндәр. Хәҙер ул үҫемлек бик һирәк осрай. Сәскәһе бик матур, мин һарынаны баҡсала күпләп үҫтерәм. **Балтырған.** Беҙҙә уны көпшә тип тә, бәпкә тип тә йөрөтәләр. Йәш япрағынан яҙғыһын аш бешерәләр. Июнь баштарында көпшәһе өлгөрә, ҡабығын һыҙырып, шул көйө лә, турап, аш итеп тә бешерәләр. Беҙҙең яҡта тағы ике төрлө ашарға яраҡлы көпшә үҫә: урманда - шыма көпшә, туғайҙа - ҡырлы көпшә.

**Ҡымыҙлыҡ.** Май айында тау биттәрендә өлгөрә. Шул көйө ашайҙар. Тәме әскелт кенә, ҡымыҙҙы хәтерләтә. **Ке-**

# САҒЫБЫҘҘЫ... тартып алды

серткән. Уны аш-һыуҙа хәҙер ҙә ҡулланалар. **Дегәнәк тамыры.** Май башында уҡ тәүге япраҡтары күтәрелеп сыҡҡас та ҡаҙып алып, тураҡлап бешереп ашайҙар. **Ҡуҙғалаҡ.** Уны халыҡ хәҙер ҙә ҡуллана. **Ат ҡуҙғалағы.** Июнь айында япрағы эреләнгәс, йыйып алып бешерәләр һәм мысай, йәки әтлек ҡушып, икмәк итеп бешерәләр. **Ҡаҡы.** Июнь баштарында ашарлыҡ булып өлгөрә. Беҙҙең яҡта тағы бер ҡаҡы - туғай ҡаҡыһы үҫә. Уларҙы шул көйө ашайҙар. **Кәзә һаҡалы.** Июнь аҙаҡтарында өлгөрә, үҙенсәлекле әскелт тәм бирә. Шул көйө ашайҙар. **Йүкә ағасы бөрөһө һәм лайлаһы.** Йүкә бөрөһөн япраҡ ярыу алдынан - тулыланғас йыйып алып аш бешерҙеләр. Июль аҙағында йүкәнең ҡабығы ҡуба башлағас, ҡабыҡтың эс яғындағы лайлаһын ҡырғыс менән ҡырып алып ашайҙар, шәкәр тәме сығып тора. **Һырғанаҡ.** Беҙҙә ике төрлө һырғанаҡ үҫә. Бер-береһенән орлоғоноң тышҡы төҙөлөшө менән айырылып торалар. Аш бешерергә орлоғон ҡулланалар.

**Имән сәтләүеге.** Сентябрь айында өлгөрөп ергә ҡойола. Йыйып алып киптерәләр һәм ҡул тирмәнендә он яһап, икмәк бешерәләр. Тәме бик ҡырҡыу әсе, үҙе бик туҡлыҡлы. Имән сәтләүеге икмәген ашаған кешене әллә ҡайҙан белеп була - уның тештәре ҡап-ҡара булып йылтырап тора. Имән сәтләүеген ҡыр хайуандары бик ярата. Айыу, ҡыр сусҡаһы, тейен һ.б. өсөн төп аҙыҡ булып тора. Көтөү көткәндә һарыҡ-кәзә имән сәтләүегенә тап булһа, уларҙы ул ерҙән ҡыуып алып китеп булмай. **Киндер орлоғо.** Һуғыш йылдарында киндер беҙҙе кейендереп кенә ҡалманы, ул беҙҙе туҡландырҙы ла. Ул йылдарҙа бөтә булған буш ятҡан ерҙәрҙе киндер баҫып алғайны, киндер араһынан йырып үтеп булмай торғайны. Беҙҙең яҡта ике төрлө киндер үҫә: тарма һәм баҫма киндерҙәр. Тарма киндерҙең туҡымаһы ҡаты була, унан ирҙәр ыштаны, тоҡ, силғау кеүек әйберҙәр етештерҙеләр, арҡан, дилбегә иштеләр. Ә баҫма киндерҙән күлдәк, тегенеү өсөн еп, таҫтамал, ашъяулыҡ эшләнеләр, уның туҡымаһы йомшаҡ, нескәрәк була. Тарма киндерҙең генә орлоғон ашарға ҡулланып була, уны ҡурмас итеп ҡыҙҙырып, йәнә башҡа ашамлыҡтарға ҡушып бешереп ашанылар. Сөсө икмәк бешергәндә киндер орлоғон бөтәү көйө ҡамырға ҡушып баҫып, икмәк бешергәндәр. Уны ашағанда киндер орлоғо тешкә әләгеп, шыртлап тора, шуға уны "бетле" икмәк тип ултыра. Мин шуларҙы йыйып алып, саҡ күтәреп өйгә алып ҡайттым да нәҙек ағас менән һабаҡтың эсенән үҙәген этеп сығарам. Йылан кеүек оҙон ап-аҡ үҙәк атылып килеп сыға. Бысаҡ менән ыуаҡлап турап, һыуҙа аш итеп бешереп ашап ҡараныҡ. Сәйнәлмәй, бер ниндәй ҙә аҙыҡҡа оҡшашлы тәме юҡ, уны ашап, тик эсте күптереү генә булды. Ҡабат бешермәнек.

**Еләк-емештәрҙән.** Һуғыш йылдарында туҡланыу өсөн ер еләге һәм муйыл төп аҙыҡ булып һаналды. Был емештәр тәмле лә, туҡлыҡлы ла булып иҫтә уйылып ҡалған.

Бәлки, ул аслыҡ йылдарында ашаған ҡайһы бер үҫемлектәрҙе онотҡанмындыр ҙа инде, ә үрҙә яҙып киткәндәр күңелемдә ғүмерҙә лә онотолмаҫлыҡ эҙ ҡалдырҙы. Ул йылдарҙа аслыҡтан үлмәҫ өсөн мин белгән 29 төр тәбиғәт үҫемлеген аҙыҡ итеп ҡулланғанбыҙ. Күҙәтеүем буйынса, ошо уҡ үҫемлектәрҙе өй хайуандары бик яратып ашай. Һығымтаны үҙегеҙ яһай алаһығыҙ. Һуғыш йылдарында картуф тәғәрләп уңды, мысай, киндер, емеш-еләк түшәлеп ятты. Ул ваҡыттағы ҡарттар әйтеүенсә, улар быға булмаған уңыш бирҙе. Был, бәлки, шул ауыр йылдарҙа Хоҙай Тәғәләнең интеккән халыҡҡа ярҙамы булғандыр. "Ауыр йылдарҙа беҙ аяҡ аҫтындағы үләндәрҙе ашаныҡ һәм шуға иҫән ҡалдыҡ", - тип бик дөрөҫ яҙа шул ваҡыттағы ауырлыҡтарҙы үҙе кисергән бер тыл ветераны.

Июль айы баштарында ашлыҡтар баш ҡоса башлай, эштә йөрөгәндә әле яңы ғына барлыҡҡа килгән ыуыҙ башаҡтарҙы ыуып алып, ауыҙға ҡабып сәйнәйбеҙ, көбәген дә айырып тормай, шул көйө йотабыҙ. Шул ваҡыты ысын икмәк тәмен тоя инек. Ә ашлыҡ бешкәс, башаҡтарҙы ус эсендә ыуып, бөртөктәрҙе көбәгенән өрөп айырып, көндәр буйы рәхәтләнеп сәйнәп йөрөйбөҙ. Ашлыҡты өйгә алып ҡайтырға ярамай, йөрөткәндәр. Киндер орлоғонан май ҙа сығарттылар, бик тәмле була.

**Башаҡ.** Һуғыш йылдарында ашлыҡты урып алғас та мәктәп балаларын баҫыуға сығарып, башаҡты бер бөртөгөн дә ҡалдырмай йыйҙырып, колхоз келәтенә тапшырып торҙолар. Шуға күрә беҙҙә башаҡ ашап ағыуланыу булманы. Ағыуланып үлгәндәр, тигән хәбәр сит ауылдарҙан ғына ишетелгеләне. **Көнбағыш һабағы.** Нисәнсе йыл икәне иҫтә ҡалмаған. Ныҡ аслыҡ йыл ине. Көнбағыш һабағының үҙәген бешереп ашап була, тигән хәбәр таралды. Март айы булғандыр, ҡарҙа туң күтәртә ине. Ҡаршылағы "Бишҡайын" тигән баҫыуҙа ҡар өҫтөндә көнбағыш һабаҡтары тырпайышып күренеп ҡәтғи тыйыла, закон ҡаты - 200 гр ашлыҡ өсөн 2 йыл төрмәгә ултырттылар. Ундайҙар беҙҙең ауылда ла булды.

Серек картуфты юрамал ашаған үҫемлектәр араһына индермәнем, сөнки уның күләме башҡа ашаған әйберҙәрҙең араһынан аҙ ғына урын ала. Эш шунда: һәр ғаилә үҙенең картуфын ҡаҙып алғанда ентекләп, ваҡына тиклем сүпләп ала, унда серек картуф табыуы мөмкин түгел. Колхоздың картуфлығын да көҙ үк ҡабаттан ҡаҙып тигәндәй йыйып бөтөрәләр. Яҙ көндәре һирәкләп кенә тапҡан серек картуфтан әсәйем мәрхүмә бер-ике мәртәбә ҡоймаҡ ҡойоп ашатты. Ул тотош крахмалдан ғына тора. Ҡоймағы бик тәмле була торғайны.

### Киндер ыштан һәм сабата

"Ас-яланғас" тигән төшөнсә һуғыш осоронан ҡалды ла инде. Ауылда башланғыс синыфтарҙа уҡыған ваҡыттар хәҙер ҙә күҙ алдымда тора. Ҡышҡы һыуыҡ көндәрҙә лә балаларҙың күптәре мәктәпкә ялан аяҡ йүгереп килеп инәләр ҙә, аяҡтарын йылытырға мейес башына һикереп менеп китәләр. Дәрес башланғас, аяҡтарын парта аҫтындағы кәштәгә тығып ултырып, дүрт дәресте үткәреп, ҡайтып китәләр. Балаларҙың тышҡа уйнарға сыҡҡанда бер генә кейемде алмашлап, сиратлап кейеп сығыуы ғаиләләрҙә ғәҙәти хәл булды. Ҡырҡ ямау һалынған бишмәт, күфәйкә, киндер күлдәк һәм киндер ыштан, сабата. Хәҙерге көндә киндер һүҙе ололар һуғыш йылдарын иҫкә алып һөйләшкән саҡта ғына ҡулланыла. Ә ул ваҡытта киндерһеҙ көнкүреште күҙ алдына ла килтерергә мөмкин түгел ине. Кейем тегеп кейеүгә яраштырыу өсөн киндерҙе ҡыштың оҙон төндәре буйы үтә ҡатмарлы ысулдар менән эшкәртеү кәрәк ине (көндөҙ колхоз эшенән бушатманылар). Киндер эшкәртеү технологияһы ҡыҫҡаса түбәнгеләрҙән тора: киндер өлгөргәс, йолҡоп алып, орлоғон һуғалар ҙа ергә йәйеп һалып киптерәләр, кипкәс, күл һыуына һалып батырып серетәләр, сығарып, тағы ергә түшәп ҡояшта киптерәләр, кипкәс, талҡыла талҡып, ҡаты үҙәгенән айыралар, һуңынан киндер киләһендә төйөп, туҡмаҡ менән йомшарталар, ағастан эшләгән тараҡта тарап тетеләйҙәр, ҡул йәки ағас орсоғо менән иләйҙәр, иләгән епте баҫмаға һалып, көлдә ҡайнатып йыуалар ҙа ҡояшта киптерәләр, бик күп төрлө ысулдар менән ыҫтанға теҙеү өсөн епте эшкәртәләр, ыҫтанға теҙеп, туҡыма һуға башлайҙар. Туҡыманы һуғып бөткәс (был март айҙары була), уны еүеш ҡарға сығарып 10-15 көнгә йәйеп һалалар, ҡар өҫтөндә ятҡанда киндер туҡыма үҙенең йөшкелт төҫөнән уңып, аҡ төҫ ала. Шунан туҡыманы ҡабаттан ҡаҙанға көллө һыуға һалып, оҙаҡ итеп ҡайнаталар, шул ваҡытта ул йомшара. Элеп ҡуйып киптергәс, йыуан бүрәнәгә урап һалып, көндәр буйы туҡмаҡ менән туҡмап, артабан йомшарталар. Туҡыма әҙер. Уны бесәләр ҙә шул уҡ киндер ебе менән кәрәк кейемдәрҙе ҡул менән тегеләр. Киндер тураһында беҙҙең ауылдарҙа һәүәҫкәр сәсән таҡмаҡ та сығарҙы. Уларҙың бер куплеты ғына иҫтә ҡалған:

*Бишҡайында бисә-сәсә*
*Һыйыр егеп тырмата.*
*Киндер күлдәк,*
*киндер ыштан*
*Рәхәтләнеп тырната.*

Һуғыш йылдарында, унан һуңыраҡ йылдарҙа ла ауылда сабата киймәгән кеше булмағандыр. Аяҡ кейеме булған кешеләр ҙә сабата кейергә тырышты, тегеһен туҙыуҙан һаҡлау өсөндөр инде. Сабата кейҙек, тип әйтеүе генә анһат. Уны үрергә кәрәк бит әле. Ауылда өс кенә кеше сабата үрә белә ине. Баҙарҙан һатып алыу өсөн аҡса юҡ. Бер пар сабатаны бер ҡаҙаҡ һыйыр майына йәки 10 йомортҡаға алыштырып алып була ине. Майҙы, йомортҡаны дәүләткә тапшырып торабыҙ, аҡса юҡ, нисек тә үҙемә сабата үреп өйрәнергә кәрәк, тип ҡарар иттем. Тик сабата үреү оҫталары ул шөғөлдө сер итеп тота, башҡаларға өйрәтә һалып бармайҙар. Шулай ҙа бер олатайҙы күндереп, сабата үрергә өйрәнеп, үҙемде һәм әсәйемде аяҡ кейемле иттем, хатта һуңынан үҙебеҙҙән арттырып һатып та маташтым.

### Ҡолаҡты иркәләгән был һүҙ

Һуғыш бөткән, тигән хәбәрҙе ауылдан алыҫ түгел баҫыуҙа һабан һөрөп йөрөгәндә ишеттек. Төш ваҡыты етеп килгән саҡ булғандыр, беҙҙең колхозда райондан уполномоченный булып йөрөгән Яфаев тигән кеше аты менән сабып килде лә "Иптәштәр, Еңеү, Еңеү!" тип ҡысҡыра башланы. Беҙ нимә булды икән тип, айышына төшөнә алмай торғанда, беҙҙең өҫтән ҡарап йөрөгән Нәҙерулла олатай: "Уландар, һуғыш бөткән бит!" тип ҡысҡырып ебәрҙе. Беҙ шунда уҡ үгеҙҙәрҙе ағас ҡамыттарынан ысҡындырҙыҡ та ауылға йүгерҙек...

Һуғыш тамамланды. Ауылда тормош хәлдәре бөтөнләй үҙгәрмәне тиерлек, киреһенсә, күпкә насарланды. Аслыҡ-яланғаслыҡ ары көсәйҙе. Ауылдан фронтҡа алынған 41 кешенең 15-е яу яландарында ятып ҡалды. Һуғыш бөткәс тә тере ҡалғандарының өсәүһе генә ҡайтып төштө, уларҙың да берәүһе күп тә тормай ныҡ ҡына ауырып, мәрхүм булды, береһенең һыңар аяғы юҡ. Өсөнсөһөн - Ильясов Мөхәммәтдин ағайҙы колхоз рәйесе итеп тәғәйенләнеләр, ул да ҡултыҡ таяғында йөрөй. Колхоз эшендә һаман да ҡарт-ҡоролар, ҡатын-ҡыҙҙар һәм беҙ - балалар.

1947 йыл. Һуғыштан һуң ҡайта алмаған яугирҙәр, ФЗО-лағылар һәм трудармиялағылар, улар менән бергә минең атайым да ҡайтып төштө. Ауыл тормошо йәнләнә башланы. Атайым, уҡыуыңды дауам итәһең, тип өгөтләй башланы. Мин ҡаршылашам, үҙемдән бәләкәй балалар менән уҡырға оят, тип һылтаулайым. Ә шулай ҙа атайыма буйһонорға тура килде. Үрген урта мәктәбенә уҡырға барҙым. Мәктәптә ыңғай ғына уҡып киттем, үҙем менән бергә уҡыған балаларҙан 4 йәшкә олораҡ булһам да был бик уҡ күҙгә ташланып барманы, сөнки беҙҙең менән бер-нисә фронтовик та уҡыны.

1952 йылда 10-сы синыфты тамамлап, шул уҡ йылда Иркутск ҡалаһындағы Хәрби авиация училищеһына уҡырға инеп киттем. Училищены тамамлағас, тәүҙә авиачастарҙа һәм 1958 йылдан стратегик ракета частарында хеҙмәт иттем. 27 йыллыҡ хәрби хеҙмәтемдең һуңғы 6 йылын үҙебеҙҙең Ейәнсура районының хәрби комиссары булып хеҙмәт итеп, майор званиеһында отставкаға сыҡтым. 10 йыл Бикбау ауыл советы биләмәһендә ветерандар советы рәйесе һәм 10 йыл Бикбирҙе ауылы старостаһы булып эшләнем. Хәҙер инде олоғайғас йәмғиәт эштәре менән мәшғүл түгелмен, үҙемдең яратҡан эштәрем- йәй көндәре ҡортсолоҡ менән, йәшелсә һәм емеш-еләк үҫтереү менән булышам. Ә ҡыш көндәре яратҡан шөғөлөм бар: ҡыр хайуандарының һәм ҡоштарҙың ҡараҫҡыларын эшләйем.

### Хәҙерге йәштәргә әйтәһе һүҙҙәрем

Беҙ һуғыш йылдары балалары уйын уйнай алмай үҫтек. Беҙ балалар тип, ауырлыҡтан, эштән ҡасманыҡ, ил йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәнек. Ҡыйын булды, тик ауыр тормош беҙҙе һындыра алманы, беҙ кеше булып ҡалдыҡ, шуға күрә был донъяла беҙҙең өсөн бөтәһе лә ҡәҙерле. 1941-1945 йылғы иң ҡанлы Бөйөк Ватан һуғышында мин өс ҡыҙын туғанымды юғалттым, ә ил буйынса 27 миллион һалдат фронтта һәләк булды; һуғыш арҡаһында күпме тыл хеҙмәткәрҙәре юҡҡа сыҡты - уны берәү ҙә әйтә алмай; һуғыш осорондағы иҫ киткес этлектәрҙе кисергән тиңдәштәрем ваҡытынан иртә был донъянан китеп бөттө; ул һуғыш беҙҙең бала саҡ бәхетен, беҙҙең уйнар уйыныбыҙҙы уйнатмай, йоҡлар йоҡобоҙҙо йоҡлатмай, ваҡытынан алда олоғайтып, ғүмерҙең иң матур мәлдәрен тартып алды. Мин шуға күрә бөтә булған һуғыштарҙы ла күрә алмайым.

**Ҡасим ЯНБАЕВ,**
**тыл һәм Советтар Союзы Хәрби Көстәре ветераны.**
**Ейәнсура районы Бикбирҙе ауылы.**

✓ Бүре иң аҡыллы йыртҡыс. Өҫтәүенә, арбау көсөнә эйә. Уны магия тиҙәр шикелле. - Егет тағы ла үҙенең донъя хәлдәренән хәбәрҙар икәнлеген һиҙҙереп алды. - Йоҡо бөтә кәүҙәне баҫа, күҙ ҡабаҡтарына ҡурғаш булып эленә.



6

Дөрөҫөн әйткәндә, алманканың был шөғөлө башта Мансурҙың күңелендә әллә ни рухи күтәренкелек уятманы. Ысынлап та, егеттең фекеренсә, балалар уйынынан кәм ере юҡ. Харап икән: тау ҡыҙырып йөрөгән көтөүҙәрҙе кинокамераға төшөрөп ала. Шуның өсөн көтөүҙәр янына бер күтәрелә, бер түбән төшә. "Ошо юҡ-барҙы төшөрөргә анау хәтле ерҙән йыбанмай килсе әле, - тип уйлай Мансур. - Тауҙың ни айырмаһы бар, үҙҙәрендә генә ҡыландырһа ни була икән? Сығымдары әҙерәк булыр ине, исмаһам..."

Сығымы тигәндәй, был эш өсөн Эльза егеттәрҙең икеһенә биш йөҙ евро вәғәҙә итте. Аптырамаҫ ерҙән аптыраръһың: ат өҫтөндә генә йөрөп бушлай киноға төш, өҫтәүенә, анау хәтле аҡса ал! Быға бигерәк тә Заһит ҡыуанды: "Һо-о! - тине ул икеһе генә ҡалған арала. - Беҙҙең аҡсаға әйләндерһәң, унар меңдән ашыу була. Бүре олой икән былай булғас".

Аҡсаға әллә ни иҫе китеп бармаған Мансур ҡул ғына һелтәп ҡуйҙы. Уға кеше малын һай-һайтлап ян-яҡҡа ҡыуғынлап йөрөүе мәҙәк кенә. Исмаһам, көн үтеп ҡалыр - ауылда эш-көш юҡ, ятаһың инде әлеге телевизорға ҡаҙалып.

Ә Эльза арыуҙы ла, талыуҙы ла белмәй, әйтерһең, ошо тау-таш араһында тыуып, шунда уйнап үҫкән. Оператор эргәһенә йүгереп барып, ҡулдары менән ниндәйҙер ишаралар яһай, күрһәтмәләр бирә, шунан егеттәргә боролоп: "Мансур, был яҡҡа ҡыу аттарыңды!" - тип ҡысҡыра. Бер аҙҙан уның тауышы йәнә тау-ташты яңғырата: "Заһит, һарыҡтарҙы тау аръяғына әйҙә!" Ярай ҙа, бер генә тапҡыр төшөрһә - "дубль" ти ҙә, шул уҡ күренеште яңынан ҡабатлата. Үҙе оператор яғына ҡарамаҫҡа кәрәклеген ҡат-ҡат киҫәтә, бөтәһе лә тормоштағыса тәбиғи булырға тейеш, ти. Ҡыҫҡаһы, башты ҡатыра инде.

Эльзаның тәүге осорҙағы ҡаңғыртыуҙары менән сағыштырғанда, былары сүп кенә. Бына, өҫ кейемен алайыҡ. Ул ниmәһе менән насар? Юҡ, алманкаға мотлаҡ һуғыштан һуңғы, илленсе йылдарҙағы кейем кәрәк. Әйтеүе анһат та бит, ләкин булмағанды ҡайҙан табаһың? Эльзаны ла аңларға була - фильмында заман һулышын бирергә теләйҙер.

- Ошонан башҡа кейемең юҡмы ни? - тине алманка тәүге көндә Мансурҙың ярлы ғына гардеробын барлағанда.

- Артыҡ кейем нимәгә кәрәк? - Егет ошо яуапты бик лайыҡлы тип тапты. Ысынлап та, ниңә сер биреп торорға?

- Һм-м, джинсы салбар... Илленсе йылдарҙа ул һеҙҙә булмаған. Фуфайка бармай - ул лагерь тотҡондарының эш кейеме. - Эльза уның барлы-юҡлы монаятын эшлектән сығарып ташланы. Уның төшөрәсәк киноһы өсөн ярамағаны аңлашыла, шулай ҙа намыҫҡа тейә, ҡәһәрең.

Ул арала ҡыҙ кәңәш-төңәш итер өсөн ауыл буйлап сығып китте. Әлеге көндә Ҡоръятмаҫтың төп халҡын тәшкил иткән пенсионерҙар һуғыштан һуңғы ауыр осорҙа үҫмер булып, илленсе йылдарҙы яҡшы хәтерләй ине. Кейемме? Ирҙәрҙең күбеһененең өҫтөндә ҡулдан тегелгән бишмәт булды. Фронттан тере ҡайтҡандар бик оҙаҡ шинель кейеп йөрөнө. Ул заманда итекте бик һирәктәр кейҙе, күбеһененең аяғында сарыҡ ине. Баш кейемдәре лә төрлөсә: кем ҡырма бүрек, кем түбәтәй кейә торғайны. Бер-ике кешенең башында кейеҙ ҡалпаҡ булғаны иҫтә ҡалған. Фуражка кейеү аҙағыраҡ сығып китте. Уларҙы ҡайҙа күреп буламы? Ҡайҙа тип, булһа, шул музейҙа ғына инде. Әһә, музей... Эйе, эйе, район үҙәгендә. Йәшәһен техник прогресс емеше булған автофургон, йәшәһен навигатор! Алға - район үҙәгенә! Хакимиәт башлығы килеп тыуған мәсьәләләр буйынса тәүлектең теләһә ниндәй сәғәтендә шалтыратырға ҡушҡайны. Ҡайҙа уның тура телефоны? Әһә, бына ул!.. Алло, һеҙҙе Эльза борсой... Рәхмәт, барыһы ла яҡшы. Ниндәй һораумы? Музейығыҙҙан ирҙәр кейеме кәрәк ине, бер нисә көнгә прокатҡа биреп тормаҫтармы?... Аңланым, һеҙгә ҙур рәхмәт. Хәҙер барып етәм.

Музей директоры алманканы кирелемиреле һүҙҙәр менән ҡаршыланы: йәнәһе, был кибет түгел, ә музей, экспонаттарҙы прокатҡа биреү түгел, ҡағылырға ла ярамай...

- Беләм, - тине Эльза. - Хакимиәт башлығы һеҙгә шалтыратманымы ни?

- Шалтыратһа һуң? Беҙ туранан-тура Өфөләге Милли музей директорына буйһонабыҙ. Унан рөхсәт...




Әммә ошо урында музей директорының теле тотлоҡто, сөнки уның өҫтәлендәге ҡағыҙҙар өҫтөнә шым ғына йөҙ һумлыҡ евро килеп ятты. Директор тулҡынланыуҙан тамағының төбөнә ултырған төйөрҙө йотоп ебәрҙе лә дауам итте:

- Һм-м... ну, ярай улай булғас... Тик, зинһар, иплəп кенә кейһендәр инде, экспонат бит.

Егеттәр бына ошо ҡиммәтле музей кейемдәрендә тауҙа мал баға. Ысынлап түгел, ә көтөп йөрөгән кеше булалар. Уларҙың күңелендә сәйер тойғо, әйтерһең, ололар булып ҡыланып уйнап йөрөүсе балалар. Был кәмит тойғоһон өҫтәрендәге күптән онотолған кейем-һалым көсәйтә: икеһененең дә өҫтөндә уңып бөткән бишмәт, билдәрендә йәшел тауарҙан тегелгән билбау. Заһиттың башында музейҙан килтерелгән кейеҙ ҡалпаҡ, ә Мансур атаһынан ҡалған тәрән эсле, киң тирәсле иҫке фуражканы кейҙе. Аяҡтарында кирза итек - тау-таш араһында шунһыҙ мөмкин түгел.

Башта көйлө генә барған эш өсөнсө көндә ҡаршылыҡҡа осраны. Сәбәпсеһе нимә тиһәгеҙ - асмандағы ҡояш, дөрөҫөрәге, уны ҡаплаған болоттар. Иртәнсәк һәр ваҡыттағыса балҡып, ғаләмгә йомарт нурҙарын таратып килеп тыуған йәшәү сығанағы көнө буйы шул хәлендә күкте гиҙер һымаҡ ине. Әммә бер аҙҙан офоҡ ситендә, дарья иңләгән аҡ елкәнле караптар һымаҡ, өйкөм-өйкөм болоттар пәйҙә булды. Улар торған һайын ҡабарып, ҡуйыра барып, бер-береһе менән тоташты һәм ҡояшты ҡаплап алды. Ҡояш, ауға эләккән алтын балыҡ төҫлө, күскен болоттар араһынан берсә күренде, берсә оҙайлы ваҡытҡа юғалып торҙо.

Бының кино төшөрөүгә ни ҡыҫылышы бар, тиерһегеҙ. Бар икән шул. Һеҙҙең һымағыраҡ уйлаған Мансур менән Заһитҡа Эльза ошолай аңлатып бирҙе:

- Беҙҙең аппаратура стерео тибында. Уның менән тик ҡояш яҡтыһында ғына төшөрөргә мөмкин.

- Стереоһы нимә була тағы? - Мансурҙың был һорауы уның күңелендә ҡыҙыҡһыныу саҡҡылары уяна башлауын белдерә ине.

- Нисек итеп аңлатырға? - тине Эльза. - Элекке киноаппаратуралар бөтә нәмәне бер генә киңлектә төшөрә һәм күрһәтә ине. Ә яңы стереоаппаратура донъяны киң планда төшөрә, экранда күләмлелек иллюзияһы тыуҙыра. Уның мөмкинлектәре бик ҙур.

- Улай икән, - тигән булды Мансур. Йәнәһе, беҙҙең дә һайғау һирәк - ҡайһы бер төшөнсәләр үтеп инә. Һәм, шуны күрһәтергә теләгәндәй, дауам итте. - Бына һин, беҙҙең тауҙарҙы төшөрөп, өләсәйеңдең һағыныуҙарын, зарығыуын күрһәтәм, тиһең. Ә төрмә камераһында тәҙрә бармы икән һуң? Булған хәлдә лә, ул анау хәтле ерҙән көтөүҙә йөрөгән малды нисек күрһен?

- Сәнғәт бик шартлы төшөнсә, - тине Эльза, бер аҙ уйлап алғандан һуң. - Бигерәк тә кино кеүек ҡатлы-ҡатлы сәнғәт. Унда быуат менән быуат аймылыша, хыял менән ысынбарлыҡтың, өн менән төштөң сиктәре юғала. Ә һин маладис, эшлекле фекер әйттең. Сценарийҙың ҡайһы бер урындарына өҫтәмәләр индерергә кәрәк булыр...

Шул саҡ Заһит:

- Ә минең һарыҡтар ҡайҙа? - тип урынынан һикереп торҙо.

- Әллә, - тине автофургон эргәһендәге ҡуйы, йәшел үләндә ҡырын ятҡан Мансур. - Ишетмәнеңме һуң, баяғы улар: "Нәғимйә-ә-ән, Нәғимйә-ә-ән!" - тип баҡырыша ине. Хужаларын һағынып ҡайтып китмәнеләр микән?

Заһит:

- Һиңә көлкө! - тип атына һикереп менде лә, ҡайҙалыр тау артылып күҙҙән юғалған ҡуйҙары артынан сапты. Ысынлап та, көтөүгә өйрәнмәгән һарыҡтар туҙып, ян-яҡҡа таралышып китһә, көлкөң яңырыр. Бер-бер хәл булһа, шәхси эшҡыуар элекке совхоз етәкселеге һымаҡ уйнатып ҡуймаҫ.

- Малдар араһында йылҡынан да рәхәте юҡ, - тине Мансур, ялп та йолп елеп барып тау артылған иптәшен шаян ҡараш менән оҙатҡандан һуң.

- Бергә генә йөрөйҙәр шул, - тине Эльза, тау үңерендә утлап йөрөгән аттарға ҡарап. - Таралмайҙарҙыр, эйеме?

- Айғыр һәйбәт булһа, таралмай. Ул үҙенең өйөрөн эт-ҡоштан һаҡлап, ҡарап ҡына алып йөрөй.

- Мансур, ә эт-ҡош тигәнең нимә була?

- Бүрене әйтәм инде.

- Элек һин йылҡы көткәндә бүреләр йыш һөжүм итә инеме?

- Булғылай торғайны.

- Йә, шул турала һөйлә әле, миңә ҡыҙыҡ. - Эльза йәнәшәлә йоҡомһорап ултырған операторға: "Төшөрөргә әҙерлән", - тигән шартлы ишара яһаны. Уныһы күнегелгән хәрәкәт менән кинокамераһын рәтләй башланы.

Шул мәлдә мин: "Төпсөр уҡыусы, унан да бигерәк тәнҡитсе теүәлһеҙлектә ғәйепләй икән, сөнки стереоаппаратура ҡояш яҡтыһында ғына төшөрә бит", - тип уйлап та өлгөрмәнем, болоттар ике яҡҡа айырылып китте лә, ялт итеп ҡояш күренде. Бына Хоҙайҙың хикмәте! Ышанһағыҙ, рәхмәт, ә ышанмаһағыҙ - үҙ ихтыярығыҙ. Эльза әйтмешләй, сәнғәт, шул иҫәптән, һүҙ сәнғәте - шартлы төшөнсә.

Мансур: "Бүре юлында осраһа, ҡыҙыҡ булыр теге", - тип уйлап көләмһөрәп ҡуйҙы, шулай ҙа ҡыҙҙың һүҙен йығырға ҡыймаНЫ. Әйҙә, ҡыҙыҡ булғас, тыңлаһын.

- Ат ғәжәп мал инде ул, - тип башланы Мансур. - Уларҙың көтөүҙә үҙ законы, һәр береһенең үҙ урыны бар. Бына, әлеге өйөр айғырын алайыҡ.Бер кем өйрәтмәһә лә, бейәләрҙең, тай-тулаҡтың именлеген һаҡлау уның ҡанында бар. Генетик кимәлдә, тиҙәрме әле? - Был мәғлүмәт егеттең көнө-төнө телевизор ҡарау һөҙөмтәһе икәнен аңғарғанһығыҙҙыр. - Аттарҙы әллә ни көтөү ҙә кәрәкмәй - арлы-бирле күҙ һалып торһаң, шул еткән. Ҡалғанын өйөр айғыры үҙе башҡара. Хатта бүреләр һөжүм иткәндә бейәләрҙе тиҙ генә бер урынға өйөрә. Улары, айғырға буйһоноп, тай-тулаҡты уртаға алып, күс булып уҡмаша. Бүреләр бигерәк тә ҡыш көнө, аттар тибендә йөрөгәндә ҡаңғырта. Ас булһа, ҡайһы берҙә яҡты миҙгелдә лә һөжүм итә. Бер заман, үҙгәртеп ҡороу башланыр алдынан ғына, һауын бейәләрен көттөм. Өйөр айғыры юҡ...

Ошо ерҙә уны ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңлап ултырған Эльза:

- Ә нишләп юҡ? - тип һораны.

- Йылҡысылыҡҡа элекке һымаҡ иғтибар булмағас, тоҡомсолоҡ менән йүнләп шөғөлләнмәгәс, өйөр айғырҙарына ҡытлыҡ була инде. - Мансур урынынан ҡалҡына биреп, тау үңерен ҡаплап йөрөгән йылҡыларҙы байҡап алғандан һуң, дауам итте. - Бейәләрҙең һөтө булһын тиһәң, уларҙы көнө-төнө көтөргә кәрәк. Ошоноң һымаҡ йәй аҙаҡтары ине. Миңә төнгө смена тура килде. Ә көҙ яҡынлай башлаһа, ат арыуыраҡ үлән эҙләп, башы һуҡҡан яҡҡа китә лә китә. Шуға күрә, уларҙан күҙ яҙлыҡтырмаҫҡа кәрәк. Ярты төнгә ҡәҙәре көттөм дә, бейәләрҙе будка яғына ыңғайлаттым. Ғәҙәттә, төнгө көтөүсе шул мәлдә йоҡоно ҡасырыу өсөн сәй эсеп ала ла, аттарҙы йәнә үрешкә ҡыуа. Ҡаты итеп сәй эсеп алғандан һуң, саҡ ҡына ял алайым, тип ултырып торһам, һиҙмәй ҙә ҡалдым - өҫкә бүре сереме ябырылды...

- Нисек инде, бүре сереме? - тип һораны Мансурҙың ауыҙына инә яҙып тыңлап ултырған Эльза.

- Бүре иң аҡыллы йыртҡыс. Өҫтәүенә, арбау көсөнә эйә. Уны магия тиҙәр шикелле. - Егет тағы ла үҙенең донъя хәлдәренән хәбәрҙар икәнлеген һиҙҙереп алды. - Йоҡо бөтә кәүҙәне баҫа, күҙ ҡабаҡтарына ҡурғаш булып эленә. Тороу түгел, хатта ҡул-аяҡтарҙы ҡыбырлатыр хәл юҡ. Аҙаҡ был хәлде һөйләгәс, ауылдың оло кешеләре: "Бүреләр шулай таң алдынан арбап, серем ебәреп малды килеп баҫа", - тине. Шулай ҡуҙғалыр әмәл тапмай, күпме ултырғанмындыр, бер мәл бейәләр сырҡырап кешнәгәнгә, тояҡ тауыштары тап та топ килгәнгә тертләп, уянып киттем. Йүгереп тышҡа сыҡһам, таң яҡтырып килә. Будка эргәһенә өйөрөлгән бейәләрем таралып юҡҡа сыҡҡан. Менеп йөрөгән атымды яҡындағы ҡайынға бәйләп ингәйнем - ул тора теҙгенен өҙә яҙып биленләп. Үҙе бер туҡтауһыҙ ҡуршылдай. Шунда уҡ: "Өйөрҙө бүре баҫҡан!" - тигән уй мейене ярып үтте, йоҡо ҡасты. Атты көскә тынысландырып, һөрән һала-һала туҙған йылҡыны эҙләргә керештем. Алай ҙа бик алыҫҡа ҡасмағандар - таң атыуға теүәлләп бөттөм тегеләрҙе. Бүреләр бер аҡһаҡ ҡарт бейәне йығып тамаҡлаған да, бер тай юҡ. Ярты көн буйы эҙләп, уны саҡҡа табып алдым. Тайым йылға ярындағы ҡуш ҡайын араһында аҫылынып торған. Күрәһең, биленләп, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, шырлыҡтағы ике ҡайын араһынан сығам, тип һикергән дә, шунда кипсәлгән дә ҡуйған...

- Иҫ киткес ҡыҙыҡ! - тине әҫәрләнеүе биттәренә алһыулыҡ булып яғылған Эльза. - Бындайҙы бер ҡасан ишеткәнем дә, уҡығаным да юҡ. Ҡара әле, Мансур, әйҙә, аттар тураһында тағы бер нисә кадр төшөрәйек. Ул өләсәйем хаҡындағы фильм менән үрелеп барасаҡ. Ә, бәлки, айырым картина булыр... - Ҡыҙ, үҙ идея-

✓ *Яманға ла, яҡшыға ла йылы һүҙең йәлләмә: ямандың йөрәге ирер, яҡшының күңеле күтәрелер.*
*Күҙ күгәртеп көткән кешең, ус ҡабартып эшләр эшең булһын.*



һынан үҙе ярһып, хатта урынынан тороп китте.

Унның был дауырғыуына ғәжәпләнә биреп ҡуйған Мансур иңбаштарын йыйырҙы - йәнәһе, үҙең беләһең. Егеттең бөтә ҡиәфәте: "Кешенең шуға ла һушы китерме? Харап икән: көтөүсене йоҡо, өйөрҙө бүре баҫҡан. Шул да булдымы ҡыҙыҡ?" - тигәнде белдерә ине. Ә Эльза дауам итте:

- Күҙ алдыма килтерәм: һин ат өҫтөндә сабып бараһың, ҡулыңда - ҡороҡ. Бына, өйөр арһынан үҙең һайлаған атты ҡороҡлап тотаһың да, уны менгегә өйрәтәһең. Шәп идея бит?!

Кемгә шәп, кемгә ғәжәп - ана, ышанмаһағыҙ, Мансурға ҡарағыҙ: ул, ҡырын ятҡан еренән ҡалҡынып тороп ултырҙы. Был егеттең һағая төшөүен аңлата ине. Хәйерһеҙ, аттар тураһында ҡайҙан һөйләне! Тартай теленән таба, тигәндәре ошо инде. Юҡ, ҡурҡа, тип уйлай күрмәгеҙ Мансурҙы! Ә бына шикләнеү ғәләмәте әҙ-мәҙ бар. Ни тиһәң дә, осаһы ат күрмәгәнгә ни ғүмер! Унан һуң, ҡырҡ менән илле араһы ат өйрәтер саҡмы?... Ләкин нәҡ ошо мәлдә егеттең күңелендә шик-шөбһә түгел, хатта үлемдең үҙенән көслөрәк булған тойғо баш ҡалҡытты. Эйе, эйе, уйығыҙ дөрөҫ, ул - намыҫ. Ул бер күтәрелһә, еңермен, тип уйлама үҙен. Ә Мансурҙа әлеге тойғо артығы менән ине. Хәтерегеҙҙә булһа, район хакимиәте башлығы ла анау көндө: "Мах бирмәгеҙ", - тигән булып, шул намыҫ тигән нәмәгә ойотҡо һалып киткәйне. Шундай саҡта егет ни тип әйтергә тейеш инде? Әлбиттә, ул мөмкин тиклем вайымһыҙ булырға тырышып:

- Ниңә, була ул, - тине.

- Вәт, хәтәр! - Эльза ҡыуанысынан бәләкәй балалар кеүек торған урынында һикергеләп ҡуйҙы - Иң мауыҡтырғыс кадр буласаҡ ул! Ҡайһы атты ҡороҡлайһың?

- Әллә-ә, - тип һуҙҙы Мансур. - Һиңә ҡайһыһы оҡшай һуң?

Ниңә улай тип әйтте - үҙе лә аңғарманы егет. Аңларлыҡмы ни? Күңел күҙен намыҫ томалаған, сәм ҡаплаған. Ҡыҙҙарға нимә оҡшамаҫ, улар нигә ҡыҙыҡмаҫ? Ана, донъяла уларҙың яртыһы аҡ толпарға атланған маликты көтөп зарыға. Гәрсә, ул малик тигәндәре тормошта бөтөнләй юҡ, булған хәлдә лә, берәм-бөртөк. Ә бында йылҡы өйөрө күҙ алдында утлап йөрөй. Йәнеңә ниндәйе оҡшай: күге, ҡолаһы, турыһы, алаһы. Ана, бер яҡ ситтәрәк үҙенең ут ерән төҫө, ҙур һәм ҡупшы кәүҙәһе, ялбыр ял-ҡойроғо менән башҡа аттарҙан айырылып, өйөр айғыры йөрөй. Уның хатта ҡушаматы ла үҙенә бер башҡа. Бүтәндәрҙе, төҫтәренә ҡарап, күк бейә, ала бейә тип кенә йөрөтһәләр, өйөр айғырын махсус исем менән атайҙар: Чубайс. Һауаланмаҫ ерҙән һауаланып, ситтә фырт ҡына йөрөрлөк шул. Инде уйлап ҡарағыҙ: хатта айғыр үҙенең башҡаларҙан ҡупшыраҡ икәнен аңлап, дәрәжәһен төшөрмәҫ өсөн бер яҡ ситтә йөрөгәс, Эльзаның күҙенә иң тәүҙә кем салынырға тейеш? Әлбиттә, Чубайс!

Уңайһыҙыраҡ булһа ла, әйтергә тура килә: өйөр айғыры бынан алдағы көндәрҙә лә Эльзаның иғтибарын йәлеп иткеләне. Тик әлегесә һын-һыпаты менән түгел, ә холоҡһоҙ ҡыланышы менән. Тереклек донъяһынан өҙлөкһөҙлөгөн тәьмин итеүсе ирлек ҡеүәтен күрһәтеп алыу ғәмәлен әйтәм инде. Исмаһам, ер аяғы, ер башынан килгән ҡунаҡтарҙан тартынһасы, шилма! Айғырҙы ла аңларға була: ҡунаҡтар ҡайтыр ҙа китер, ә уға Ғәлиулла менән артабан йәшәргә. Үҙе аттан мең тапҡыр оятһыҙ булған әҙәми заттан тартынып, хәлеңдән килгәнде ҡылмаһаң, хужа колбаса эшләгән ергә тотто оҙатты...

- Әлбиттә, Чубайс! - тигән һүҙҙәр Мансурҙың баяғы һорауына ҡыҙҙың яуабы булып яңғыраны. Был ауазды үҙенсә аңлаған өйөр айғыры, утлап торған ерҙән башын ҡалҡытып, автофургон яғына боролоп ҡараны. Йәнәһе, минән һеҙгә тағы ни кәрәк?

Мансур өнһөҙ генә иңбашын йыйырҙы. Уның был ым-ишараһын: "Айғыр икән, айғыр инде, миңә барыбер", - тиеберәк аңларға була ине. Чубайс, үҙен күҙәтеп тороусыларҙы мәсхәрәләгән төҫлө, ҡойроғон ҡалҡытып эсен бушатып алды ла: "Самалап ҡара", - тигәндәй, яй ғына өйөр яғына ыңғайланы.

**(Дауамы.)**

АФАРИН!

**Бер һүҙ менән әйткәндә, йоҡомһораған күңелдәрҙе уятып ебәрҙе, берәүҙе лә битараф ҡалдырманы апрель аҙағында баш ҡалабыҙҙың Нефтселәр мәҙәниәт һарайында уҙғарылған Республика, Рәсәй һәм Халыҡ-ара ҡумыҙсылар конкурсы лауреаты Миңлеғәфүр Зәйнетдиновтың һәм уның дуҫтарының "Сыңла, ҡумыҙ!" тамашаһы.**

# СЫҢЛА, ҠУМЫҘ! УЙНА, ҠУРАЙ! УЯН, ХАЛҠЫМ!

Фекерҙәрҙе төпләберәк әйткәндә, ошолайыраҡ итеп тәсфирләп булыр ине. **Арбаны** был тамаша. Концерт күрмәгән кеше түгелмен дә, етешһеҙерәк яҡтары ла күҙгә салынып ҡалғыланы.Улар тураһында һүҙ сурытып тороуҙы урынлы тапмайым. Арбағаны башҡарыусыларҙың ихласлығы булды. Һәр моң йөрәктән сығып йөрәккә күсте. Фонограммаларҙан бүгеп, сәхнәлә тере тауышты ишетергә һыуһаған тамашасылар өсөн ысын күңел байрамы булды был сара. Миңләғәфүрҙең маһирлығы, баҫалҡылығы, киң күңеллелеге арбаны. Ҡат-ҡат ишетеп тә туя алмаған ҡумыҙ моңо арбаны.

Ҡумыҙ - музыка ҡоралының универсаллеге **ғәжәпләндерҙе.** Ҡурай менән баянға ҡушылып ҡумыҙ тартҡандарын ишеткән бар ине. Ә бына саксофон, торба, тромбон оҙатыуында яңғыраған ҡумыҙ моңон тәүге тапҡыр ишетеүем. Тағы филиппин, вьетнам, ҡытай, немец халыҡтары ҡумыҙҙарында ла уйнап хайран ҡалдырҙы беҙҙе оҫта ҡумыҙсы.

Үҙен күр ҙә, дуҫын күр, тигәндәй, Миңлеғәфүрҙең ижадташ дуҫтары ла **һөйөндөрҙө.** Өфө тамашасылары күрергә танһыҡлап торған Рәйес Низаметдинов, Илһам Байбулдин кеүек сәхнә оҫталары концертҡа айырым бер йәм өҫтәне. Ҡумыҙ, ҡурай, думбыра кеүек милли уйын ҡоралдарыбыҙға ҡушылып өҙләү рухи хәтерҙе тергеҙер көскә эйә булыуы тағы бер дәлилләнде. Ә егеттәрҙең өҙләү оҫталығы - үҙе генә ни тора! Халҡыбыҙ яҙмышындағы берсә аянысл, берсә данлы ваҡиғаларҙы хәтерҙән үткәртеп, күңелде үкһетте улар.

Республикабыҙҙың сәхнә йондоҙҙары Урал Мортазин, Илсур Тайсин, Әлфиә Кәлимуллина, Гүзәл Үмәрғалиналарҙың сығышы ла тамашаның мәртәбәһен күтәрҙе.Ҡыл ҡумыҙҙа уйнаусы йәш музыкант Зәлиә Ғәниәтуллина илаһи ҡыл ҡумыҙ моңдары менән **һөйөндөрҙө**. Эльмира Юлдашева һәм Наил Юнысовтың тамашаны бик нәҙәкәтле һәм күңелле итеп алып барыуы оҡшаны.

Күренекле сәсәниә Розалия Солтангәрәева әйткән ҡобайыр ҙа бик урынлы булды. Залда ултырған һуғыш ветерандарына арналған ине ул. Уйландырҙы был сығыш та. Яу ҡырҙарында күпме аҫыл ил улдары баштарын һалған! Араларында бихисап сәсәндәр, ҡурайсылар, ҡумыҙсылар ҙа булғандыр! Ҡәһәрле һуғыш булмаһа ....

Думбырасы Гүзәл Үмәрғалина үҙенең йырҙары менән дә, шулай уҡ үҙе етәкселек иткән ансамбле - Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка гимназияһы ансамбле сығышы менән дә **ҡанатландырҙы**. Егеттәр Йомабай Иҫәнбаев исемендәге республика, Рәсәй һәм халыҡ-ара конкурстар лауреаты исеменә лайыҡ булған ағай-апайҙарынан һис тә ҡалышманы. Ошондай рухлы ҡустыларыбыҙ барҙа милли сәнғәтебеҙҙең киләсәге өмөтлө булыр, иншалла.

Күп ижад кешеләрен күҙгә күренмәгән ептәр менән бәйләп торған бер исем бар: Шәйехзада Бабич! Ошо тамашаның геройы Миңлеғәфүр Зәйнетдинов та, ҡурайсы һәм бейеүсе Рәйес Низаметдинов та, сценарий авторы шағирә Тәнзилә Дәүләтбирҙина ла, музыкаль яҡтан биҙәүсе композитор Урал Иҙелбаев та, тамашаның режиссеры Рөстәм Хәкимов та - Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаттары булыуы сикһеҙ **ғорурландырҙы**. Улар барыһы ла юғары исемдәрен ысын эш менән раҫлаған билдәле шәхестәр!

Ысын оҫталарҙың һәр ваҡыт киләсәктә үҙен алыштырырҙай өйрәнсектәре була. Күңеле изге кеше генә оҫталыҡ серҙәрен йәлләмәй, киләсәк быуынға тапшыра. Был юҫыҡта ла Миңлеғәфүр, Рәйес, Гүзәл кеүектәргә "Афарин!" тиергә генә ҡала. Миңлеғәфүр ҙә бит Фатима Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһының, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се балалар йортоноң ҡумыҙсылар ансамблен етәкләй. Шулай уҡ республикала һәм сит өлкәләрҙә лә уның шәкерттәре бихисап. Һәр төрлө конкурстарҙа еңеү яулап өлгөргән ҡыҙы Ләйсән менән улы Азаматты ла, ҡустыһы Заһирҙы ла шулар иҫәбенә индерергә булалыр. Миңлеғәфүрҙең ғәжәйеп һөйкөмлө тормош иптәше Миләүшәнең (ул да сәхнә оҫтаһы!) наҙлы ҡулдарында бәүелеп, атаһының сығышын тамаша ҡылған ике айлыҡ ҡына Илүзәгә лә киләсәктә сәхнә ене ҡағылмаҫ тимә! Афарин, Зәйнетдиновтар!

Тағымы? Тағы һәр сығышты "Афарин!" тип көслө һәм ихлас алҡыштар менән оҙатҡан тамашасыларҙың күпселеге мәктәп уҡыусылары һәм студент йәштәр булыуы **өмөтләндерҙе**. Шунан әйтеп ҡарағыҙ инде, йәштәр бары еңел-елпе музыканы ғына ярата, тип. Эстрада йондоҙҙары концертында бындай алҡыштарҙы ишеткән юҡ ине әле! Ошо тамашанан мәхрүм ҡалған милләттәштәремде йәлләнем. Бигерәк тә Башҡортостан мәҙәниәте, әҙәбиәте һәм тарихы дәресе уҡытыусыларын һәм уларҙың уҡыусыларын. Был тамаша тиҫтәләгән дәресте алыштырыр көс-ҡөҙрәткә эйә ине. Хәйер, барыһын да нисек һыйҙырып бөтәһең. Нефтселәр мәҙәниәт һарайының ҙур тамаша залы былай ҙа шығырым тулы ине бит.

Ә **тетрәндергәне** шул булды. Яңыраҡ беҙҙә Мордовия Республикаһы көндәре үткәрелгәйне. Конгресс-Холда уҙғарылған Мордовия сәхнә оҫталарының сығышын ҡарарға республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә йәшәүсе мордваларҙы автобустар менән махсус рәүештә саҡыртып алғайнылар. Үҙҙәренең милли кейемдәрен кейеп килгән үҙебеҙҙең мордвалар милләттәштәренең һәр сығышын көслө алҡыштарға күмеп, шул тиклем танһыҡлап ҡарағанын күреп, тәрән уйға батҡайным. Был юлы икенсегә тетрәндем. **Үҙебеҙҙең Башҡортостаныбыҙҙа беҙ ҙә үҙ тыуған моңдарыбыҙҙы шул тиклем танһыҡлап йәшәйбеҙ икән дә, милләттәштәр! Юғиһә, был тамашала һәр сығышты ҡубарылыр сиккә етеп алҡышлап оҙатҡан тамашасыларыбыҙҙың фиғелен башҡаса нисек аңлатаһың!**

**Зөлфиә ХАННАНОВА.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# БӘНДӘ ҠАЙҒЫҒА ТҮҘӘ...
## көрләккә түҙмәй

- Эшең күплеккә зарланма - эш араһында эш бөтөр.
- Үткәндәрҙең иҫтәлеге - алтын һандыҡтағы алтын хазина.
- Томаш яуһа - бал уңа, бола һыҡһа, йөрәктәргә ҡан һауа.
- Бик асырғанып асыуланғанда теш күрһәтеү ҙә урынлы.
- Бәҫ төшөүҙән ағас һынмай, ауырлыҡтан егет бөгөлмәй.
- Тишек - йыртыҡтан, ҡыйыш - салыштан, бөкөрө - кәкеренән, наҙан белемленән көлә.
- Яманға ла, яҡшыға ла йылы һүҙең йәлләмә: ямандың йөрәге ирер, яҡшының күңеле күтәрелер.
- Баштар дуҫ булһа ла, кеҫә дуҫлыҡты яратмай - иҫәп, хисапты һорай.
- Ҡара төндә төртәләнеп йөрөмә - ҡара төн ҡараҡтың ғына юлдашы.
- Ҡыҫып-ҡымтып мал-мөлкәтте, ауыҙ йомоп ҡыны һүҙҙе һаҡлап булмай - ҡымтылған да, йомолған да асыла.
- Бурға мал бөтәме - ҡул һуҙған һайын эләгә.
- Һораныусыға гел мал-мөлкәтең бирмә - бирә-бирә бирәнгә әйләнерһең.
- Һаран өс һала, өс һалһа ла вис һала, кеҫәһе таҡырайып ҡала.
- Ҡайышты нығ һығып быуыуҙан ғына тамаҡ туймай.
- Бал тиһәң, бер кәмей, бармаҡ тыҡһаң, ике кәмей тигәндәй, ғүмер ҙә шулай - берәр көнләп кәмей бара.
- Бәндә ҙур ҡайғыға ла, хурлыҡҡа ла түҙә, тик көрләккә генә түҙмәй.
- Йәш хәтер - гәлсәр һауыт, ҡарттарҙыҡы - ватылған быяла.
- Күҙ күгәртеп көткән кешең, ус ҡабартып эшләр эшең булһын.
- Йәш саҡ - ләйсән ямғыр, ҡарт мәлдәр - ҡышҡы йәйғор.
- Йәшлектә таш та мамыҡ күпмә, ҡартлыҡта мамыҡ күпмә лә ҡаты таш.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

БАҠСА

# МАЙҘЫҢ...

## эше лә күп

**Был айҙа баҡса эштәре араһында иң ауыры - тамырлы сүп үләндәре, бигерәк тә, аҡтамыр менән көрәшеү. Яҙ һайын көрәк менән баҡсаның ерен ҡаҙып, ундағы бар сүп үләндәре тамырын йыйып алырға кәрәк.**

Әммә ҡайһы бер урындарҙы сүп үләндәренән таҙартыуы ауыр. Шуға ла ҡайһы бер баҡсасылар былдай ерҙе симазин тип аталған махсус препарат менән эшкәртә. Уны һыуға иҙеп, инструкцияға ярашлы үләнгә һибеп сығырға кәрәк, шул саҡта аҡтамыр менән сырмалсыҡ та үсеп борсомаясаҡ.

Май айында емеш ағастарында бөрөләр асыла башлағас та 30 грамм карбофос, 20 грамм хлорофос, 40 грамм баҡыр хлорокисын 10 литр һыуҙа иҙеп, һибергә була. Был иҙелмә алмағас сәскәһе менән туҡланыусы ҡорттарҙан, алма ҡорто йоморткаларынан, сейә һәм алма көйәһе ҡарышлауығынан ҡотҡарасаҡ. Әгәр ҙә ҡоротҡостар күп булһа, ағастар сәскәгә бөрөләнгәс, уларҙы тағы бер тапҡыр эшкәртерһегеҙ.

Майҙа апрелдә башланған эштәрҙе лә дауам итергә. Ҡара ҡарағат ҡыуаҡтарын ентекләп ҡарап, бөрө талпаны зарар килтергән бөрөләрҙе йыйып алырға. Еләкте лә ошо ваҡытта ултыртығыҙ. Ҡурай еләге ҡыуаҡтарының өҫкө өлөшөн ҡырҡығыҙ, һынған, ауырыу ботаҡтарҙы алып ташлағыҙ.

Яҙ ҡоро килһә, емеш биреүсе ағас һәм ҡыуаҡтарға һыу һибеү мөһим, был уңышты арттырасаҡ. Уларҙың төбөнә һыуға болғап, мал һәм тауыҡ тиҙәге ҡойоп сығырға кәрәк. Азотлы ашлама һибеүҙән тыйылығыҙ, ул бөшмәк ауырыуҙарына килтерәсәк.

Май кәбеҫтә, кишер, салат, редис, ҡыяр, ҡуҙаҡлылар, һарымһаҡ, ҡуҙғалаҡ, һуған, әнис һәм башҡа йәшелсә культуралары ултыртыу мәле. Кәбеҫтәне асыҡ һауаға май урталарында ултырта башларға мөмкин. Кәбеҫтә үҫентеһен ергә күсереп ултыртҡас, бер тапҡыр етерлек итеп һыу һипһәгеҙ, күсән барлыҡҡа килгәнсе һыу һибеүҙе кәмитергә була, сөнки ул артыҡ дымлы ерҙе ятратмай.

Редисты май башында сәсергә мөмкин, ул һалҡындарға бик сыҙамлы. Яҡынса бер айҙан ул беренсе уңыш бирәсәк, был йәшелсә йәй буйына өҫтәлегеҙҙә булһын өсөн уны июнь аҙағында һәм июль аҙағында яңынан сәсегеҙ. Редис һыу ярата, һыу етмәһә, ул оҙон булып үҫә, ә тәме әсе була. Һуған үҫкән саҡта уның йәшел йыуаһын мөмкин тиклем аҙыраҡ өҙөргә кәрәк, юғиһә, һуғандың төбө ҙур булып үҫә алмай. Һарымһаҡты йыл һайын төрлө урынға сәсеү мөһим. Шул саҡта ғына ул яҡшы уңыш бирәсәк. Кишер яҡты урынды ярата, тупраҡ ҡом ҡатыш булһа, яҡшыраҡ. Кишерҙе ҡар ирегәс тә сәсергә мөмкин. Йәшелсә артыҡ дымды ятратмай. Ҡыяр түтәленә тиҙәкте күп һалырға кәрәк. Был йәшелсә яҡты, дым, йылы ярата. Шуға ла ҡыярҙы теплицала үҫтереү ҡулайлыраҡ. Ҡыярға ҡоя торған һыу мотлаҡ ҡояшта йылынған булырға тейеш, аҙнаһына 2-3 тапҡыр күп итеп һыу ҡойоу яҡшыраҡ. Ҡыяр өлгөрә башлағас, һыуҙы көн аша һибегеҙ. Ҡыяр сәскәһенә бал ҡорттары ни тиклем йышыраҡ ултыра, шул тиклем уңыш яҡшыраҡ була. Шуға ла һыуҙы йә кистән, йә иртә таң менән, бал ҡорттары күпләп оса башламаҫ элек эшләргә кәрәк, сөнки ҡорттар еүеш сәскәгә ҡунмай. Орлоҡто үҙегеҙ эшләйһегеҙ икән, былтырғы орлоҡтарҙы быйыл ғына сәсергә ярамай, сөнки улар ир енесле сәскәләрҙе күберәк бирәсәк. Орлоҡ ике-өс йыл ятырға тейеш. Май башында шулай уҡ календула, флокс, гладиолустар ултыртырға була. Ай аҙағында астра, ҡәнәфер үҫентеләрен, шулай уҡ күп йыллыҡ сәскәләрҙең орлоҡтарын сәсерһегеҙ.

"АЙЫҠ АУЫЛ" КОНКУРСЫ

# АУЫЛДЫ АЙЫҠТЫРЫУҘЫ...

## ауылды эсереүселәргә ҡаршы көрәштән башлау кәрәк

**Республика буйлап "Айыҡ ауыл-2011" акцияһы ышаныслы аҙымдар менән алға атлай. Ул республикабыҙҙың йөҙләп ауылын үҙ артынан эйәртмәксе. Районыбыҙҙың Муллаҡай һәм Убалар ауылдары ла ошо исемлектә. Әлбиттә, конкурста ҡуйылған талаптарға яуап биреп булырмы, тигән борсолоу бар инде ул. Булыр, тим. Ни тиһәң дә, беҙҙә тырыш халыҡ йәшәй. Уларға бары тик дөрөҫ йүнәлеш күрһәтеп ебәреү генә фарыз. Ә ҡалғанын халыҡ үҙ аллы эшләйәсәк. Ер йөҙөндә хәл ителмәй торған мәсьәләләр юҡ бит ул.**

Талаптар, тигәндән. Тәүге талап, әлбиттә, халыҡҡа эш урындары булдырыу. Беләһегеҙ, бөгөн ябай халыҡты эшһеҙлек быуа. Колхоз, совхоздар, урман хужалығы бөтөрөлгәс, көн дә иртән торып эшкә юлланған халыҡ аптыранып ҡалды, ҡул ҡаушыңы, күңелен төшөрҙө. Әле аҙыраҡ һынын турайта халыҡ, ниндәйҙер сараны үҙҙәре күрергә тейешлекте аңлай башланылар. Аҡсалылар, таныш-тоношлолар, йүнселдәр үҙ эштәрен асып ебәрҙе. Күпселек мал-тыуар тотоп, ғаилә ҡаҙнаһын тулыландырырға тырыша. Бына ошо тәңгәлдә, ауыл халҡының барыһы ла шөғөлләнә алған өлкәлә - шәхси хужалығында аҫыраған малдан, үҫтерелгән картуф-йәшелсәнән килем алыуҙа аныҡ ярҙам кәрәк, тип әйтмәксемен. Йәшерен-батырыны юҡ, әлеге көндә ҡалын кеҫәләрҙе килеп, урындағы халыҡтың йонсоп аҫыраған малын осһоҙ һыуҡ хаҡҡа һатып алып китә. Ә ниңә беҙҙә берәй ит һәм һөт эшкәртеүсе завод йәки цех асмаҫҡа? Был эште бойомға ашырырға теләүселәр ҙә юҡ түгел арабыҙҙа. Тик был теләкте хөкүмәт кимәлендә хуплау, ярҙам итеү кәрәк. Эре ауылдарҙа былдай цехтар асылһа, һәр йортта ошо цех өсөн мал аҫырарҙар, цехтың үҙендә кешеләр өсөн эш урындары булыр ине.

Беҙҙең Архангел районы урман зонаһында урынлашҡанға күрәлерме, күптәр бөгөн таҡта ярҙырыу цехтары асып, ағас эштәре менән шөғөлләнә. Бик хуп. Тик бына урманда йүнле ағас ҡалмауы ғына эсте бошора. Урман хужалығы бар саҡта эшкә яраҡлы ағастар киҫелеп бөттө. Йәшерәктәре әле быуын ныҡытып өлгөрмәгән. Ә шулай ҙа был өлкәләге эште лә дауам итергә кәрәк, тип уйлайым. Хәҙер туризм тураһында күп һөйләйҙәр, ә беҙҙең урман-тауҙарыбыҙҙа бынамын тигән туристик маршруттар ойоштороп булыр ине. Уны ситтән килеп түгел, ә бына шул урманды, урман һуҡмаҡтарын белгән егеттәребеҙ ойоштороп ебәрә ала, тип уйлайым. Туризмды үҫтереү Хөкүмәт кимәлендә хәстәрләнгәс, ул төбәктәрҙең инфраструктураһын яҡшыртыу мәсьәләһе лә күҙҙә тотолалыр бит инде. Бына, мәҫәлән, беҙҙең яҡтарҙағы халыҡты юлһыҙлыҡ мәсьәләһе бик борсой. Беҙҙең Убалар ауылына илткән юлға бер нисә йыл элек түшәлгән таштар ергә батып, соҡорсаҡыр барлыҡҡа килтерҙе. Йәйен ямғырҙан һуң ҡайһы бер урамдарҙан техника менән түгел, йәйәү ҙә йөрөп булмай. Бының өсөн күп кенә сығым талап ителеүен дә яҡшы аңлайбыҙ. Шулай ҙа "Айыҡ ауыл" акцияһында ҡатнашҡан ауыл булараҡ та беҙҙең был проблемаға ниндәйҙер иғтибар булыр тип өмөт итәбеҙ.

Үҙгәртеп ҡороу елдәре ыңғай күренештәр менән бергә, киреләрен дә үҙ артынан эйәртеп килтерҙе. Эшһеҙ ҡалыусыларҙың бер өлөшө оҙаҡ уйлап тормайынса үҙ өйөндә "спирт заводы" ойоштор҇о. Көмөшкә ҡыуыусылар һәр бер ерҙә тиерлек бар, әлбиттә. Ҡайҙа ғына барһаң да "Фәлән кеше көмөшкә менән һатыу итә", тигән йән өшөткөс хәбәр ишетергә тура килә. Был фәләндәр хәҙер берәү-икәү генә түгел, хатта егермегә лә барып етте. Уйлап ҡарайыҡ әле, бер ауылда ике тиҫтә кеше ошондай хилаф эш менән мауыға. Ошо рәүешле улар хәрәм юл менән үҙ кеҫәһен ҡалынайтҡан ваҡытта, икенсе берәүҙең ғаиләһе тарҡала. Шул сәбәпле күпме балалар етем ҡала. Ә өҙөлгән кеше ғүмерҙәре... Эйе, эскеселәр үҙ-үҙҙәрен аҡлау өсөн төрлө сәбәп табырға тырыша. Күпселеге замананың ауырлығына, етешһеҙ тормошҡа зарлана. Йә, әйтегеҙ әле, ҡайһы дәүерҙә халҡыбыҙға йәшәү еңел булған?! Сабырлыҡ һаҡлаһаң, барлыҡ ҡыйынлыҡтар ҙа артта ҡала. Ауырлыҡтарҙан һуң билдәле еңеллектәр ҡолас йәйеп көтөп тороусан.

Ә шулай ҙа теге фәләндәрҙең яуыз эшенә нисек кәртә ҡуйырға? Акцияның икенсе төп маҡсаттарының береһе тап ошоно күҙ уңында тота ла инде. Ауылды айыҡтырабыҙ икән, тимәк, эште ауылды эсереүселәргә ҡаршы етди саралар күреүҙән башларға кәрәк. Һәр хәлдә, башланған акцияның матур һөҙөмтәләр биререн юрап ҡалам.

**Азамат ӘЛМӨХӘМӘТОВ.**
**Архангел районы.**

ШАҢДАУ

# ӘСӘЙ, ҺЫРА АЛМА!

**Мабуғатта баҫылып сыҡҡан "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте мөрәжәғәтен укып сыҡтым һәм уны тулыһынса хуплайым.**

Айыҡ аҡыл менән йәшәү - ҙурлыҡ, ә эскелек хурлыҡ икәнен бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ. Был мәсьәләне хәл итеүҙә күп нәмә беҙҙең тәрбиәбеҙгә, ихтыяр көсөбөҙгә, милли үҙаңыбыҙға һәм йәмғиәтебеҙ тарафынан үҙ ваҡытында һәм дөрөҫ ҡабул ителгән ҡарарҙарға бәйле. "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте лә үҙ маҡсатына өлгәшер, тигән өмөт бағлайым.

Көндәлек тормоштан йәнде үртәгән бер күренеште яҙып үтәйем. Минең йортом араҡы һатылыусы магазиндарҙың береһенең ҡаршыһында урынлашҡан. Кеше өҙөлмәй ул кибеттән. Йәйен-ҡышын, яҙын-көҙөн ҡиммәтле иномаркалар һәм башҡа машиналар килеп туҡтай, ҡупшы-затлы кейенгән ханымдар, ир-ат, хатта ҡарт-ҡоро, үҫмерҙәр ҙә урап үтмәй уны, йыш ҡына инә һалып сығалар. Шунда уҡ хужалыҡ тауарҙары ла һатыла (бүтәндәрҙе лә эскегә йәлеп итергә уңай вариант). Әгәр күҙәтһәң, көн һайын бер үк һатып алыусыларҙы ла күрергә була. Бер көндө шул магазин эргәһенән үтеп барған бер ҡыҙ баланың (балалар баҡсаһынан ҡайтып киләләр ине) әсәһенә өндәшеүе ҡолаҡҡа салынды. "Әсәй, бөгөн атайға пиво (һыра) һатып алма, йәме", - ти ҡыҙыҡай иламһырап. Әсәһе "Ярай", тип яуапланы. Бына шулай, күп осраҡта ҡатындары ирҙәренә һыраны ла, араҡыны ла үҙҙәре һатып ала шул. Иншалла, үҫеп килеүсе быуын беҙҙән күпкә аҡыллыраҡ. Улар әйткән һүҙҙәргә ҡолаҡ һалайыҡ, ата-әсә! Һыра, араҡы, тәмәке һатылған кибеткә һалынған бысраҡ, таҡыр юл бигерәк тә үҫеп килеүсе йәш быуындың аңында ныҡлы урын алмаһын өсөн уны урап үтәйек.

**Филзә АЛЛАБИРҘИНА.**
**Хәйбулла районы.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ФАТИХАЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ -



## Ерҙәге ожмах сағылышы ул

### Ир-егеттең бурыстары

Һәр ғаиләнең нигеҙ ныҡлығы ғаилә башлығының диндарлығынан тора. Тәҡүәле ир-егет - ул үҙенең бурыстарын: ғаиләне тәьмин итеү һәм уны тәрбиәләүҙе теүәл үтәүсе. Бының өсөн ир-егет, иң беренсе, аҡыллы, иғтибарлы, тәжрибәле, оҫта, тәрән иманлы һәм юғары әхлаҡлы булырға тейеш.

Ғаилә ҡоторға ҡарар итҡән ир-егет иң беренсе ғаиләһен тик хаҡ юлда тапҡан мөлкәт менән тәьмин итергә кәрәклеген аныҡ белергә тейеш. Ир-егет ғаиләһен торлаҡ, кейем һәм ризыҡ менән тәьмин итә. Әгәр мөмкинлек булһа, ғаилә ағзалары үҙҙәрен хәүефһеҙ тойһон өсөн йәшәү урынын яҡшы районда, изгелекле күршеләр янынан һайлай. Ғаиләнең туҡланыуы ла ир-егеттең эшләгән килемнә бәйле. Шуға күрә ул яҡлауланырға, үҙ иңенә көсө етмәҫтәй эш алырға тейеш түгел.

Ғаилә башлығы үҙенең ҡатынын һәм балаларын кәм тигәндә ике миҙгел кейеме менән тәьмин итергә тейеш. Байрам, йомаға йәки ниндәй ҙә булһа байрамдарға йәки туйға, шулай уҡ башҡа ҡыуанысылы ваҡиғаларға тәғәйенләнгән күлдәктәр алыу ҙа гонаһҡа инмәй. Сама менән биҙәүестәр тағыу

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# МИЛЛИ БАЙЛЫҒЫБЫҘ



## Бөрйән бал ҡорто һәм солоҡсолоҡ

**Кеше тәбиғәттәге башҡа терек-лектәрҙән ҡырҡа айырыла. Аллаһы Тәғәлә кешегә аң-аҡыл биргән. Шуға күрә беҙ үҙебеҙҙе "Аңлы кеше" (Homo sapiens) тип атап йөрөтәбеҙ. Шулай ҙа уйлап ҡарайыҡ әле: былдай өҫтөнлөк беҙҙең файҙағамы, әллә кеше үҙе ултырған ботаҡҡа үҙе балта сабамы? Миңә ҡалһа, Хоҙай биргән аҡылды кеше файҙалы ҡулланмай, буғай. Был хәл бал ҡорттары миҫалында ла асыҡ сағыла.**

Кеше бөгөн тәбиғәттә үҙен хужа итеп тоя, тәбиғәттән байлыкты умырып ала, әммә барыбер етмәй. Ул тәбиғәтте ике өлөшкә бүлә, һөҙөмтәлә "аңлы кешенең" дуҫтары һәм дошмандары барлыҡҡа килде. Әлбиттә, кеше дуҫтарына ярҙам итә, ә "дуҫ булмағандарға" ҡырын ҡарай башлай. Был йәнлек миңә оҡшай, сөнки ул миңә табыш килтерә, ә бына быныһы оҡшамай, унан миңә бер тинлек тә файҙа юҡ - бүлеү бына ошо дәлилдәргә таяна. Ябай ғына миҫал килтерергә була. Әйтәйек, бүре. Ул оҡшамай, сөнки ул йыртҡыс. Шуға күрә уны ҡырып бөтөрөргә кәрәк. Һис юғында йәшәһен ул ни бары "санитар" булып. Бына ҡоштар беҙгә оҡшай, шуға күрә уларға беҙ ярҙам итәбеҙ. Ҡыш тағараҡтар эләбеҙ, ем һалабыҙ. Ҡоштар көнө үткәрәбеҙ. Ә бына бүре көндәре үткәреү... Был башҡа ла килмәгән уй.

Бәхеткә ҡаршы, бал ҡорто кешенең дуҫтары исемлегенә эләгә. Бына, әйтәйек, бөрйән ҡорттары һыуыҡҡа сыҙамлы һәм, иң мөһиме, егәрле. Балы килеп тороп тәмле. Был кешегә оҡшай. Ә шулай ҙа оҡшамаған сифаттары ла бихисап. Ул уҫал, имеш, килеп тороп ныҡ саға. Етмәһә, баҫтырып йөрөп саға. Күп күс айыра, улары кешенең түш тапҡырында ғына үҫкән муйыл ботағына ғына һыҙмай бит әле. Мотлаҡ уға ағас башына барып ҡунырға кәрәк. Кешегә ҡыйын - баҫкыс һөйәргә кәрәк, менергә кәрәк, можғаға тултырырға кәрәк. Егәрлеккә егәрле ул, тик ... ике-өс аҙнаға ғына. Йүкә сәскә атҡан осорҙа ғына ныҡлап эшләй. Йыл әйләнәһенә бал йыйып йөрөмәгәс ней. Шуға балды ла әҙерәк йыя, шилмалар. Ҡыҫҡаһы, тәбиғәт тарафынан миллион йылдар буйы бары тик ошо мөхиткә генә яраҡлашкан бал ҡорто кешегә, аптырарһың, оҡшамай. Уйлап ҡына ҡарағыҙ әле - ғалимдар раҫлауынса, бал ҡорто 115-120 миллион йыл элек барлыҡҡа килгән. Ә кеше, яҙыуы ла унайһыҙ, бер-ике йыл эсендә үҙенә оҡшаған бал ҡорто сығармаҡсы. Был мөмкин түгел. Ә шулай ҙа кеше тәбиғәттең танауына сиртмәксе була - үҙенә оҡшаған бал ҡорто сығарыу уйы бер ҙә тынғы бирмәй уға.

Ә шулай ҙа халыҡ мәҡәлде тиктәнбуштан ғына әйтмәгәндер: "Күптең һанын биргәнсе, аҙҙың бәрәкәтен бирһен". Булғанына шөкөр итеп йәшәргә лә бит, әммә кеше "үҙе егәрле, үҙе йыуаш, үҙе күс айырмай" торған бал ҡорто сығарыу өҫтөндә ихлаҫлап эш башлап ебәрә. Кеше өсөн был эш бер ҙә ҡатмарлы тойолмай. Уның фекеренсә, яңы ҡорт сығарыу асылы ябай ғына. Бары тик ике-өс тоҡом ҡорттарын бергә ҡушыу ғына кәрәк. Шуның менән эше лә бөттө. Әммә тәбиғәтте улай ғына алдап булмай шул. Шуныһы бер аҙ тынысландыра - был эш иң тәүҙә Европа илдәрендә башланып китә. Унда илдәр бәләкәй, юлдар һәйбәт, аҡса бар. Шуға күрә күпләп сит илдәрҙән күстәр индерелә. Һөҙөмтәлә яңы бал ҡорто түгел, ә тоҡом ҡорттарының тотош буталышы килеп сыға. "Күпте теләгән берҙән ҡоро ҡалған", ти бит халыҡ мәҡәле. Быны Европала аңлайҙар, әммә эш үткән була. Бөгөн был илдәрҙә тәбиғәт биргән тоҡом ҡортон кире тергеҙеү буйынса ҙур эштәр башҡарыла, әммә "терһәк яҡын, ә тешләп булмай". Миҫал өсөн Германияны килтерергә була. Бында ошо ерлеккә яраҡлашҡан бал ҡортон ҡайтанан тергеҙеү буйынса хөкүмәт тарафынан 20 йыл буйына эш алып барыла. Әммә, башҡарған эштәрҙең ыңғай һөҙөмтәһе булманы, тигән һығымтаға киләләр.

Рәсәй был эште һуңыраҡ башлап ебәрә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, башлап ебәрә, тип яҙырға тура килә. Сөнки Европа илдәренең терһәктәрен тешләрҙәй булып сабышып йөрөүен күреп һығымта яһарға мөмкинселек бар ине. Әммә шул уҡ тырмаға тағы берҙе баҫып ҡарарға була Рәсәй умартасылары. Баҡтиһәң, һөҙөмтә шул уҡ икән - тырмаға баҫһаң, һабы шул уҡ көс менән маңлайға һуға икән дәбаһа. Бына хәҙер Рәсәйҙә лә, бал ҡортон һаҡлайыҡ, тип сабышып йөрөйҙәр.

Быны ситтән күҙәтеп торғанда былдай хәл беҙгә бер ҙә ҡағылмаған һымаҡ. Әммә бөгөн дөйөм илдә иҫ киткес үҙгәрештәр бара. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның шауҡымы Бөрйән еренә лә килеп етте, буғай. Хәҙер юлдар һәйбәт, машиналар көслө, күп кеше аҡсалы. Бөгөн күптәргә урманды ҡуртымға алыу бер ни тормай. Йүкә сәскә атҡан осорҙа Бөрйән еренә ситтән күпләп сит бал ҡорто индерелә. Ҡортсолоҡ тураһында закон барлыҡҡа бар ҙа ул, әммә ул йүнлән эшләмәй. Һөҙөмтә лә оҙаҡ көттөрмәне: урындағы бал ҡорттары ят ҡорттар менән аралаша башланы. Күптәр хәлдең үтә киҫкен торғанын аңлар һымаҡ та бит. Әммә ысынбарлыҡта хәл бөтөнләй икенсе. Миңә ҡорто ниндәй булһа ла булһын, балды күберәк бирһә, булған, тип әйтә замана кешеһе. Уның дәлил көслө - бал күберәк булған һайын, килем дә күберәк. Әммә тәбиғәтте алдап булмай. Бөрйән ҡортон юғалтыу менән уның даны ла, килеме лә юғаласаҡ.

Был мәҡәләне яҙғанда мин мәҡәлдәргә таянып яҙырға тырыштым. Минеңсә, халыҡ ошо мәҡәлдәр аша айырым кешеләргә уйланырға мөмкинселек бирә. Беҙҙең әле һайлау мөмкинселеге бар - тырмаға баҫып ҡарайыҡмы әллә һаҡлап ҡалайыҡмы Бөрйән ҡортон?..

Әғләм ШӘРИПОВ,
биология фәндәре кандидаты.
Бөрйән районы.

(Аҙағы. Башы алдағы һандарҙа).

---

ҙа рөхсәт ителә. Шулай ҙа кейемдә махсус рәүештә кешегә күрһәтеү, етмәһә, бүтәндәргә түбәнһетеп ҡарау маҡсатында кейеү Исламда ҡәтғи рәүештә тыйыла.

Ирҙәр өсөн ебәк кейемдәр кейеү һәм алтын биҙәүестәр (балдаҡ, сәғәт һ.б.) тағыу - харам, юғиһә, әхлаҡ күҙлегенән ҡатынҡыҙҙарға тәғәйенләнгән биҙәүестәргә тағыу төрлө көсһөҙлөктәр барлыҡҡа килеүгә алып килә.

Ҡатын менән балаларына дини һәм әхлаҡи тәрбиә биреү һәр ир-егеттең изге бурысы һанала. Изге Ҡөрьәндә: "Эй, иманлылар! Кешеләрҙе һәм таштарҙы яндырған уттан үҙегеҙҙе һәм ғаиләгеҙҙе ҡотҡарығыҙ...", - тиелә (Әт-Тәхрим, 6). Был изге бурыстың сиктәре һәр йәмғиәт ағзаһының позицияһынан, һәләтенән тора һәм ғаилә эсендәге генә түгел, шулай уҡ бөтә милләт эсендәге мөнәсәбәттәрҙә үҙ эсенә ала, сөнки әйләнәтирәләге йәмғиәт ғаилә эсендәге мөнәсәбәттәрҙең нисек ҡоролоуына шулай уҡ тәьсир итә.

Һәр ғаилә башлығы бөтә ғаилә ағзаларын Изге Ҡөрьән нигеҙҙәрен өйрәтеүгә, шулай уҡ Аллаһы Тәғәләгә һөйөү тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бүлергә тейеш. Атаәсәнең балаларына ҡалдыра алған иң ҡиммәтле аманаты - мәңгелек донъяны аманат итеү икәнен оноторға ярамай. Балаларында изге Ҡөрьәнгә һөйөү уятып, уларҙан хафиздар тәрбиәләүсе атаәсә иң бәхетлеһе.

Балаларҙы бәйғәмбәрҙәр тормошонан миҫалдар өлгөһөндә тәрбиәләү, шулай уҡ уларҙы мәғәнәһеҙлектән, көфөрлөктән ҡотҡарып, имандарын нығытыу мөһим. Шуға күрә Ҡөрьән өйрәнеү менән бер рәттән, Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тормошона ла иғтибар бүлергә кәрәк, сөнки уның тормош юлы мосолмандарҙың изге китабының иң яҡшы тәфсире булып тора. Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сөннәтенә өйрәнер өсөн Уның тормош миҫалынан һәм юғары әхлағынан өлгө алырға кәрәк.

Ир-егет шулай уҡ үҙенең ғаиләһен төрлө хәүефтәрҙән, мәҫәлән, ғаилә ағзаларының рухи һәм әхлаҡи ҡиммәтләренә насар йоғонто яһаусы шикле дуҫтарҙан һәм таныштарҙан, телеһәм радиотапшырыуҙарҙан, түбән сифатлы китаптарҙан һәм баҫмаларҙан һаҡларға тейеш. Бер һүҙ менән әйткәндә, ир-егет инендә ғаиләнең эске һәм тышҡы сиктәрен һаҡлау өсөн ҙур яуаплылыҡ ята.

Усман Нури ТОПБАШ.

(Дауамы бар).

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Өндәге төш - сикһеҙ байлыҡҡа юл

Монгол шаманы Хуктуту тарафынан әйтелгән.

Төньяҡ Азия монголдары, бигерәк тә уларҙың ҡанбаба-шамандары, серле көстәре менән билдәле. Шамандар әруахтарҙы саҡырып, уларҙы үҙҙәренең ихтыярына буйһондора ала, тип уйлағандар. Бынан тыш, улар медиумдар һәләтенә эйә булған һәм визуаллаштереү аша ижад иткән.

Сыңғыҙхан ҡулы аҫтында 12-се быуатта берләшкән, һуңынан Батый етәкселеге аҫтындағы төрки ҡүсмә халҡы менән ҡатнашҡан монголдарҙың сикһеҙ кинлектәрҙе буйһондора алыуы, көньяҡҡа Ҡытайҙың үҙенә тиклем үк, көньяҡкөнбайышҡа Төркөстанға, Иран һәм Ираҡҡа, шулай уҡ төньяҡ-көнбайышҡа, Русь территорияһына үтеп инеүҙәре аптырата.

Уларҙы Алтын Урҙа тип атағандар. Яулап алыуҙар сикһеҙ байлыҡ килтерһә лә, Урҙа ҡалалары Азияға үткән төп сауҙа юлдарының сәскә атыуы, космосәйәси үҙәктәре булып торған. Улар тәҙегән мәҙәниәт һиҙелерлек кимәлдә тормош кимәле стандарттарын яҡшыртҡан. Улар император һарайының йогонтолологона хайран ҡалған Марк Поло заманында Ҡытайҙа власта булған. Әммә байлыҡҡа бәйлелек уяулыҡтарын, үҙ-үҙҙәрен яҡлау кәрәклеген онотоорға мәжбүр иткән. Урҙа ҡыйратылған.

Был главалағы сығанаҡ башҡаларына ҡарағанда замансараҡ. Ул - монгол шаманы Дилава Хуктуту, Эске һәм Тышҡы Монголияның уҙған быуат уртаһында коммунистар ҡулға алған һуңғы тере Буддаһы.

Монах булараҡ, ул тормош рәхәтлегенә ынтылыуҙан баш тартҡан, шуға ҡарамаҫтан, байлыҡ уны әҙәрлекләгән. Ул бер ваҡытта ла бер нәмә лә теләмәгән, әммә уның ихтыяжы һәр саҡ ҡәнәғәтләндерелгән. Уның эргәһендә уҡыусыларын мөхәббәт һәм шәфҡәтлелек тойғоһо биләп алған. Илде коммунистар баҫып алғас, ул АҠШ_та һыйыныу тапҡан һәм һуңғы һулышын алған уҙған быуаттың 60-сы йылдарына тиклем шунда ҡалған.

Һеҙ Алтын Урҙа кимәлендә уңыш ҡаҙанырға теләйһегеҙме? Был глава һеҙгә юл күрһәтер. Әммә быны өсөн үҙегеҙҙең Юғары Минегеҙ һәм Илаһ менән бәйләнешегеҙҙе быға тиклем яҙылған күнекмәләр аша нығытырға кәрәк. Бынан һуң да, ҡулаҡсағыҙ күп булһын өсөн, көс түгергә тура киләсәк

Илаһтың үткәреүсеһе булырға ҡамасаулаған ҡаршылыҡтар кеүек үк, һеҙгә аҡса ағымын ебәрмәй тотоп тороусы кәртәләр ҙә бар. Уларҙы тәҡдим ителгән күрһәтмәләр ярҙамында юлығыҙҙан алып ташлағыҙ һәм ысын аҡса буранын көтөгөҙ!

**Ҡиммәт баһаланған кире программаланыу**

Ярлылыҡ - аҡыл торошо. Тап шуның арҡаһында байҙар тағы ла байый, ярлылар ярлылана. Ярлылыҡтан баш тартыуҙың күп ысулдары бар. Тәү сиратта, һеҙҙе бала саҡта уҡ программалаған инаныуҙарҙан арыныу кәрәк.

Мәҫәлән, ата-әсәйегеҙ ярлы булған һәм улар һеҙгә даими рәүештә шундай аҙмышты урап үтеп булмауға ышандырған. Бер психологик тикшеренеүгә ярашлы, баланың аңына һеңгән бер кире раҫлауҙы тәҙәтеү өсөн тугыҙ ыңғай раҫлау кәрәк.

Әгәр үҙбаһағыҙ түбән икән, ата-әсәгеҙҙең байлығына ҡарамаҫтан, һеҙ үҙегеҙҙең мейе компьютерығыҙҙы күп аҡса эшләй алмауығыҙға, тимәк, бай була алмауға программалаясаҡһығыҙ. Әгәр һеҙ ярлылыҡта интекмәһәгеҙ, әммә уларҙы күреп йөрөп, бер ваҡытта ла матди хәлдәрен яҡшырта алмауҙарына инанһағыҙ, үҙегеҙҙе ярлылар һәр ваҡыт ярлы булып ҡала, тип программалайһығыҙ.

Роберт Стоун.



## 9 МАЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 Новости
05.10 "День Победы". Праздничный канал
05.35 "Великий полководец Георгий Жуков"
06.00, 07.00, 08.00 Новости
08.10 "День Победы"
09.00 Новости (с субтитрами)
09.50 "Диверсант. Конец войны". 10 серий. Военная драма
11.50 Новости (с субтитрами)
12.00 Парад, посвященный Дню Победы. Москва. Красная площадь
13.00, 15.00 Новости (с субтитрами)
13.10, 15.10 "Диверсант. Конец войны". Продолжение
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.10 "Диверсант. Конец войны". Продолжение
18.55 Минута молчания. Светлой памяти павших в борьбе против фашизма
19.00 "Диверсант. Конец войны". Окончание
19.50 "Брестская крепость". Военная драма
22.00 "Время"
22.30 "В бой идут одни "старики". Военная драма
00.00 "Берег". Мелодрама
02.10 "Жди меня, Анна"
03.30 "Вам - задание"

### РОССИЯ 1

06.05 "Крепкий орешек". Комедия
07.20 "Они сражались за Родину", 2 серии. Военная драма
09.55 "Военные песни"
10.50 "Смертельная схватка". Военная драма
12.00 Военный парад, посвященный 66-й годовщине Победы в Великой Отечественной войне 1941-1945 гг. Москва. Красная площадь
13.00, 14.15 "Смертельная схватка". Продолжение
14.00 "Вести"
15.15 "Парад звезд"
16.45 "Жажда". Военная драма
18.55 Минута молчания. Светлой памяти павших в борьбе против фашизма
19.00 "Жажда". Продолжение
20.00 "Вести"
20.30 "Тихая застава". Военная драма
22.00 "Вдовий пароход". Драма
23.35 "Агент А/201. Наш человек в гестапо". Док. фильм
01.05 "Жду и надеюсь"
03.25 "Вальс"
04.30 "Городок"

### НТВ

06.15 "Последний бой майора Пугачева", 4 серии. Военная драма
10.00 "Сегодня"
10.25 "Спето в СССР". "День Победы"
11.20 "Катя. Продолжение", 1-4-я серии. Военная драма
18.55 Минута молчания. Светлой памяти погибших в борьбе против фашизма
19.00 "Сегодня"
19.30 "Катя. Продолжение", 13-16-я, закл. серии
23.15 "В августе 44-го..." Военная драма
01.25 "Футбольная ночь"
02.00 "Дело чести". Криминальная драма
03.55 "До суда"

### БСТ

**07.00 А. Мирзагитов. "Матери ждут сыновей". Спектакль БГАДТ им. М. Гафури**
**09.00 "С Днем Победы, Республика!" Праздничная трансляция**
**12.00 "Специальный репортаж"**
**12.15 Концерт**
**13.00 "Солдатские письма"**
**13.30 М. Карим. "Радость нашего дома". Фильм-спектакль**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Судьбы". Ш. Сайфуллин**
**16.30 "Победный май"**
**17.00 "Они видели Победу"**
**18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**19.00 "Солдаты Победы". Рамазан Кутушев**
**19.30 "Лента памяти"**
**20.00 "Песни огненных лет". Концерт**
**21.15 "Специальный корреспондент"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Знаменосец Победы"**
**22.45 "Музыка объединила нас". Юбилейный концерт НОНИ**
**00.00 Художественный фильм**

## 10 МАЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Выхожу тебя искать", 1-я серия
22.25 "Владислав Листьев. Мы помним". Док. фильм
23.00 "Военный ныряльщик"
01.00 Конкурс "Евровидение-2011". Первый полуфинал
03.00 Новости
03.05 "Положись на друзей"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Спасти себя. Лариса Мондрус"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 50-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 77-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 152-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Крутые берега", 1-я и 2-я и 3-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Битва за цвет. Кино"
01.00 "Профилактика"
02.15 "Горячая десятка"
03.15 "Горячая картошка"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чистосердечное признание"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Государственная защита". "Любой ценой". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Победитель победителей". Док. фильм
00.25 "Кулинарный поединок"
01.25 "Без следа-7", 1-я серия. Сериал
02.20 "Суд присяжных"
03.20 "До суда"
04.20 "Особо опасен!"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Памяти Кадыра Даяна"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Царь горы"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Две звезды"**
**17.30 "Автограф". И. Киньябулатов**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Янсык"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Криминальный спектр"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30, 00.45 Новости (на башк. яз.)**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.30 "Надо знать!"**

## 11 МАЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Выхожу тебя искать", 2-я серия
22.30 "Шесть дней, семь ночей". Приключения
00.20 "Приют"
02.20, 03.05 "Симулянт"
03.00 Новости
04.10 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Между драмой и комедией. Ян Арлазоров"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 51-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 78-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 153-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Крутые берега", 4-я, 5-я и 6-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Красная Мессалина. Декрет о сексе". Док. фильм
01.00 "Профилактика"
02.15 "Честный детектив"
02.45 "Табачный капитан"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Очная ставка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Государственная защита". "Матрешка". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Настоящий итальянец"
00.25 "Квартирный вопрос"
01.30 "Без следа-7". Сериал
02.20 "Суд присяжных"
03.25 "До суда"
04.20 "Особо опасен!"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Янсык"**
**10.30, 18.15 "Специальный репортаж"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Мастерская на колесах"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Байык-2011"**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Противостояние"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Историческая среда"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Любимое дело"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Замандаштар"**
**23.15 "Орнамент"**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 12 МАЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Выхожу тебя искать", 3-я серия
22.30 "Прожекторперисхилтон"
23.00 "Другая сестра"
01.00 Конкурс "Евровидение-2011". Второй полуфинал
03.00 Новости
03.05 "Бейсбольная лихорадка"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Гениальный отшельник. Вечная музыка Шварца"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 52-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 79-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 154-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Крутые берега", 7-я, 8-я и 9-я серии
22.50 "Поединок"
23.50 "Вести+"
00.10 "Осторожно, фальшаки!"
01.00 "Профилактика"
02.15 "Глаза незнакомца"
04.00 "Городок"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Государственная защита". "Человеческий фактор". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело темное"
00.25 "Дачный ответ"
01.30 "Без следа-7", 3-я серия
02.25 "Суд присяжных"
03.50 "До суда"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Башкорттар"**
**10.30, 18.15 "Специальный репортаж"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Цирк в 13 метров"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Автограф"**
**17.00 "Минуты поэзии"**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Замандаштар"**
**19.15 "Пора разобраться"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Любимое дело"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 13 МАЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 Новости
05.05 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Клуб веселых и находчивых"
23.30 "Закрытый показ. "Золотое сечение". Приключенческий фильм
02.30 "В ночи"
04.40 "Вспомни, что будет"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Мой серебряный шар"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 53-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести ПФО"
16.50 "Все к лучшему", 80-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 155 и 156-я серии
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Фактор А". Музыкальный конкурс
22.30 "Кандагар". Драма
00.35 "Ловец снов". Фильм ужасов
02.55 "Летние забавы"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Развод по-русски"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Суд присяжных: главное дело"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "Двое в чужом доме". Драма
22.50 "НТВшники"
23.55 "Женский взгляд"
00.45 "Добро пожаловать домой, Роско Дженкинс". Комедия
03.30 "Суд присяжных"
04.05 "До суда"
05.00 "Ты не поверишь!"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Книга сказок"**
**11.30 "Приключения мастера Кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и др.**
**16.15 Концерт У. Муртазина**
**17.30 "Узаман". М. Шамигулов**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15, 20.45 "Криминальный спектр"**
**19.15 "Йома"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 "Замандаштар"**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 14 МАЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40, 06.10 "Внук космонавта"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.50 "Вкус жизни"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.10 "Трудно быть мачо". Детектив
15.10 "Общая терапия". Мелодрама
17.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
18.20 "Пираты Карибского моря: проклятие "Черной жемчужины". Приключения
21.00 "Время"
21.15 "Yesterday Live
22.25 "Прожекторперисхилтон"
23.00 "В постели с врагом"
01.00 "Евровидение-2011"
04.10 "Больше меня"

### РОССИЯ 1

04.45 "Холодное лето пятьдесят третьего..."
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Честный детектив"
12.20 "Вера, надежда, любовь". Мелодрама
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Вера, надежда, любовь. Продолжение
16.40 "Субботний вечер"
18.55 "Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Петр Первый. Завещание", 1-я и 2-я серии. Историческая драма
22.45 "Вести". "Первые двадцать лет". К 200-летию радио и телевидения России
00.35 "Девчата"
01.10 "Полтергейст". Фильм ужасов
03.35 "Искусство красиво расставаться"

### НТВ

05.45 "Холм одного дерева". Сериал
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Живут же люди!"
09.20 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Знак судьбы-2". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски"
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа максимум. Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.55 "Последнее слово"
23.55 "Нереальная политика"
00.30 "Мамма миа!" Мюзикл
02.45 "Страх и ненависть в Лас-Вегасе". "Черная" комедия
05.05 "Суд присяжных"

### БСТ

**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 Концерт симфонической музыки**
**09.00 Третий звонок. Н. Асанбай. "Красный Паша. Спектакль БГАДТ им. М. Гафури**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Весы"**
**13.30 "Йома"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 "Литературный альманах"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Музыкальная шкатулка"**
**19.45 "Весело живем"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Следопыт"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Байык-2011"**
**23.00 КВН. Сезон 2011. 1/4 финала**
**00.45 "Свидание с джазом"**

## 15 МАЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Примите телеграмму в долг"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье
10.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.20 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Мистическая сила Мастера". К юбилею Михаила Булгакова
13.20 "Собачье сердце". Трагикомедия
15.50 "Александр Жулин. Стойкий оловянный солдатик". Док. фильм
17.00 "Квартирантка". Мелодрама
18.50 "Жестокие игры". Новый сезон
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Мульт личности"
22.30 "Элегия"
00.30 Хоккей. Чемпионат мира. Финал. Прямой эфир из Словакии
02.50 "Вспомни, что будет"
04.30 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1

05.10 "Вылет задерживается". Мелодрама
06.40 "Сам себе режиссер"
07.30 "Смехопанорама"
08.00 "Утренняя почта"
08.40 "Сто к одному"
09.25 "Города и Веси"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
10.40 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Вера, надежда, любовь". Мелодрама
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Вера, надежда, любовь". Продолжение
15.40 "Смеяться разрешается"
17.45 "Если бы я тебя любил..." Мелодрама
20.00 "Вести недели"
21.05 "Петр Первый. Завещание", 3-я и 4-я серии
23.10 "Специальный корреспондент"
00.10 "Забирая жизни". Мистический триллер
02.15 "Неотразимая Марта"

### НТВ

05.55 "Холм одного дерева". Сериал
07.40 Мультфильмы
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.50 "Пир на весь мир"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Знак судьбы-2". "Смерть напрокат"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "История всероссийского обмана. Выход есть!"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа с Кириллом Поздняковым"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
22.00 "Глухарь". Сериал
01.00 "Авиаторы"
01.30 "Главная дорога"
02.05 "Братва по-французски". Криминальная драма
04.15 "Особо опасен!"

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 Концерт. Группа "Аргамак"**
**08.15 Н. Гаитбаев. "Весело живем". Спектакль Стерлитамакского БГАДТ**
**10.00 "Тамыр" представляет…"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Весы"**
**13.30 "Дорога к храму"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Волшебный курай"**
**18.15 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Автограф". Азат Абдуллин**
**19.30 "Любимое дело"**
**19.45 "Весело живем"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Забытые войны"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "Специальный репортаж"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Башкорттар"**
**22.30 "Вечер.com"**
**23.15 "Визит дамы"**

КӨН ҠАҘАҒЫ

# НИСӘ ТАПҠЫР ҮЛЕРГӘ БУЛА?

**Май айының тәүге көндәре бар донъя халҡы өсөн бер үк хәбәрҙән башланды. Ул да булһа, Американың махсус хеҙмәттәре тарафынан Пакистанда "Аль-Каида" террористик ойошмаһы башлығы Усама бен Ладендың юҡ ителеүе. Был хаҡта Америка президенты Барак Обама тура телеэфирҙа белдерҙе.**



Пакистанда уҙғарылған был операцияға ҡарата донъя илдәренең барыһы ла тиерлек үҙҙәренең ыңғай фекерен белдерҙе. Барыһы ла шат һәм ҡәнәғәт, сөнки әллә күпме террористик операциялар сәбәпсеһе булған "Аль-Каида" ойошмаһы етәксеһе бик күптәр өсөн шәхси дошманға әйләнгәйне. Ул бар донъяны ҡурҡыу аҫтында тотҡан террористарҙың береһе булды. Тик шулай: Усама бен Ладендың үлеме хаҡындағы был хәбәр беренсегә генә яңғырамай. Әле 2001 йылдың аҙағында уҡ АҠШ Афғанстан территорияһын көслө утка тотоп, бен Ладендың үлтерелеүе хаҡында хәбәр иткәйне, ләкин был хәбәр дөрөҫлөккә тап килмәй булып сыҡты. Унан һуң Усама бен Ладены тағы ла әллә күпме тапҡыр "үлтерҙеләр". Бөгөнгө көндә һүҙ алып барылған "юҡ итеү", иң кәмендә, дүртенсеһе. Һәм һуңғыһымы икән?

"АссошиЭйтед Пресс" агентлығы, Америка Президенты хакимиәте вәкиле һүҙҙәренә һылтанып, "ДНК һөҙөмтәһе 99,9 процент менән Пакистанда юҡ ителгән кешенең нәк Усама бен Ладен булыуын иҫбатлай", тип белдерҙе белдереүгә. Ышанырға тура килер, ахыры, фәнгә ҡаршы барып булмай. Ләкин фәндең нимә "әйткәнен" беҙгә еткереүселәргә ышанып буламы? Усама бен Ладендың үлтерелеүе хаҡында рәсми рәүештә иғлан ителһә лә, уның үле кәүҙәһен бер кем дә күрмәгән. Американың ҡайһы бер телеканалдары:"Уның мәйете, мосолман ҡанундары буйынса, үлгән көндә үк, ҡояш батмаҫ элек ерләнде",- тип белдерһә, икенселәре: "Уның кәүҙәһе, ҡәберенән табыныу урыны эшләмәҫ өсөн, Аравий диңгеҙенә "күмелгән"- тип раҫлай. Бер ҡасан да үҙ дошмандары менән наҙланып тормаған АҠШ, бөгөн килеп, ни өсөн иң ҡурҡыныс дошманы һанаған кешене "кәҙерләп" күмергә булған һуң? Мәҫәлән, Саддам Хөсәйендең үле кәүҙәһе генә түгел, хатта яҙалау моменты ла бар донъяға күрһәтелде. Ә Усама бен Ладендың мосолман булыуы күҙ уңында тотолоп, уға мосолмандарса күмеү ойошторолған, имеш. Ниндәй киң күңеллелек!

Был ваҡиғалар "Ни өсөн был операция нәк ошо ваҡытта үткәрелде һуң?" тигән һорау тыуҙыра. Донъялағы иң көслө хәрби көстәргә, махсус ойошмаларға эйә булған илдәрҙең береһе АҠШ, ысынлап та, быға тиклем террорсының эҙенә шулай оҙаҡ төшә алмағанмы, әллә уңайлы мәлде көткәнме?.. Бында бер нәмәгә иғтибар итмәй булмаҫ, ахыры. Бөгөнгө көндә, төрлө тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, АҠШ президенты Барак Обама йәшен тиҙлегендә үҙ һайлаусыларын юғалта, йәғни, уның популярлыҡ рейтинғы һуңғы арала түбәнәйә бара. Ә 2012 йылда Америкала президент һайлауҙары үтергә тейеш. Обама унда икенсе срокка үҙ кандидатураһын ҡуясағын белдерҙе лә инде. Быңдай осраҡта, рейтингты күтәрер өсөн, донъяға ниндәйҙер сенсацион хәбәр еткереү - иң ҡулай вариант. Оҙаҡ йылдар донъя террорсыларының идеологик "атаһы" булған Усама бен Ладены юҡ итеү хаҡындағы хәбәр һөҙөмтәһе иң көслө бомба шартлауынан да көслөрәк тәьҫир итте. Обаманың телевидение аша сығышынан һуң мең-мең америкалылар "Усама, һау бул!" һәм "Тағы ла дүрт йыл!" тигән һүҙҙәр менән урамдарға сыҡты. Был һүҙҙәр Барак Обамаға тағы ла дүрт йыл президент срогы тәьмин ителеүе тураһында һөйләй. Бен Ладены юҡ итеү, беренсенән, Обаманың популярлығын күпкә арттырһа, икенсенән, башҡа ваҡиғаларҙан халыҡтың күҙен яҙлыҡтырыу өсөн дә ҡулай булды, шикелле. Ысынлап та, был операцияның нәк ғәрәп илендәге ваҡиғаларҙың ҡуйырған сағына тура килеүен әйт әле! Ошондай ваҡиғалар шаршауы артында ниндәйҙер бер ғәрәп илендә барған хәлдәрҙе күреү ауырыраҡ шул. Ә бәлки "һаҡһыҙ" рәүештә үлтерелгән балалар (Муаммари Каддафиҙың ейәндәре) өсөн яуап тотмаҫ өсөн, йәмәғәтселек иғтибарын икенсе юҫыҡҡа йүнәлтергә кәрәк булғандыр? Хәҙер инде ошо хәбәр ышығында Ливияла ер өҫтө хәрби хәрәкәтен башлаһаң да, Каддафиҙы юҡ итһәң дә була һәм бының өсөн бер кем бер һүҙ әйтмәйәсәк.

Усама бен Ладены юҡ итеү операцияһы элекке союздаштар - АҠШ һәм Пакистан араһындағы мөнәсәбәттәрҙең һыуыныуына килтерҙе. АҠШ Пакистанды уның территорияһында ошондай оло операция буласағы хаҡында иҫкәртергә "онотҡан", имеш. Пакистан Усама бен Ладендың нәк үҙ территорияһында йәшеренгәнлеген белгәнмеюкмы, уныһын әйтеү ауыр, ләкин нисек кенә булмаһын, Пакистан бөгөн ауыр хәлдә. Беренсенән, Америка менән мөнәсәбәттәр тамам хәртәйеп китеүе бар, икенсенән, ил эсендәге хәлдәр ҙә ҡыуанырлыҡ түгел, сөнки Пакистан халҡына американлыларҙың улар илендә "үҙ өйҙәрендәге" кеүек ҡыланыуы бөтөнләй оҡшамай. Бер кемгә лә оҡшамаҫ ине...

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**19 май "Бергә тибә беҙҙең йөрәктәр"** исемле концерт программаһы менән ижад миҙгелен тамамлай. Был тамашала Халыҡ ҡоралдары милли оркестры, Эстрада-джаз оркестры, "Каруанһарай", "Далан", "Ихлас", "Йәдкәр", Фәдис Ғәниев етәкселегендәге эстрада төркөмө һәм солистар: Азат Айытколов, Иҙрис Ғәзиев, Рим Ғәрәев, Римма Амангилдина, Вәхит Хызыров, Лариса Петрова, Нәзифә Ҡадырова, Лилиә Ишемйәрова, Юлиә Ғәбитова, Рафаэль Сәғитов, Урал Мортазин, Сәйҙә Ильясова һәм башҡа сәхнә оҫталары ҡатнаша.

Башлана 19.00

**20 май** филармония алдындағы майҙанда ойоштороласаҡ **"Йәшлек дарьяһы"** концертына рәхим итегеҙ. Айгиз Ғиҙәтуллин, Вадим Зәкиев, Искәндәр Ғәзизов, Юлиә Ғәбитова, Рафаэль Сәғитов, Гөлнур Ҡарабулатова, Азат Биксурин, Рөстәм Шәрипов, Илшат Ишморатов, Рәил Өмөтбаев, Рәдиф Зарипов, Айгөл Һағынбаева, Алтынай Юнысова, Шәһит Хамматов, Венер Ҡамалов, Салауат Мөхәмәтйәров, "Далан", "Арғымаҡ", "Йәш Каруанһарай" төркөмдәре һеҙҙе күркәм тамашала көтөп ҡала. Яратҡан артистарығыҙ менән бергә йырлап-бейеп, күңел асып ҡайтығыҙ һәм килһе миҙгел асылғанға тиклем юғары рухта, күтәренке кәйефтә йәшәрһегеҙ.

Башлана 19.00

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**Ҙур сәхнә**

**7 май "Минең ғаиләм"** (Т. Дәүләтбирҙина), мелодрама

**10 май "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия

**13 май "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйә

**14 май "Әхмәтзәки Вәлиди Туған"** (Н. Асанбаев), тарихи драма

**Бәләкәй сәхнә**

**12 май "Ҡыҙыҡ был тормош!.."** (В. Шукшин), хикмәттәр

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**12 май "Эх, егеттәр, егеттәр..."** (Билал Аппаев), комедия-фарс

**12 май "Мөхәббәт китабы"** (Инна Вәлиева), драматик әкиәт. Башлана 11.00

ЕНӘЙӘТИ ДОНЪЯ

## Казинолар тураһында хәбәр ит

**БР Эске эштәр министрлығының рәсми сайтында "Казино.Нет" акцияһы старт алды. Интернет менән ҡулланыусы һәр кеше унда аноним рәүештә уйын клубтары тураһында мәғлүмәт ҡалдыра ала.**

2011 йылдың өс айы эсендә Эске эштәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре тарафынан 104 ҡомарлы уйын ойошмаһы эшмәкәрлеге туктатылған, 2 мең 450 уйын аппараты тартып алынған. Әлеге ваҡытта Өфө, Ағиҙел, Белорет, Бөрө, Мәләүез, Нефтекама, Стәрлетамаҡ ҡалаларында, Бөрйән, Иглин, Кушнаренко, Өфө районы районларында лотерея ҡоролмаһында контрафакт программа ҡулланыу факты, казинола ҡомарлы уйындар ойоштороу эшмәкәрлеге буйынса енәйәт эштәре ҡуҙғатылған.

2011 йылда Өфөлә алты йәшерен казино асыҡланған. Үткәрелгән оператив-тикшереү саралары һөҙөмтәһендә покер уйыны өсөн тәғәйенләнгән өҫтәлдәр, уйын фишкалары тартып алынған. 24 административ хоҡуҡ боҙоу теркәлгән. Оператив мәғлүмәттәргә ярашлы, республикала ҡомарлы уйын эшмәкәрлеге менән шөғөлләнеүсе 100-гә яҡын клуб эшләй. Шуға ла Эске эштәр министрлығы граждандарҙы быңдай клубтар менән көрәшкә ҡушылырға саҡыра.

## Водителдәр үҙҙәре ғәйепле

**Баш ҡаланың полиция хеҙмәткәрҙәре автотранспорт урлауға махсуслашҡан 34 йәшлек бурҙы тотҡан. Уның йортонда 300-гә яҡын урланған әйбер табылған.**

Бур йорт ихаталарында ҡарауһыҙ ҡалған машиналарҙың тәҙрәләрен ярып, уның эсенән шәхси әйберҙәрҙе: документтарҙы, магнитолаларҙы, аудиоколонкаларҙы, радарҙарҙы урлаған. Ул әйберҙәрҙән бер өлөшөн өйөндә һаҡлаған, ҡалғанын оҫһоҙ хаҡҡа һатҡан.

- Беҙҙең водителдәр машинала күп әйбер ҡалдыра һәм машинаһын махсус урындарға ҡуймай. Һөҙөмтәлә шәхси әйберҙәр юғала, машинаны ремонтларға тура килә, - ти ҡаланың эске эштәр идаралығының милиция подполковнигы Владислав Тарунов.

Әлеге ваҡытта бур һаҡ аҫтына алынған һәм 20 енәйәт факты дәлилләнгән. Хәҙер уның башҡа енәйәттәргә ҡатнашлығын тикшерәләр.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ай Көсөк ауылында тыуып үҫеп, хәҙер Учалы ҡалаһында йәшәүсе ҡәҙерле тормош иптәшем, атайыбыҙ, олатайыбыҙ **Рәис Ғилман улы Шәрәфетдиновты** 75 йәшлек юбилейы менән ихлас күңелдән ҡотлап, йөрәк түренән сыҡҡан иң изге, иң саф теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ. Ҡәҙерле кешебеҙгә ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, күңел тыныслығы, ғүмерҙең оҙонон, бәхеттең иң олоһон теләйбеҙ.

*Барыбыҙға оло терәкһең һин,*
*Һин булғанда беҙ бик бәхетле.*
*Тормош йәмен, матурлығын тойоп,*
*Йәшә, әйҙә, йөҙгә еткәнсе.*

**Ҡотлау менән, ҡатыны, ҡыҙы, улдары, килендәре, ейән-ейәнсәрҙәре.**

**Казенное предприятие РБ Редакция журнала "Шоңҡар" сообщает, что по результатам состоявшегося 29 апреля 2011 года аукциона по продаже государственного имущества РБ, автомобиля ГАЗ-31105, 2005 года выпуска, государственный регистрационный номер С 360 ЕН 02, находящегося в оперативном управлении КП РБ Редакция журнала "Шоңҡар" продан Цыганкову Андрею Юрьевичу (г. Уфа) по цене 59740 (пятьдесят девять тысяч семьсот) рублей.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҺӘР ВАҠЫТ БУЛҺЫН БАЙРАМ, -

## шулай ти "Тамыр" балалары

**Кү-мәәәәк балаларҙың бер юлы ҙур шатлыҡ кисергәнен күргәнегеҙ бармы? Юҡмы ни? Ә бына миңә күптән түгел Конгресс Холл бинаһында "Тамыр" студияһы ойошторған оло тантанала меңәрләгән кескәй сабыйҙың бергәләшеп ҡыуанғанын, шатлыҡтары эсенә һыймай, ҡулдары менән сәбәкәйләп, аяҡтары менән тыпырҙатып бейеп ебәргәнен, ихласлап көлгәнен күрергә насип булды.**



Эйе, тап шулай. "Йәйғорло Тамыр" тип аталған быйылғы концертта "Тамыр" йондоҙҙары сәхнәлә йәйғор кеүек балҡып торҙо. Улар ғына түгел, баш ҡалабыҙҙың кескәй тамашасылары ла ҙур бина залын геү килтереп ҡул сапты, дәртле көйҙәргә ҡушылып бейене, йырланы. Үҙҙәрен дә сәхнәгә сығарһаң, биллаһи, бына тигән итеп сығыш яһап төшөрҙәр ине. Шулай булмай ни, бында бит улар зәңгәр экрандарҙан ғына күргән яраткан геройҙары: алып барыусылар Асия Сәлихова, Данил Сәлихов, Искәндәр Ғәлин, Камила Дәүләтбирҙина, Азамат Ҡарабулатов, Салауат Абдулвәлиев, Әҙилә Ишемғужина, "Шәп арба" тапшырыуының алып барыусыһы Фәрхәт ағайҙары Ғәйнетдинов, тәмле-татлы менән һыйларға яратыусы Ләйсән апайҙары Мәзитова, Фәнүник - Зөлфәт Ишбаев, Шүрәле - Шәһит Хамматов менән күҙгә-күҙ осрашты, аралашты. Шунан һуң нисек дәртләнмәйһең дә, нисек ҡыуанмайһың инде! Ә студия ойошторған "Сулпылар - 2010" телевизион конкурсы еңеүселәренә баш ҡалабыҙҙың иң ҙур сәхнәһендә сығыш яһау бәхете тейҙе. Шулай ҙа ҡаушап төшмәне бәләкәстәр. Мәҫәлән, Белорет районы Инйәр ҡасабаһынан килгән, "Игзаков" бейеүен башҡарып барыһын да "аһ" иттергән 6 йәшлек Айгиз Мортазин: "Бер ҙә ҡурҡманымсы, мин бит "Байыҡ"та ла бейенем, ауылда ла концерт булған һайын бейейем. "Игзаков" минең иң яратҡан бейеүем, бынан башҡа тағы әллә күпме бейеүҙәр беләм. Уларҙы миңә атайым өйрәтә", - тине ҡыйыу ғына.



Байрам мәлендә "Тамыр" йондоҙҙары - Ғәлимә Ҡараҙбаева, Йәмил Фазылов, Нурсолтан Ишемғолов исемле бик шәп малай һәм ҡыҙҙар менән байрам тураһында бер аҙ әңгәмә ҡороп алдыҡ. Йәғни беҙ һорау бирҙек, балалар яуап ҡайтарҙы.

**Һеҙгә был байрам нимәһе менән оҡшай?**

**Ғәлимә:** Беҙ был байрамға йыл һайын киләбеҙ, ҡатнашабыҙ. Тағы ла бында күп балалар килә, беҙ улар менән дә танышабыҙ. Уларҙың бөтәһе лә йырлай, бейей. Шуға күрә ныҡ күңелле була. Мин "Шатлыҡ", "Когда мои друзья со мной", "Тамыр йондоҙҙары" йырҙарын башҡарыуҙа ҡатнашам.

**Йәмил:** "Тамыр"ҙың тыуған көнө 2 мартта ул. Беҙ уны һуңғараҡ уҙғарабыҙ. Был байрамда ныҡ күңелле, сөнки күп балалар йыйыла. Мәктәптә уҡығандары ла, һөйләшә белмәгәндәре лә килә. Беҙ сәхнәлә бейегәндә улар беҙгә ҡул болғай, йәки флаг, шар болғап ултыралар. Шуға күңелле була.

**Нурсолтан:** Беҙ "Тамыр"ға йөрөгәс, был байрамда йыл һайын йырлайбыҙ, бейейбеҙ. Мин Йәмил менән бергә ат булып бейейем. Бейергә яратҡас, беҙ йырлағанда ла барыбер бейеп, һикереп йөрөйбөҙ. Беҙҙе ҡарап ултырған башҡа балалар ҙа беҙгә ҡушылып бейей, һикерә, шуға күрә ныҡ күңелле.

**Ә һеҙ тағы ла ниндәй байрамдарҙы беләһегеҙ һәм уларҙың араһынан ҡайһыһы ныҡ оҡшай?**

**Ғәлимә:** Миңә тыуған көн менән Яңы йыл ныҡ оҡшай, сөнки был байрамдарҙа бүләкте күберәк бирәләр.

**Йәмил:** 8 март, Еңеү көнө. Яңы йыл байрамын ныҡ яратам, сөнки унда Ҡыш бабай килеп, беҙгә бүләктәр, тәмлекәстәр тарата. Атайым менән әсәйем дә бүләк һатып ала.

**Нурсолтан:** Байрамдар күп инде ул. 23 февраль, 1 май, Яңы йыл, 8 март байрамдарын беләм. Ауылда 1 май байрамында тауға барабыҙ ҙа йомортҡа тәгәрәтәбеҙ, малайҙар менән йүгерешеп уйнайбыҙ. Ныҡ күңелле була. Шуға миңә ошо байрам оҡшай.

**Улайһа, һеҙ бүләктәр алырға яратаһығыҙ икән, ә үҙегеҙ яҡындарығыҙға бүләктәр биргәнегеҙ бармы?**

**Йәмил:** Беҙ бит әле эшләмәйбеҙ, шуға бүләкте һатып алырға аҡсабыҙ юҡ. Шуға күрә уны үҙебеҙ генә эшләйбеҙ ҙә ҡуябыҙ. Тик күп эшләгәс, нимә бүләк иткәнемде онотоп бөткәнмен.

**Ғәлимә:** Мин 8 март байрамында сәскәләр эшләнем, һәм беҙ уны атайым менән бергә әсәйемә бүләк иттек.

**Нурсолтан:** Мин 8 мартта әсәйемә, 23 февралдә атайыма һүрәттәр эшләп бүләк итәм. Мин дә Ғәлимә кеүек үҙем сәскәләр эшләгәнем бар. Әсәйем сәскәләрҙе ныҡ ярата.

**Бына һеҙ бик талантлы балалар бит инде, йырлайһығыҙ ҙа, бейейһегеҙ ҙә. Ә өйҙә үҙегеҙ концерт ҡуйып, туғандарығыҙға байрам ойошторғанығыҙ бармы?**

**Ғәлимә:** Беҙ йәйгеһен Күгәрсен районы Тәүәкән ауылына ял итергә барабыҙ. Унда ҡапҡа эсендә түпһә эргәһенә ағайымдар сәхнә эшләп бирҙе. Беҙ ауыл ҡыҙҙары менән йыйылышып алабыҙ ҙа ошо сәхнәлә концерт ҡуябыҙ. Йырлайбыҙ, бейейбеҙ, шиғыр һөйләйбеҙ. Өләсәйем, күршеләге инәйҙәр, бәләкәс балалар килеп беҙҙе ҡарап ултыра.

**Йәмил:** Ә мин йәйгеһен, тағы ла ял көндәрендә Архангель районы Тирәкле ауылына барам. Беҙ ҙә унда олатайым менән өләсәйемә концерт ҡуябыҙ.

**Нурсолтан:** Мин концерттарҙы үҙем уйлап сығарып ҡуям. Шуға мин концерт ҡуя башлаһам, бөтәһе лә көлә-көлә ҡарай.

**Тиҙҙән Еңеү байрамы етә. Һеҙ был байрамды беләһегеҙме, был көндә нимә эшләйһегеҙ?**



**Ғәлимә:** Был көндә беҙҙең олатайҙар дошманды еңгән. Шуға күрә ул Еңеү байрамы тип атала. Беҙ туғандарыбыҙ менән паркка сығабыҙ, унда күңелле була: төрлө уйындар уйнаталар, бүләктәр тараталар. Каруселдә өйөрөлөргә була.

**Йәмил:** Өфөлә йыл һайын парад була. Һуғыш ваҡытындағы кеүек һалдаттар йөрөй, хатта урам буйлап танкылар үтә. Еңеү көнө ҙур байрам булғас, был көндә салют та иң ҙуры, иң матуры була. Архангель районында минең Хәбир олатайым менән Тайба өләсәйем йәшәй. Улар ныҡ оло, 80 йәштәләр шикелле. Улар һуғышта булмаған, ә олатайымдың атаһы һуғышта ҡатнашҡан. Һуғышта ҡатнашмаһалар ҙа, беҙ олатайым менән өләсәйемде йыл һайын Еңеү байрамы менән ҡотлайбыҙ. Улар беҙгә үҙҙәренең бала сағы тураһында һөйләй. Олатайым ишеү мулла.

**Нурсолтан:** Элек беҙҙекеләр немецтар менән һуғышҡан. Һуғыш бик оҙаҡ барған. Беҙҙең олатайҙар уларҙы тәки еңгән, сөнки улар ныҡ көслө, батыр булған. Өфөлә Еңеү паркы бар, унда һуғышта ҡатнашҡан батырҙарға һәйкәл ҡуйғандар. Еңеү көнөндә унда балалар, ололар сәскә һала. Минең Рафаэль исемле олатайым бар. Тик ул һуғышта ҡатнашмаған, ул ваҡытта бәләкәй булған. Еңеү көнөндә мин уға берәй бүләк эшләп бирәм.

**Шулай итеп...**

**"Тамыр" байрамдары һәр саҡ булып торһон, был байрам булмаһа, беҙгә күңелһеҙ буласаҡ, ти байрамға килгән балалар. Тимәк, был сара балаларыбыҙ күңеленә йола, йәшәү рәүеше, яҡты донъя булып инеп урынлашҡан. Ошо сихри байрамдың ҡатнашыусыһы, шаһиты, тамашасыһы булған балаларҙың бәхетенә һоҡланмау мөмкин түгел. Афарин, "Тамыр"ҙы йәшәтеүселәргә!**

Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА
яҙып алды.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# МАЛ КЕШЕНЕ БАЙЫТМАЙ...

## уны тота белеү байыта

Мең көн ҡолға булып йөрөгәнсе, бер көн кеше булыуың яҡшы.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Беҙҙең арала күгәрсен-кешеләр, бөркөт-кешеләр, ҡоҙғон-кешеләр бар. Һуңғылары күберәк.

**(И. Шевелев).**

Һәр кемдә Тереза инәй һәм Гитлер йәшәй. Уларҙың кемеһе еңергә тейеш икәнен үҙең һайлайһың инде...

**(Э. Кублер-Росс).**

Кешеләр бер-береһенә һәр саҡ шикләнеп ҡарай һәм һәр ваҡыт һөжүм көтә. Шуға ла улар яуыз.

**(Ю. Нагибин).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бөйөк батша Аҡбарҙың һарайында туғыҙ аҡыл эйәһе йәшәй. Батша уларҙы күп йылдар аҫырай. Әммә берҙән-бер көндө батша был аҡыл эйәләренең файҙаһыҙ булыуын, уларҙан бер ниндәй аҡылға ла өйрәнмәүен аңлап ҡала. Асыуланып китеп, аҡыл эйәләрен үҙенең янына саҡырып ала ла былай ти: "Һеҙҙе барыһы ла донъялағы иң аҡыллы кешеләр, тип раҫлай. Ләкин һеҙ нисәмә йылдар буйы минең эргәмдә йәшәйһегеҙ, ләкин мин һеҙҙән бер ниндәй аҡылға ла өйрәнмәнем. Шулай булғас, һеҙ минең һарайымда нимә эшләйһегеҙ ул?" Аҡыл эйәләренең береһе үҙе менән бер бәләкәй малайҙы алып килгән була. Аҡбарҙың телмәренән һуң был малай ҡыҫҡырып көлөп ебәрә. Батша асыулана һәм: "Һин кем алдында ауыҙ йырғаныңды беләһеңме, гонаһ шомлоғо? Әллә атайың һине был һарайҙа, батша алдында үҙеңде нисек тоторға өйрәтмәнеме?" - тип ҡысҡыра. "Ғәфү ит мине, бөйөк батша! - ти малай. - Минең көлөүем һине мыҫҡыллауҙан түгел, минең көлөүем аҡыл эйәләренең һүҙһеҙ ҡалыуынан. Мин уларҙың өндәшмәүенең сәбәбен беләм, һинең, батшам, уларҙан бер нигә лә өйрәнә алмауыңдың да сәбәбен беләм". Аҡбар баланың балалыҡ сафлығы менән балҡыған күҙҙәренә һәм йөҙөнә оҙаҡ ҡына текәлеп ҡарап тора ла: "Улай булғас, бәлки, һин мине нимәгәләр өйрәтә алырһың?" - тип һорай. "Өйрәтәм!" - ти малай шатланып. "Өйрәт һуң улай булғас!" - ти батша. "Тик һин, батшам, нимәгәләр өйрәнеү өсөн башта тәхетеңдән төшөргә тейешһең. Тәхеткә мин менеп ултырғас, һин миңә батша булараҡ түгел, ә уҡыусы булараҡ һорауҙар бирергә тейешһең", - ти малай. Аҡбар, ысынлап та, тәхетенән төшөп, иҙәнгә ултыра. Ә малай батшаның тәхетенә менеп ултыра һәм: "Хәҙер инде, батшам, һорауҙарыңды бир!" - ти. Әммә Аҡбар бер ниндәй ҙә һорау бирмәй, ә башы менән эйелеп, малайҙың аяҡтарына ҡағыла һәм былай ти: "Һинең аяҡтарың янында һинең ихтыярыңа буйһоноп ултырыуҙан ғына ла мин күп нәмәгә өйрәндем. Рәхмәт һиңә!"**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 6206
Заказ 1711